ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

25-31 ғинуар (һыуығай) 2020

№4 (890)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Милли идеяға тиндер тыуған яҡты өйрәнеү ҙә 3



Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла! 8-9



Йәштәребеҙ ситкә китмәһен, ситтәрҙе йәр итмәһен 11



Вәзәм сәкәне 12-13



ТВ-программа 14

***Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! 2020 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылырға һуңлаған таныштарығыҙға хәбәр итегеҙсе: улар республиканың һәр ауылында, ҡалаһында 17 февралгә тиклем яҙылып, гәзитебеҙҙе марттан алдыра башлай ала. ПР905 индекслы "Киске Өфө" дүрт айға 450 һум 68 тингә төшәсәк. Бергә булайыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Дәүләт тарафынан күрһәтелгән һәр төрлө льготалар һәм социаль ярҙам саралары тураһында беләһегеҙме һәм уларҙың һеҙгә тейеше менән файҙаланаһығыҙмы?

***Константин ТОЛКАЧЕВ, БР Дәүләт Йыйылышы - Королтай рәйесе:*** Иң тәүҙә был һорауға аңлатма биреп китеү кәрәк. Рәсәйҙә 380 төрлө льгота ғәмәлдә, тип белдерелә күптән түгел Рәсәй Хөкүмәтендә. Шуның менән 40 млн рәсәйле файҙалана. Рәсәй Хеҙмәт министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, тағы ла шунсама кеше үҙҙәренә тейешле льготаларҙы юллап мөрәжәғәт итмәгән. Башҡортостанда ла шундай уҡ хәл: республика халҡының өстән бер өлөшө дәүләт тарафынан күрһәтелгән һәр төрлө ташламалар менән файҙаланмай. Улар нигеҙҙә инвалидтар, күп балалы ғаиләләр һәм льготаға хаҡы булған башҡа категория кешеләр. Шулай килеп сыға: беҙ законлар ҡабул итәбеҙ, ғәмәлдә иһә улар эшләмәй, халыҡтың тормош хәле лә еңеләймәй. Бындай хәлдең сәбәптәре төрлө, ләкин күпселек осраҡта был үҙҙәренең хоҡуҡтары һәм льготаларҙы алыу тәртибе хаҡында халыҡтың хәбәрҙар булмауы. Беҙгә законлар ҡабул итеү генә аҙ, кешеләргә уның файҙаһы тейһен өсөн һайлаусылар менән осрашыуҙарҙа, матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары аша федераль һәм республика льготалары хаҡында халыҡҡа аңлатырға, хәбәр итергә лә кәрәк. Был күп йәһәттән урындағы депутаттарҙың нисек эшләүенә лә бәйле. Дөрөҫ, башҡа төбәктәр менән сағыштырғанда Башҡортостанда был йәһәттән хәл яҡшыраҡ, ләкин барыбер льготаларҙың байтаҡ өлөшө талап ителмәй ҡала бирә. Льготаларға ҡағылышлы яңы законлар тураһында халыҡҡа аңлатыу эштәре алып барыу мәсьәләһе яҙғы сессияла парламентарийҙарҙың төп бурысы буласаҡ. Законлар улар артабан файҙаланылмай ятһын өсөн ҡабул ителмәй.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# ТАТЫУ ҒАИЛӘ...

## спорт менән дә дуҫ

**Ошо көндәрҙә баш ҡала республиканың спорт һөйөүсе ғаиләләре араһында "Яңы йыл ғаилә уйындары - 2020" фестиваленең финалы үтте. Унда оҙайлы ҡышҡы ялдар мәлендә ваҡыттарын файҙалы үткәреүҙә хуп күреп, тәүҙә ауылдары кимәлендә, һуңынан районда беренселекте яулап, республика кимәленә сыҡҡан 70 ғаилә ҡатнашты. Етеҙлеккә, тырышлыҡҡа, сыҙамлыҡҡа ҡоролған күңелле спорт уйындарында ике төркөмгә бүленеп сығыш яһаған ғаиләләр араһында Әбйәлил районынан Даушевтар һәм Стәрлетамаҡтан Ҡотдосовтар ғаиләһе еңеүсе тип табылды.**



"Яңы йыл ғаилә уйындары - 2020" сараһы Башҡортостанда беренсе тапҡыр үткәрелеүгә ҡарамаҫтан, быйыл унда республиканың 300 мендән ашыу халҡы ҡатнашҡан. Фестиваль сиктәрендә ойошторолған күңелле старттарҙа 103500 кеше ярышҡан (был 13470 ғаилә командаһы), шулай уҡ 27 спорт төрө буйынса ғаиләләрҙең спорт сараһында 216144 кеше ҡатнашыуы теркәлгән. Район кимәлендә спорт сараларын ойоштороу буйынса Әбйәлил беренселектә - унда йәмғеһе 27671 кеше ярыштарҙа үҙ көсөн һынап ҡараған. Шулай уҡ республиканың Илеш (21861 кеше), Баймаҡ (10740), Благовещен (10100), Ишембай (8860) райондары, Сибай ҡалаһы (6600), Өфө ҡалаһының Калинин районы (37941) халҡы ял көндәрен ғаиләләре менән файҙалы итеп үткәреүгә өҫтөнлөк биргән. "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Сәләмәт быуын - көслө төбәк" проекты сиктәрендә ойошторолоп, киң ҡолас йәйгән барлыҡ был ярыштарға йомғаҡ яһау ниәтендә Өфөләге "Динамо" стадионына республиканың ин-индәре йыйылды ла инде. Улар ике төркөмгә бүленде: беренсеһендә балалары 1-2 синыфта уҡығандар, икенсеһендә 3-4 синыфта уҡыған балалары булған ғаиләләр һынау тотто. Республика халҡын сәләмәт тормош алып барырға һәм әүҙем ял итергә өндәп уҙғарылған сара ғаилә ағзалары, райондаштар араһында туғанлыҡ, дуҫлыҡ ептәрен дә нығытыуы командаларҙың көйөрмәндәре, дәртләндереп торор кешеләре күп килеүенән күренде. Тәүге башланғыстың бына шундай ыңғай ҡабул ителеүен күргән БР йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Руслан Хәбибов, киләсәктә фестиваль йыл да уҙғарыласағы һәм яҙ, көҙ миҙгел уйындарын да ойоштороу маҡсатлы буласағы тураһында хәбәр итте. Ике сәғәт дауам иткән ярыш һөҙөмтәләре буйынса 1-2-ләр араһында **Әбйәлил районы Амангилде ауылынан Даушевтар командаһы** (һүрәттә) еңеү яулаһы һәм "Красноусол" шифаханаһына юллама отто. Ә бына икенсе төркөмдә Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Ҡотдосовтар ғаиләһенә беренселектә етеүсе булманы, улар "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһында ял итәсәк.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

**✓ Пособиеларҙан тыш та дәүләт тарафынан бик күп социаль ярҙам саралары ҡаралған. Үкенескә, шуларҙың ҡайһылары муниципаль власть ҡарамағында булмаған бәғзе бер ойошмалар тарафынан бигүк иҫәпкә алынып бармай.**



АФАРИН!

# ТАТЫУ ҒАИЛӘ...

## спорт менән дә дуҫ

**(Башы 1-се биттә).**

- Ауылда үткәрелгән спорт ярыштарында, ғаилә конкурстарында ҡатнашып торабыҙ, ә бына республика кимәлендәгеһендә - тәүге тапҡыр. Бында килеү өсөн башта ауылда үткәрелгән ярышта, һуңынан районда 21 команда араһында беренселек яуланыҡ, - тип һөйләне спорт уйындары тураһында Наилә Даушева. - Беҙ ирем Илнур менән өс бала тәрбиәләп үҫтерәбеҙ: өлкән улыбыҙ Илдар 6-сы синыфта уҡый, икенсебеҙ Динислам 2-се синыфта белем ала, ҡыҙыбыҙ Азизаға 4 йәш. Фестивалгә Динислам улыбыҙ менән сыҡтыҡ, ул мәктәптә уҙғарылған төрлө ярыштарҙа актив ҡатнашып, спортҡа ылығып үҫеп килә. Әйтергә кәрәк, еңеү яулауы бик еңелдән булманы, бөтә командалар ҙа яҡшы әҙерләнеп килгән, сәмлеләр, дәрт-дармандары ташып тора. Беҙгә көн дә кистәрен бөтә ғаилә менән өйҙә гимнастика, төрлө күнегеүҙәр яһау ғәҙәтебеҙ һәм мәктәбебеҙҙең физкультура уҡытыусыһы Нил Ҡужахмәтовтың күнекмәләр үткәреүе бик ярҙам итте. Ауыл ерендә махсус спорт майҙансыҡтары, күнекмә залдары булмаһа ла, беҙҙең халыҡ дәртле - ҡышҡыһын саңғыла йөрөйбөҙ, йәйҙәрен көндәлек мәшәҡәттәр менән йүгереп сынығабыҙ. Балаларға мәктәптә дәрес мәлендә волейбол, баскетбол уйнарға, күнекмәләр эшләргә, еңел атлетика, саңғы, гимнастика менән шөғөлләнеү мөмкинлеге бар. Шуныһы ҡыҙғаныс, оҙайлы йәйге каникулдар мәлендә мәктәп ял иткәндә ҡулайлы булыр ҡалалағы кеүек махсус спорт майҙансығы юҡ ауылдарҙа. Өфөлә лә күргәйнек, урамда теләгән берәү килеп шөғөлләнә алырлыҡ күнекмәләр өсөн ҡорамалдар ҡуйылған майҙансыҡтар бар, балалар урамда бушты-бушҡа ауҙарып йөрөмәһен өсөн шәп бит инде был. Дөрөҫөн әйткәндә, был ғаилә спорт уйындарын уҙғарыу ҙа ауыл халҡын шул тиклем йәнләндереп ебәрҙе. Көн артынан көн үтеп тик барыр ине, ярышып төрлө кешеләр менән танышып, үҙ көсөбөҙҙө һынап ҡайттыҡ, исмаһам. Ғаилә ағзалары араһында татыулыҡты ла нығыта бындай саралар, балалар менән дә уртаҡ тел табып, уларға өлгө күрһәтә алыуың да мөһим атай-әсәй өсөн. Бына шулай, бик ҡәнәғәтбеҙ был фестивалдән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Яңы йыл ғаилә уйындары - 2020" фестивалендә ҡарты-йәше ихлас ҡатнашыуының сере нимәлә, тигән һорауға яуапты бик күптәр эҙләгәндер моғайын. Ә беҙҙеңсә, уның төп сәбәбе - республикабыҙҙа татыу ғаиләләр, өлгөлө атай-әсәйҙәр һәм сәләмәт балалар күп булыуында. Сөнки тап шундай ватандаштар спорт уйындарының үҙәгендә булды һәм фестивалде ҙур бер байрам сараһына әүерелдерҙе, быйыл ҡатнашырға ҡыймай ҡалғандар күңеленә лә дәрт-дарман өҫтәне, сәмләндерҙе. Киләсәктә лә миҙгел һайын үткәреләсәк төрлө спорт уйындарында ҡатнашыусылар һаны артһын, республиканың бер төбәге лә ошо матур йолаға әүерелер сараларҙан ситтә тороп ҡалмаһын ине.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Дәүләт тарафынан күрһәтелгән һәр төрлө льготалар һәм социаль ярҙам саралары тураһында беләһегеҙме һәм уларҙың һеҙгә тейеше менән файҙаланаһығыҙмы?



**(Башы 1-се биттә).**

***Ғәлиә ФӘЙЗУЛЛИНА, пенсионер:*** Үкенескә, тейеше менән дә файҙаланып булмай был льготаларҙың, теге йәки был сәбәп табылып ҡына тора. Йәшем буйынса мәле килеп еткәс, йәшәгән ерем буйынса район Пенсия фондының район бүлексәһенә пенсия юлларға килдем. Документтарҙы йәш кенә ҡыҙыҡай ҡабул итте. Яңы ғына эшләй башлағаны күренеп тора ине: минең күпселек һорауҙарыма икеләнеп, ҡыҙарып-бүртенеп йүнле яуап та бирә алманы. Яуаптарының да күбеһен интернеттан ҡарап әйтте. Начальник урынында юҡ ине, бер айлыҡ курсҡа уҡырға киткән, тинеләр. Үҙенең урынына бына ошо хеҙмәткәрен ебәрһәсе уҡырға, тип уйланым аҙаҡ. Эйе, аҙаҡ иҫкә төштө ошо уй, сөнки әллә белмәүе, әллә онотоуы сәбәпле, минең документтарҙы барлап еткермәгән, ҡыҙыҡһынмаған, үҙем дә алып барырға онотҡанмын. Почта хеҙмәткәре булараҡ, бик күптән, 1991 йылда Элемтә министрлығының почет грамотаһы менән бүләкләнгәйнем һәм шуның нигеҙендә миңә "Хеҙмәт ветераны" исемен алырға мөмкин булыуын аҙаҡ ҡына белдем, ләкин һуң ине инде. Оҙаҡ йылдар намыҫлы эшләүемә ҡарамаҫтан, байтаҡ льготаларға мөмкинлек биреүсе "Хеҙмәт ветераны" исеменән ҡолаҡ ҡаҡтым. Сәбәбен шулай аңлаттылар: мин пенсияға 2017 йыл сыҡтым, ә 2016 йылдың 1 июлендә Рәсәй Хөкүмәте тарафынан "Хеҙмәт ветераны" исеме биреүгә нигеҙ була алған Министрлыҡтарҙың исемлеге раҫлана, ләкин Элемтә министрлығы был ваҡытҡа Министрлыҡ булыуҙан туҡтап, "Рәсәй почтаһы" акционерҙар йәмғиәте итеп үҙгәртелә. Ә предприятие һәм компаниялар грамотаһы "Хеҙмәт ветераны" исеме биреүгә нигеҙ була алмай, тинеләр. Бер юрист, апай, һеҙгә был звание бирелергә тейеш, тағы барығыҙ, юллағыҙ, тигәйне лә, ҡырталашып йөрөмәнем. Ундағы "сират күпере"н үтергә кәрәк, унан ниндәйҙер өҫтәмә документтар талап итә башларҙар. Етмәһә, эш башлағанда, ауылдағы бәләкәй генә күрше утарға почта ташыған ярты йылым дөйөм стаж иҫәбенә индерелмәй ҡалған. Шуны юллағанда, ветеран исемен биреүҙәрен дә һорап ҡарармын, тейем әле, килеп сыҡһа...

***Нәсимә ЙӘҒӘФӘРОВА, күп балалы әсә:*** Күп балалы ғаиләләр өсөн тәғәйен пособие һәм башҡа аҡсалата түләүҙәрҙе алып торабыҙ, дәүләтебеҙгә рәхмәтлебеҙ. 15 ғинуарҙа ил Президенты В.Путиндың Федераль Йыйылышҡа сираттағы Мөрәжәғәтнамәһенең дә үҙәгендә ғаилә мәсьәләләре торҙо. Был, ниһайәт, киләсәктә балалар тәрбиәләү бурысына өмөт менән ҡарарға мөмкинлек бирә. Пособиеларҙан тыш та дәүләт тарафынан бик күп социаль ярҙам саралары ҡаралған. Үкенескә, шуларҙың ҡайһылары муниципаль власть ҡарамағында булмаған бәғзе бер ойошмалар, ведомстволар тарафынан бигүк иҫәпкә алынып бармай. Мәҫәлән, күп балалы әсә булараҡ, минең ике аҙналыҡ өҫтәмә отпуск алырға хоҡуғым бар, ләкин мин бындай ташлама менән файҙаланғаным юҡ. Әгәр дәүләт предприятиеһында эшләһәм, проблема булмаҫ ине, ә бына коммерция ойошмаһында бындай мәсьәләгә ҡырын ҡарайҙар һәм хуплап бармайҙар. Шуға ла ул ике аҙна хатта түләүһеҙ булһа ла, мин был турала һүҙ башларға батырсылыҡ итмәйем. Ә инде түләүле өҫтәмә бер көн ялға, шулай булғас, өмөт тә итергә түгел, тип уйлайым. Әлбиттә, етәксебеҙ улай уҡ аңламай торған ҡырыҫ кеше лә түгел, тик барыбер уңайһыҙ, юғиһә бит, минең эште кемдер башҡарырға тейеш була. Кешегә ауырлыҡ һалғым килмәй. Балаларҙың атаһы заводта эшләй, икебеҙҙең дә эш графигы көсөргәнешле. Шуға, уларға күберәк ваҡытыбыҙҙы биреп тә булмай китә, ярай әле балаларҙы әсәйем ҡараша. Әле яңыраҡ ҡына интернеттан уҡып белдем: күп балалы ғаиләләрҙә балаларҙы музейға, театрға, бассейнға йә спорткомплексҡа йөрөтөү хаҡы өсөн компенсация тейеш икән, шуны ла белмәгәнбеҙ. Был хаҡта ошоға тиклем бер ниндәй мәғлүмәт юҡ ине бит. Шулай уҡ байрамда балаларға бүләк-күстәнәстәр тейешлеген дә яңы ғына, ғаилә мәнфәғәттәренә ҡағылышлы мәсьәләләр ҡуҙғатыла башлағас ҡына белдек. Бәлки, был хаҡта белгән булһаҡ та уны юллап, артынан йөрөп булмаҫ ине. Башҡа төрлө ташламалар өсөн дә әллә күпме документ юллап йүгерергә тура килде, ҡағыҙ волокитаһы, үҙеңдең "дөйә түгеллегеңде" иҫбатлау, ҡырын ҡараштар шул тиклем ялҡытҡан...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ТЕЛ ОСОМДАҒЫ ҺҮҘ...

Хаталанмай йәшәү мөмкин түгелдер был донъяла. Үҙ ғүмерендә әҙәм балаһы мең ҡат хаталана, мең ҡат яңылыша. Мин үҙем дә күп хаталандым. Ҡайһылары һаманға тиклем үкенесле, ҡайһылары йәшәй-йәшәй ирмәк хәтирәләр генә ҡалдырған. Үҙ хатаһын кәм итеп, кешенекен дөйәләй итеп күрһәтеү, тәкәбберлекте ғорурлыҡ тип алданыу һәм аҡланыу хас бик күптәргә. Хата гонаһ түгел дә, Аллаһ алдында ярлыҡау һорарға түгел, тигән фекер менән йәшәйбеҙ.

Ике танышымдың икеһененең бер үк ситуацияла үҙ-үҙен тотошо тураһында яҙмаҡсымын. Хата аҙымды икеһе лә уйламай эшләнеләр, уныһы шулай. Тик береһе шундуҡ янымa килеп, ғәфү үтенде, аңлаштыҡ. Арабыҙҙа бер генә сүп тә ҡалманы. Киреһенсә, уға ҡарата хөрмәтем бермә-бер артты. Икенсеһе күҙ йәшереп, юл яҙлыҡтырып ( баҫтырып йөрөмәһәм дә) йөрөр булып китте. Хатаһы өсөн сәбәләнеп, яңы хаталар яһаны. Күкрәгендәге төйөрө өйкәй, күрәһең. Өйкәмәһә, сәбәләнмәҫ ине. Ә хата барыбер онотолдо, ҡараш ҡына ҡалды...

Эйе, дүрт аяҡлы ат та һөрөнә. Кеше күңелен ҡыйған хаталарҙы йылы уста ойпалап, елгә осороп ебәрер өсөн ике генә һүҙ етә. Яратам мин шул ике һүҙҙе: ғәфү ит. Үҙ ғүмеремдә күпме ишеттем, нисәмә тапҡыр үҙем әйттем шул һүҙҙәрҙе. Тылсымын был һүҙҙәрҙең татыған кеше генә белә. Шул һүҙҙәр арҡаһында донъям теүәл, күңелем бөтөн. Күңелемде өйкәгән бер төйөр ҙә юҡ. Хаталанмай йәшәмәм тип әйтә алмайым. Тик беләм: тел осомда шул матур ике һүҙ бар.

**Наилә ХӘМБӘЛИЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Башҡортостандың халыҡ шағиры, сәйәси һәм йәмәғәт эшмәкәре Рәми Ғариповтың тыуыуына 90 йыл тулыуҙы байрам итеү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Саралар әҙерләү һәм уҙғарыу буйынса сығымдар Башҡортостан Республикаһы бюджетында ҡаралған аҡса иҫәбенә һәм бюджеттан тыш сығанаҡтар иҫәбенә тормошҡа ашырыла. Документҡа ярашлы, хөкүмәт премьер-министры урынбаҫары Фәнүр Йәғәфәров етәкселегендә саралар әҙерләү һәм уҙғарыу буйынса республика ойоштороу комитеты составы раҫланды.

✓Радий Хәбиров Көйөргәҙе районына эш сәфәре барышында Шәбағыш ауылында йәшәгән Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Рәшит Ишморатовҡа һуғылды һәм уны яҡынлашып килгән Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығы менән ҡотланы, телевизор бүләк итте. Хәҙерге көндә Көйөргәҙе районында алты Бөйөк Ватан һуғышы ветераны бар, улар араһынан береүһе Ленинград ҡамауында йәшәгән һәм тағы берәүһе - концлагерҙар тотҡоно.

✓Көйөргәҙе районының Ермолаев ауылында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров балаларҙы мәктәп автобустарында нисек йөрөтөүҙәрен тикшереү өсөн эш сәфәренең маршрутын үҙгәртте. Республика Башлығы юлға сығырға әҙерләнгән автобустарҙың береһенә инеп, оҙатыусы һәм балалар менән аралашты. Дөйөм алғанда, ул күргәндәренән ҡәнәғәт ҡалды.

✓Ҡыйғы районы буйлап эш сәфәренән Өфөгә ҡайтышлай Радий Хәбиров Салауат районының Мөрсәлим ауылына инде. Декабрь аҙағында Салауат районы хакимиәте башлығы Марс Кашапов Радий Хәбировты Мөрсәлим ауылы мәҙәниәт йортон асыу тантанаһына саҡырғайны. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2018 йылдың 10 ноябрендә Башҡортостан Башлығы эш сәфәре барышында 1895 йылда уҡ төҙөлгән иҫке клуб бинаһын ҡарағандан һуң хөкүмәткә ауылда яңы клуб һалыу өсөн 50 миллион һум аҡса бүлергә ҡушҡайны.

✓Өфө хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин мэриялағы оператив кәңәшмәлә яңы кадрҙар тәғәйенләү тураһында белдерҙе. Өфө хакимиәтенең кадрҙар тәьминәте һәм муниципаль хеҙмәт идаралығы етәксеһе итеп Айгөл Абзалетдинова тәғәйенләнде. Бынан алда ул баш ҡала хакимиәтенең ойоштороу-контроль идаралығы начальнигы урынбаҫары вазифаһында эшләгән. "Өфө-матбуғат" муниципаль унитар предприятиеһын Азат Фәйзуллин етәкләй.

КӨНАУАЗ

**Башҡортостандың тарихы бай һәм ҡатмарлы. Тарихи Башҡортостан ерлегендәге ваҡиғаларҙы XVIII быуаттан бирле тарихсы ғалимдар ҙа ентекләп өйрәнә, ошо өлкәлә тыуған яҡты өйрәнеүсе айырым шәхестәрҙең хеҙмәттәре лә киң билдәле. Уҙған йылда Башҡортостан Республикаһының Тыуған яҡты өйрәнеүселәр йәмғиәтенең махсус ойоштороу конференцияһы уҙғарылып, ошо йәмғиәттең рәйесе вазифаһына тарих фәндәре кандидаты, БР Милли музейының генераль директоры Марат Миңлеғәли улы Зөлҡәрнәев һайланды. Уның менән тыуған яҡты өйрәнеүселәр эшмәкәрлеге хаҡындағы әңгәмәбеҙҙе һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ.**

# МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТИҢДЕР

## – тыуған яҡты өйрәнеү ҙә



**➔ XXI быуат башында, интернет селтәрҙәре, яңы информацион технологиялар өҫтөнлөк алған дәүерҙә, тыуған яҡты өйрәнеүселәр эшмәкәрлегенә дәүләт кимәлендә иғтибар кәмемәй. Ошо хаҡта аңлатма биреп китһәгеҙ ине.**

- Тыуған яҡты өйрәнеү эшмәкәрлеге Рәсәйҙә XVIII быуатта уҡ башлана. Батша Петр I барса төбәктәрҙә лә урындағы тормош, унда йәшәүсе халыҡтарҙың үҙенсәлектәре хаҡында яҙма мәғлүмәттәр туплау маҡсатын ҡуйған махсус указ сығара. Рәсәйҙә крайҙы, тыуған төйәкте өйрәнеү шул рәүешле башланып китә. Тыуған яҡты өйрәнеү тик тарихи ваҡиғаларҙы теркәүҙән генә тормай, уның тәбиғәтен, географияһын, иҡтисадын, мәҙәниәтен һәм этнографияһын да сағылдыра. Башҡортостан хаҡында XVIII быуатта тупланған материалдар, башлыса, тарихсылар эшмәкәрлеге һөҙөмтәһе ул. Ғөмүмән, төбәктәрҙе, крайҙы өйрәнеү эше Рәсәйҙә XIX быуаттың икенсе яртыһында - XX быуат башында ныҡ әүҙемләшә һәм дәүләт кимәленә күтәрелә.

Совет осоронда, уҙған быуаттың 20-се йылдарында, Башҡортостанда ла Халыҡ мәғарифы комиссариаты әргәһендә тыуған яҡты өйрәнеүселәр ойошмаһы барлыҡҡа килә. Йәш быуында тыуған илгә, тыуған яҡҡа һөйөү тойғоһон ошо юҫыҡта тәрбиәләй алыу мөмкинлеген яҡшы аңлай ул ваҡыттағы етәкселәр. Тыуып үҫкән өйөң тупһаһынан, ауылың тарихынан башлана ватансылыҡ. Шуға күрә тарихсыларыбыҙ ҙа тыуған яҡты өйрәнеү эшен төрләсә хуплап, бындай эшмәкәрлеккә йүнәлеш биреп тора. Тап совет осоронда һәр бер мәктәптә ошондай эштәр башҡарыла, байтаҡ ҡына музейҙар асыла. Крайҙы өйрәнеүселәр күп башланғыстар менән сығыш яһай. Мәҫәлән, ирле-ҡатынлы Григорий һәм Зинаида Гудковтар, Юрий Узиков кеүек энтузиастар Өфө ҡалаһы хаҡында мәғлүмәттәр туплап, киң матбуғат сараларына сығара. Улар ябай тел менән тыуған яҡ тарихын халыҡҡа еткереүгә, шул уҡ топонимика өлкәһенә ҡараған мәғлүмәттәрҙе теркәп, һаҡлап ҡалыуға ҙур өлөш индерә.

90-сы йылдарҙа тыуған яҡты өйрәнеүселәр эшмәкәрлеге Башҡортостан архив идаралығы ҡарамағында булһа, артабан ул эш БР Милли музейы директоры Ғәли Вәлиуллин етәкселегендә башҡарыла. Әйтергә кәрәк, ошо йылдарҙа барса район һәм ҡалаларҙа эш алып барған ойошмалар, айырым тыуған яҡты өйрәнеүсе әүҙем шәхестәр менән тығыҙ бәйләнеш булдырыла. Уҙған йылда ошо йәмғәт ойошмаһын юридик яҡтан нығытып, Уставын ҡабул итеп, теркәп ҡуйыу маҡсатында махсус конференция ойошторолдо. Әйтергә кәрәк, ойошмабыҙҙа тарихсыларҙан башҡа бик күп һөнәр эйәләре бар, уларҙы бер уртаҡ тойғо - тыуған яғыбыҙҙы һөйөү берләштерә.

Тыуған яҡты ентекләп өйрәнеүгә дәүләт иғтибары көслө хәҙер. Сәбәбе бер генә - беҙгә ниндәйҙер юғарынан төшөрөлгән идеология ла, йә иһә уны сит тарафтарҙан эҙләүҙең бер кәрәге лә юҡ. Бай тарихыбыҙ бар, үҙебеҙ яҡын күргән тыуған еребеҙ бар, гөрөф-ғәҙәттәребеҙ, мәҙәниәтебеҙ бар, ошо ерҙә тыуып үҫкән арҙаҡлы яҡташтарыбыҙ бар. Быны ошоларҙы өйрәнеү, һаҡлау, йәш быуындарға мираҫ итеп тапшырыу үҙе үк оло һәм күркәм идея ул Башҡортостан өсөн. Тыуған яҡты өйрәнеүселәр һәр саҡта ла йәмғиәт иғтибары үҙәгендә - улар төрлө осрашыуҙар, конференциялар уҙғара, китапханаларҙа, мәктәптәрҙә сығыш яһай, күргәҙмәләр, байрамдар ойоштора, арҙаҡлы яҡташтарының тормошо һәм эшмәкәрлеге хаҡындағы мәғлүмәтте халыҡҡа еткерә. Улар был эштәрҙе тиҙерәк, ойошҡанырак, халыҡҡа аңлайышлы һәм ҡыҙыҡлыраҡ рәүештә башҡара ала. Шәхсән шундай һығымтаға ла килдем - тыуған яҡтарын өйрәнеүсе әүҙем ойошмаһы, музейҙары булған райондар башҡаларына ҡарағанда һәр саҡта ла алдынғыраҡ булып сыға! Бындай мөхиттә үсмерҙәргә өлгө булырҙай ыңғай геройҙар бар, һәм уларҙың йоғонтоһон тойоп үҫә йәштәребеҙ.

**➔ XIX быуатта йәшәгән һәм ижад иткән мәғрифәтсе-ғалимыбыҙ Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың халҡыбыҙға васыятын шул рәүешле ғәмәлгә ашырып була тиһегеҙ инде?**

- Тап шулай. Бына Бөйөк Ватан һуғышы тарихын ғына алып ҡарайыҡ. Ошо бөйөк тарихҡа мөнәсәбәте булмаған ғаилә юҡтыр Башҡортостанда. Һәр ауылдан ошо һәләкәтле алыштан тиҫтәләгән, хатта йөҙәрләгән кеше кире ҡайта алмаған. Һәләк булғандары ла, яраланып йә иһә иҫән-һау ҡайтҡандары ла - беҙҙең данлы геройҙарыбыҙ ул. Улар хаҡында ауыл, мәктәп музейҙарында экспозициялар булһа, айырым стендтарҙа фотолары ҡуйылһа, батырлыҡтары хикәйәләнһә - былар барыһы ла балаларыбыҙҙы ватансылыҡ рухында тәрбиәләү сараһына әйләнә. Батырҙары күп булған халыҡ ҡына батыр ул-ҡыҙҙар үҫтерә ала.

**➔ Был ҡатмарлы эштә айырым проблемалар ҙа килеп сығалыр инде?**

- Эйе, проблемаһыҙ эшмәкәрлек булмай ул. Ҡайһы бер тыуған яҡты өйрәнеүселәр, тарихи белемдәре һайыраҡ булһа, үҙ яҙмаларында, нәшер ителгән китаптарында ысынбарлыҡҡа тура килмәгән хаталар ебәрә, объектив һығымталар эшләй алмай. Шул йәһәттән беҙҙең ойошма тыуған яҡты өйрәнеүселәргә ғилми-методик ярҙам күрһәтә аласаҡ, улар өсөн консультациялар ойоштораса̇ҡ, тип уйлайым. Бындай эшмәкәрлек бер үҙәктән тороп координациялауға ла мохтаж.

Унан башҡа, **үҙ нәҫел-нәсәбен, ауылдар тарихын өйрәнеүгә булышлыҡ итеү маҡсатында "Башархив" тип аталған өрәңы проект эшләп, уны яҡташтарыбыҙ ҡуллана алырлыҡ кимәлдә интернет селтәрҙәренә сығарҙыҡ. "Башархив. ру" сайтында 1917 йылда Ваҡытлы Хөкүмәт тарафынан уҙғарылған ауыл хужалығы иҫәбен алыу материалдарының электрон күсермәләре ҡуйылды. Унда Өфө губернаһының 5 өйәҙе буйынса 5740 уникаль документ ингән,** Башҡортостан райондарының күпселегенә ҡараған ауылдар буйынса мәғлүмәт табырға була. Бында ауылдың һәр айырым хужалығы сағылдырылған карточкаларҙа хужаның исем-шәрифе, ғаилә составы, мал-тыуары, биләгән ер майҙаны, төрлө культураларҙың сәсеү майҙандары, башҡа ер биләмәләре, ерҙе ҡуртымға биреү һәм башҡаларға тапшырыу, ниндәй ауыл хужалығы ҡоралдары, сәнәғәт һәм сауҙа итеү ойошмалары булыуы хаҡында мәғлүмәт табырға була. Ғөмүмән, был документтар аша халҡыбыҙҙың 1917 йылға тиклемге демографик һәм иҡтисади хәлен аныҡ күҙаллап була. Киләсәктә ошондай эштәребеҙҙе дауам итербеҙ, тип уйлайым.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ әңгәмәләште.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Зөһрә Гордиенко Ҡыйғы районы хакимиәте етәксеһе вазифаһына тәғәйенләнде. Урындағы совет депутаттарын уның кандидатураһы менән Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров таныштырҙы. "Зөһрә Мәүлитбай ҡыҙы сығышы менән Учалынан, ғүмере буйына тиерлек социаль өлкәлә, һуңғы 8 йылда Учалы районы хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары вазифаһында эшләгән, ул бик дәртле етәксе, уның кандидатураһын хуплауығыҙҙы һорайым", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Ҡыйғы районы советы депутаттары Зөһрә Гордиенконың кандидатураһын бер тауыштан хупланы.

✔Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының пленар ултырышында республика парламенты депутаттары байрам һәм иҫтәлекле көндәр тураһындағы урындағы законға йыл һайын 13 ноябрҙә 112-се Башҡорт атлы дивизияһы көнөн билдәләү хаҡында төҙәтмә индерергә ниәтләй. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда бөтәһе алты иҫтәлекле көн бар. Яңыһы менән улар етәү була. 1941 йылдың 13 ноябрендә СССР-ҙың Дәүләт оборона комитеты милли ғәскәрҙәр берләшмәләрен ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул иткән. Шуның нигеҙендә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы ла булдырылған.

✔Башҡортостан хөкүмәте ҡарарына ярашлы, 2020 йылдан алты ҡатҡа тиклемге күп фатирлы йорттарҙа капиталь ремонт өсөн түләүҙең минималь күләме - бер квадрат метр өсөн 6,9 һум (хәҙер - 5,2 һум), ә алты ҡаттан бейегерәк йорттарҙа бер квадрат метр өсөн 7,5 һум (хәҙер - 5,8 һум) була. "Башҡортостанда тарифтар - илдә иң түбәндәрҙең береһе. Түләүҙең минималь күләме 46 төбәктә арттҡан да инде, 2020 йылда Рәсәйҙең тағы 27 субъектында тарифтар ҡимметләнә", - тип белдерҙеләр республика Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығында.

✔Берлинда үткән 85-се "Йәшел аҙналыҡ-2020" халыҡ-ара күргәҙмәһендә Башҡортостандың хөкүмәт премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов етәкселегендәге рәсми делегацияһы ҡатнашты. "Йәшел аҙналыҡ" - уникаль халыҡ-ара аҙыҡ-түлек, ауыл хужалығы һәм баҡсасылыҡ күргәҙмәһе. Сара Башҡортостан предприятиеларына продукцияны алға ебәреү өсөн төбәк, сит ил партнерҙары менән бәйләнеш булдырыу майҙансыһы ул.

✔ Башҡортостанда пособие ғаиләнең һәр ағзаһына айлыҡ килеме 20 868 һумдан артмаған ғаиләләрҙең тәүге балаһы тыуған осраҡта түләнә, тип хәбәр итә республика Хеҙмәт министрлығының матбуғат хеҙмәте.



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЯҢЫСА ИМТИХАН

**РФ Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһы водитель таныҡлығына имтихандың теоретик өлөшөн үҙгәртә.**

Хәбәр ителеүенсә, водитель таныҡлығы алыу өсөн имтиханда теоретик һорауҙар һанын арттырыу, шулай уҡ штраф балдарын алып ташлау күҙ уңында тотола, тип белдерҙе Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһының имтихан эшмәкәрлеге бүлеге етәксеһе урынбаҫары Николай Гиляков. Рәсәй Дәүләт автоинспекцияһында теоретик эштәр - автомобилде хәүефһеҙ йөрөтөү нигеҙҙәренә ҡағылышлы һорауҙар һанын байтаҡҡа арттырырға тәҡдим ителә. Һәр категорияға айырым имтихан блогы төҙөргә кәрәк, тип билдәләне Николай Гиляков. Уның һүҙҙәренсә, имтиханға психологик нигеҙҙәр һәм медицина тураһында һорауҙар индереү зарур. Имтихандың теоретик өлөшөнә үҙгәрештәр 2020 йылдың октябренән индереләэ. Шулай уҡ Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһының имтихан эшмәкәрлеге бүлеге етәксеһе урынбаҫары имтихандар үткәреү маршруттарының үҙгәрәсәген әйтте. Имтихан алыусының хәрәкәт барышында йүнәлеште үҙе һайлауы ихтимал.

# АЙЛЫҠ ПОСОБИЕ КҮПМЕ?

**2020 йылдың ғинуарынан, әгәр ғаиләнең һәр ағзаһына эшкә һәләтле халыҡ өсөн йәшәү минимумының икеләтә дәүмәленән аҙыраҡ тура килһә, беренсе балаға айлыҡ пособие алырға мөмкин.**

Башҡортостанда пособие ғаиләнең һәр ағзаһына айлыҡ килеме 20 868 һумдан артмаған ғаиләләрҙең тәүге балаһы тыуған осраҡта түләнә, тип хәбәр итә республика Хеҙмәт министрлығының матбуғат хеҙмәте. Аҡсаға беренсе сабыйы 2018 йылдан һуң тыуған ғаиләләр иҫәп тота ала. "Дәүләт ярҙамы сараһы Рәсәй Федерацияһы биләмәһендә даими йәшәгән граждандарға ғына ҡағыла. Бала ла Рәсәй Федерацияһы гражданы булырға тейеш. Түләүҙең күләме 9789 һум тәшкил итә. Пособие балаға 3 йәш тулғансы тәғәйенләнә. Беренсе балаға айлыҡ түләүҙе Республика халыҡҡа социаль ярҙам үҙәге филиалдарында, күп функциялы үҙәктәрҙә һәм берҙәм дәүләт хеҙмәттәре порталында рәсмиләштерергә мөмкин.

# ЙОРТОНДО ЯҢЫРТ

**Киләһе йылдан ауыл халҡы банктарға үҙҙәренең йорттарын төҙөкләндереүгә льготалы кредит һорап мөрәжәғәт итә ала. Хөкүмәт процент ставкаларын субсидиялай, улар ауыл халҡы өсөн 5 проценттан артмаҫҡа тейеш.**

Рәсәй Хөкүмәтендә ауыл ерендә өйҙә төҙөкләндереү кимәлен күтәреү өсөн бирелгән ҡулланыу кредиттары буйынса алып еткерелмәгән килемде банктарға ҡайтарыу ҡағиҙәләре раҫланды. 1 ғинуарҙан уҡ граждандар вәкәләтле банктарға йортҡа үҙәкләштерелгән йәки автономлы электр, һыу һәм газ, йылытыу һәм канализация үткәреү, шулай уҡ подряд килешеүе буйынса торлаҡты ремонтлау өсөн кредит биреүҙе һорап мөрәжәғәт итә ала. Күпселек төбәктәр өсөн кредиттың күләме 250 мең һум тәшкил итә. Ленинград өлкәһендә һәм Алыҫ Көнсығыш төбәктәрендә йәшәүселәр 300 меңгә тиклем алырға мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҺӘЙБӘТ ЯҢЫЛЫҠТАР

**2023 йылдың 1 сентябренән Башҡортостандың барлыҡ мәктәптәрендә 1-4 класс уҡыусылары бушлай сифатлы ҡайнар аш менән тәьмин ителә башлай, техник мөмкинлек булған урында - быйыл 1 сентябрҙән уҡ. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй Президенты Мөрәжәғәтнамәһе положениеларын бойомға ашырыуға арналған кәңәшмәлә Мәғариф министрлығына шундай йөкләмә бирҙе.**

Башҡортостандың мәғариф министры Айбулат Хажин һүҙҙәренсә, хәҙерге көндә мәктәптә ҡайнар аш биреүҙе ойоштороу проблемаһы башлыса 20-30 бала уҡыған һәм аҙыҡ ситтән килтерелгән аҙ комплектлы мәктәптәрҙә күҙәтелә. "Әлеге ваҡытта республика мәктәптәрендә 220 мең башланғыс класс уҡыусыһы белем ала. Фаразлауыбыҙса, 1 сентябргә уларҙың һаны 225 меңгә етергә тейеш", - тине Айбулат Хажин.

Владимир Путиндың өс йәштән ете йәшкә тиклемге балалары булған ғаиләләргә пособие түләргә тигән тәҡдимен дә республика етәкселеге хуплап ҡабул итте. "Беҙҙең бурыс - был льготаны алыу тәртибен мөмкин тиклем һеҙәмтәле итеү. Тәүҙә Президенттың был йөкләмәһен рәсми формалаштырыуҙы көтәсәкбеҙ, аҙаҡ уның нигеҙендә үҙебеҙҙең документты әҙерләйәсәкбеҙ. Тик Күп функциялы үҙәктәр бөгөн уҡ әҙер булырға, мәсьәләне өйрәнә башларға, ниндәй документтар кәрәкләгеләгеләгеләгеләгеләге белергә тейеш. Кеше бер уҡ белешмә артынан ҡабат-ҡабат йөрөмәһен", - тине Радий Хәбиров.

Тағы бер мөһим норма - 2021 йылда социаль контракт механизмын индереү. Беҙҙә республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы был эш менән алдан уҡ шөғөлләнә башлаған. Хәҙер тағы ла әүҙемерәк ҡушылырға кәрәк. "Беҙҙең бурыс ғаиләгә аҡса менән генә ярҙам итеү түгел. Уларға йүнәлеш һәм иҡтисади яҡтан үҙаллы үсешеү мөмкинлеге биреү мөһим - ғаилә үҙе аҡса эшләргә өйрәнергә тейеш. Социаль контракт - уның яуаплылығын арттырыу. Ғаиләлә шуны аңлауҙары мөһим: социаль контракт талаптарын үтәү өсөн улар үҙҙәренең квалификацияһын күтәрергә, яуаплы эшләргә тейеш", - тине Радий Хәбиров.

Айырым блок демография мәсьәләләрен хәл итеүгә бағышланды. Радий Хәбиров үҙенең сентябрь указында 2024 йылға республика халҡын 4 миллион 100 меңгә еткереү бурысын ҡуйғанын хәтергә төшөрҙө. Хәҙер республикаға, илдең башҡа төбәктәренә кеүек үк, федераль үҙәктән байтаҡ финанс ярҙамы бүленергә тейеш. "Беҙгә был бурысты тормошҡа ашырыу өсөн комплексты эш алып барырға кәрәк. Бына ошо көндәрҙә генә демография буйынса юл картаһы ҡабул иткәйнек. Ул да бик күп ҡарарҙы үҙ эсенә ала. Ә хәҙер, Мөрәжәғәтнамәгә ярашлы, был эштә ҙур ярҙам алдыҡ. Хәҙер пландарҙы күпкә арттырыу мөмкинлеге бар", - тине Радий Хәбиров.

# ТӨҘӘТМӘЛӘР

**Конституцияға төҙәтмәләр буйынса Бөтә Рәсәй тауыш биреү көнө йәкшәмбе, 12 апрелгә, билдәләнгән. Кремлдә ошо датаға бәйле фекер алышыу бара. Шулай уҡ икенсе вариант бар - 26 апрель.**

Тауыш биреү Дәүләт Думаһы һәм Федерация Советы төп законға төҙәтмәләр ҡабул иткәс, ләкин улар ҡабул иткән федераль конституция законы үҙ көсөнә ингәнгә ҡәҙәр уҙғарыла. Президент Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа мөрәжәғәтнамәһендә хәбәр итеүенсә, Конституцияға төҙәтмәләр индереү хаҡында һуңғы ҡарар халыҡтың тауыш биреү һөҙөмтәләре буйынса ҡабул ителә. Әлегә Бөтә Рәсәй тауыш биреү көнөнә бәйле булған ҡарарҙар ҡабул итеүҙең процедура ваҡыты билдәләнмәгән. Тауыш биреү ваҡыты һәм уҙғарыу тәртибе Владимир Путиндың махсус указында күрһәтелә. "Тауыш биреүгә халыҡтың 20 проценты килһә лә законлы тип һанала, - тип билдәләне ул. - Төҙәтмәләрҙе парламент ҡабул итә". Тауыш биреү алдынан күләмле мәғлүмәт кампанияһы ойоштороla.

# ХӨКҮМӘТ ҮҘГӘРҘЕ

**Рәсәй Президенты Владимир Путин "Федераль башҡарма власть органдарының структураһы тураһында" указға ҡул ҡуйҙы. Беренсе вице-премьер Антон Силуановтың урынын президенттың иҡтисад буйынса ярҙамсыһы булып эшләгән Андрей Белоусов биләне.**

Премьер-министр урынбаҫарҙары туғыҙ ҡалды (элек унау ине). Уларҙың алтауһы - яңы кешеләр: Марат Хөснуллин, Виктория Абрамченко, Дмитрий Чернышенко, Алексей Оверчук, Дмитрий Григоренко. Ә Юрий Борисов, Татьяна Голикова, Юрий Трутнев үҙ вазифаларын һаҡлап ҡалды. Иҡтисади блок, көс структуралары һәм баш дипломат корпусы үҙгәрештәр кисермәне: сит ил эштәре министры - Сергей Лавров, оборона министры - Сергей Шойгу, эске эштәр министры - Владимир Колокольцев, энергетика министры - Александр Новак, сәнәғәт һәм сауҙа министры - Денис Мантуров, финанс министры - Антон Силуанов, транспорт министры - Евгений Дитрих, төҙөләш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры - Владимир Якушев, ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы башлығы - Евгений Зиничев, тәбиғәт ресурстары һәм экология министры - Дмитрий Кобылкин, Алыҫ Көнсығышты үҫтереү буйынса министр - Александр Козлов, ауыл хужалығы министры - Дмитрий Патрушев. Хөкүмәттең социаль блогы тулыһынса яңыртылды. Вероника Скворцова һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын Михаил Мурашкоға ҡалдырҙы. Яңы мәҙәниәт министры - Ольга Любимова, ул Владимир Мединскийҙы алмаштырҙы. Мәғариф министры итеп Сергей Кравцов тәғәйенләнде. Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры Максим Топилин урынына - Антон Котяков. Спорт министрлығын Павел Колобков урынына Олег Матыцин етәкләй. Фән министры - Валерий Фальков, ул Михаил Котюковты алмаштырҙы.

Башҡа үҙгәрештәр: иҡтисади үҫеш министрлығын Максим Орешкин урынына Максим Решетников етәкләй. Элемтә министры Константин Носков урынына Мәҡсүт Шадаев тәғәйенләнде. Юстиция министры Александр Коновалов урынына Константин Чуйченко тәғәйенләнде.

# ТАБИПТАР КИЛӘ

**Быйыл да Башҡортостанда табиптарҙың күсмә бригадаларының ҡалалар һәм районлар буйлап эше дауам итә.**

Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, ойоштороу-методик һәм консультация ярҙамы күрһәтеү өсөн бригадаларҙа нейрохирург, акушер-гинеколог, уролог, колопроктолог, гинеколог-репродуктолог, гастроэнтеролог, пульмонолог, оториноларинголог, шулай уҡ өлкәндәр һәм балалар кардиологы, невролог, эндокринолог, офтальмолог эшләй. Бөгөнгә 2020 йылда бригадаларҙың түбәндәге эш графигы раҫланған: 19-25 ғинуарҙа Сибай ҡалаһында; 27-31 ғинуарҙа Салауат ҡалаһында; 3-7 февралдә Стәрлетамаҡтың 1-се клиник дауаханаһында; 10-14 февралдә Нефтекама ҡалаһында; 17 -21 февралдә Ағиҙел ҡалаһында; 23-29 февралдә Туймазы районында; 1-7 мартта Учалы районында; 9-13 мартта Яңауыл районында; 16-20 мартта Дәүләкән районында; 23-27 мартта Благовещен районында.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Башҡортостанда 2020 йылдың 1 сентябренән уҡытыусыларға класс етәкселеге өсөн өҫтәмә түләү арттырыла. Федераль өҫтәмә, Урал коэффициенты менән бергә, 5750 һум күләмендә иҫәпләнә. Төбәктә класс етәкселәренә түләү уртаса 7733 һум була. 2021 йылда класс етәкселәренең 470 уҡытыусыға күберәк булыуы фаразлана.

✔"Айыҡ ауыл-2019" республика конкурсының беренсе этабында 464 ауыл ҡатнашты. Шуларҙың 47-һе киләһе этапҡа үтте. Конкурс еңеүселәрен билдәләү өсөн 1 марттан 10-ына ҡәҙәр интернет аша тауыш биреү ойоштороla. Конкурска йомғаҡ 2020 йылдың 20 мартына тиклем яһала. Еңеүселәр Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең дипломдарына лайыҡ була һәм аҡсалата билдәләнә: беренсе урын - 500 мең һум; икенсе урын - 250 мең һум; өсөнсө урын - 150 мең һум.

✔Дәүләт Думаһының социаль сәйәсәт буйынса комитетында белдереүҙәренсә, тәүге бала өсөн әсәлек капиталын, балаларға торлаҡ түләүҙәре кеүек үк, мартапрель айҙарында уҡ ғәмәлгә индерә башлайҙар. Ләкин бының өсөн "Балалы ғаиләләргә айлыҡ түләүҙәр тураһында" һәм "Ғаиләгә булышлыҡ итеүҙең өҫтәмә саралары тураһында" ғәмәлдәге закондарға ҡайһы бер үҙгәрештәр индерергә кәрәк, тип билдәләнеләр Федерация Советында.

✔Рәсәй Федерацияһы Социаль страховка фондының Башҡортостан буйынса төбәк бүлексәһе 3 февралдәге аукционда дәүләттән социаль ярҙам алған граждандарҙы шифахана-курорт дауалауы буйынса хеҙмәттәр менән тәьмин итеүсене һайлап алырға ниәтләй. 21 көнлөк 200 юллама һатып алыу ҡаралған. Шифаханаларҙың Краснодар крайы биләмәһендә һәм Сочи курорттарында булыуы, ҡан әйләнеше системаһы, һулыш алыу органдары, нервы, һөйәк-мускул системаһы, ҡолаҡ, күҙ сирҙәрен дауалау йүнәлешендә эшләүе мотлаҡ. Финанслау - федераль ҡаҙнанан.

✔Башҡортостандың Әбйәлил районында VI Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерлек барышында "Ашъяулыҡ" башҡорт аш-һыуы фестивале ойоштороla. Ул 13 февралдә Аҫҡар ауылының Үҙәк майҙанында була. Фестивалде ойоштороусы - Әбйәлил районының Мәҙәниәт һәм ял үҙәге. Ғаризалар 11 февралгә тиклем 83477220334 телефоны буйынса йәки metod-abzelil@yandex.ru электрон адресына ҡабул ителә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЭШТӘР ДАУАМ ИТӘ...

**Календарь буйынса ғәҙәттә йылға йомғаҡты декабрҙең һуңғы көндәрендә яһау ҡаныбыҙға һеңгән. Әммә предприятиелар һәм ойошмалар, хөкүмәт, дәүләт был эште яңы йылдың тәүге кварталында атҡара. Шуға ла ҡала хакимиәтендәге сираттағы кәңәшмәнең тап уҙған йылға йомғаҡ яһауға арналыуы ла юҡҡа түгел. Мәғлүм булыуынса, былтыр йыл дауамында баш ҡалала ғына түгел, республика кимәлендә пассажирҙар ташыу хеҙмәте, йәғни транспорт эшмәкәрлеге күҙ уңында булды. Йыл дауамында ниндәй үҙгәрештәр күҙәтелгән һәм яңы йылда ниндәй яңылыҡтар көтөлә? Был хаҡта хакимиәттең транспорт һәм бәйләнеш идаралығы начальнигы, хакимиәт башлығы урынбаҫары Илдар Юланов бәйән итте.**

Бөгөнгә ҡала халҡын "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһы, Өфө ҡалаһының Электр транспорты муниципаль учреждениеһы, ете яуаплылыҡы сикләнгән йәмғиәт, өс шәхси эшҡыуар һәм "Йылға аша сығарыу хеҙмәте" хеҙмәтләндерә. Уларҙың барыһы ла ҡалала пассажирҙар ташыуҙың тотороҡлолоғон тәьмин итеү маҡсатында эшләргә тейеш. Әлеге ваҡытта ҡалала 125 муниципаль маршрут бар, электр транспорты балансында 151 трамвай һәм 175 троллейбус иҫәпләнә. Улар 2018 йыл менән сағыштырғанда 7 процентҡа күберәк, йәғни 18 миллион 986 мең пассажир ташыған. Былтыр шулай уҡ 147 617 кеше канат юлы менән файҙаланған. Улар артабан юлын паром йәки пассажир судноларь ярҙамында дауам иткән. Был асул менән 467 мең пассажир ташылған. Мәғлүм булыуынса, йыл дауамында ҡаланың автотранспорт паркы төрлө дәүмәлдәге автобустар менән тулыланды - йәмғеһе 77 автобус алынды. Улар төрлө категория, балалы пассажирҙар мәнфәғәтен күҙ уңында тотоп йыһазландырылған.

Ә яңы йылда был тармаҡта пассажирҙарҙы тағы ниндәй яңылыҡтар көтә? "Белореченский", Жилино, "Серебряный ручей", Никольский, "Забельский", Йылҡыбай, Федоровка, Нуғай биҫтәләре һәм ҡасабалары халҡының транспот хеҙмәтләндереүе мәсьәләләрен хәл итеү өсөн яңы 11 маршрут асыу күҙаллана. Шулай уҡ туҡталыш павильондарын яңыртыу һәм уларҙы "Хәүефһеҙ ҡала" системаһына индереү буйынса эш дауам итәсәк. Бынан тыш, ҡала хакимиәте республика Хөкүмәте, Куйбышев тимер юлының Өфө филиалы менән берлектә "Кала электричкаһы" проектын тормошҡа ашыра. Уға ярашлы, 5 поездың маршруты оҙайтылыуы һөҙөмтәһендә, пассажирҙарҙың бер өлөшө транспорттың был төрө менән йөрөүгә өҫтөнлөк биргән. Илдар Юланов сығышы һуңында юлдағы "тығындар" һәм башҡа сәбәптәр һөҙөмтәһендә йәмәғәт транспортының хәрәкәт графигы боҙолоуҙы юлға һалыуҙың бер ысулы тип юл хәрәкәте менән идара итеү системаһын автоматлаштырыуҙы билдәләне.

Шулай уҡ район хакимиәттәре башлыҡтарының кәңәшмәлә башҡарылған эштәр буйынса отчет яһауҙары ла традицияға инеп бара. Был юлы Дим районы хакимиәте башлығы Айҙар Бәҙретдинов сығыш яһаны. Ул Яңы йыл байрамдарында район территорияһында ойошторолған сараларға ентекле туҡталып, былтыр тормошҡа ашырылған 6 программа тураһында ла һөйләне. "Башҡорт ихаталары" программаһы буйынса ике йорт ремонтланған. Подъездарҙы комплекслы ремонтлау программаһына ярашлы 33 йортта 98 подъезда эштәр тамамланған. Дөйөм йорт милкен капиталь ремонтлау программаһы буйынса 16 күп фатирлы йорттоң ҡыйығы, электр һәм һыу тәьминәте системаһы ремонтланған, лифттар алмаштырылған. "Аныҡ эштәр" программаһы сиктәрендә "Серебряный ручей" биҫтәһе скверында күп функциялы балалар спорт-уйын зонаһы эшләнгән. Шулай уҡ халыҡтың мөрәжәғәте буйынса Глазовский һәм Демьян Бедный урамдарында 2,7 километр оҙонлоғонда тротуарҙар төҙөкләндерелгән.

Районда "100 йыллыҡҡа - 100 объект" республика программаһы сиктәрендә 1 сентябрҙә 162-се "Смарт" полилингваль мәктәбе ишектәрен асһа, өс балалар баҡсаһын сафҡа индереү планлаштырылған. Төҙөкләндереү программалары менән бер рәттән, "Урамдарҙы яҡтыртыу системаларын модернизациялау" муниципаль программаһы сиктәрендә белем биреү учреждениелары территорияларын һәм уларға килеү юлдарын яҡтыртыу буйынса эштәр башҡарылған. Быйыл иһә Тораҡ биләмәләре эстетикаһы йылы буйынса планлаштырылған эштәр ҙә тормошҡа ашырыласаҡ.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## БЕҘ СӘЛӘМӘТ ЙӘШӘҮ ЯҠЛЫ!

**Башҡортостан 2019 йылда сәләмәт йәшәү рәүеше алып барған кешеләрҙең күплеге буйынса Рәсәйҙең 10 төбәге исемлегенә инде.**

Росстат йыл дауамында сәләмәт йәшәү рәүеше алып барған граждандарҙы иҫәпләгән - Рәсәйҙә улар 12 процент тәшкил иткән. Башҡортостанда иһә сәләмәт йәшәү рәүешен алып барған кешеләр - 19,7 процент. Росстат сәләмәт йәшәү рәүешен алып барғандарҙы түбәндәге шарттар буйынса иҫәпләп сығарған: тәмәке тартмау; көн һайын 400 грамдан кәм булмаған йәшелсә, емеш-еләк ашау; физик әүҙемлек; тоҙҙо сама белеп ҡулланыу (тәүлегенә 5 грамдан күп түгел) һәм алкоголде аҙнаһына ир-егеттәргә - 168 грамдан, ә ҡатын-ҡыҙҙарға 84 грамдан артыҡ эсмәү. Сәләмәт йәшәү рәүешен билдәләү методикаһын Росстат 2019 йылдың мартында раҫлаған. Рейтингта тәүге өс урынды Ингушетия (48,8 процент), Ҡырым (29,2 процент) һәм Адыгея (28,8 процент) биләй. Аҙ күрһәткестәр: Чукотка автономиялы округы - сәләмәт йәшәү рәүешен алып барыусылар 0,4 процент тәшкил итә, Тыва - 1,1 процент һәм Ненец автономиялы округы - 2,1 процент.

## ЯРАМАЙ!

**1 ноябрҙән микрофинанс ойошмалары торлаҡты залогка алып займ биреү хоҡуғынан мәхрүм ителә.**

Уларға фатирҙарҙы һәм йорттарҙы, кеше йәшәгән күсемһеҙ милектең өлөшөн, шулай уҡ өлөшләтә төҙөлөш килешеүе буйынса буласаҡ торлаҡҡа хоҡуҡты залог итеп алырға ярамай. Сикләү бәләкәй һәм урта бизнес өсөн кредит биргән дәүләт ҡатнашлығындағы микрофинанс ойошмаларына ҡағылмай, тип асыҡлыҡ индерҙеләр Башҡортостан буйынса Милли банктың матбуғат хеҙмәтендә.Шуның менән бергә теләһә ниндәй микрофинанс ойошмалары кеше йәшәмәй торған күсемһеҙ милекте залог итеп алып займ биреү хоҡуғын һаҡлап ҡала. Эксперттар билдәләүенсә, бындай үҙгәрештәр заемсыларҙы уларҙың торлағы менән мутлашыу осраҡтарынан һаҡлай. Әлек закон юридик берәмектәргә ипотека займын биреүҙе тыймай ине. Намыҫһыҙ ойошмалар был заимды заемсының фатирын үҙҙәренә тартып алыу ысулы итеп файҙаланды. Йыш ҡына улар микрофинанс ойошмаһы исеме аҫтында эш итте. Кредит ҡулланыусылар кооперативтары дәүләт реестры мәғлүмәттәренә ярашлы, ағымдағы йылдың сентябрь аҙағына Башҡортостанда бөтәһе 48 микрофинанс ойошмаһы теркәлгән. Был һан республикала эшләгән, ләкин илдең башҡа төбәктәрендә теркәлгән микрофинанс ойошмаларын иҫәпкә алмай.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ ЙЫЛЫ

**Башҡорт теле йылы эгидаһы аҫтында муниципаль районд арҙа һәм ҡала округтарында бик күп саралар уҙғарырға тәҡдим ителә. Башҡорт теле йылының һәр айы айырым йүнәлешкә бағышлана, уның сиктәрендә тематик, оҫталыҡ дәрестәре һәм конкурстар ойошторола.**

Йылдың һәр айының үҙ исеме һәм хештегы бар. Мәҫәлән, ғинуар "Башҡорт теле - дәүләт теле" тип атала, хештег "#дәүләт". Был айҙа ойоштороу мәсьәләләре хәл ителә, социаль селтәрҙә территориаль ҡоролтайҙарҙың аккаунттары булдырыла, башҡорт телендәге алтаҡталарҙа, баннерҙар әҙерләүҙә, социаль рекламала хаталарҙы асыҡлау һәм төҙәтеү эше башлана. Июнь халыҡ ижады билдәһе аҫтында уҙғарыла һәм "Башҡорт теле - халыҡ теле" темаһына бағышлана, хештег "#фольклор". Ошо айҙа фольклорға ҙур иғтибар бүлеү күҙаллана. Территориаль ҡоролтайҙарға халыҡта башҡорт милли мәҙәниәтенә, башҡорт халыҡ ижадына ҡыҙыҡһыныу һәм ихтирам тәрбиәләүгә йүнәлтелгән саралар ойошторорға тәҡдим ителә. Был айҙың бурыстары - урындағы фольклорҙы өйрәнеү, халыҡ уйындарын популярлаштырыу, шәжәрә төҙөү, спорттың этник төрҙәре буйынса ярыштар, тиҙәйткестәр уҡыу, йомаҡтар ҡойоу буйынса флешмобтар үткәреү, китапханасылар өсөн семинарҙар уҙғарыу, китап уҡыусылар менән осрашыуҙар. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының 25 йыллығына арналған саралар ойошторорға ла тәҡдим ителә. Сентябрь "Башҡорт теле - ижад теле" тип атала, хештег #ижад. Ижади түңәрәктәр, культпоходтар, һәүәҫкәр театрҙар, спектаклдәр күрһәтеү аша телде өйрәнеү ойошторола. Шулай уҡ ғаилә менән йөрөү өсөн йәкшәмбе мәктәптәре асыла. Ноябрь "Башҡорт теле - моңло тел" исеме аҫтында үткәрелә, хештег #музыка. Был айҙа балалар йырҙары район интернет-конкурстары, "Йырлаусы ауыл" сиктәрендә конкурс, Композиторҙар союзынан "Үҙешмәкәр композитор" һәм башҡа саралар уҙғарыла.

Һәр тематикаға ҡағылышлы сараларҙы фото һәм видеоматериалдар менән дәлилләргә кәрәк. Методик тәҡдимдәрҙә саралар буйынса тулыраҡ аңлатмалар бирелгән. Йыл концепцияһы Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының рәсми сайтына урынлаштырыла.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Пневмония

❖ Ике ҡалаҡ һары мәтрүшкә сәскәһе һәм япраҡтарын ҡәһүә тартҡыс ярҙамында яҡшы онтарға, өҫтөнә 100 г зәйтүн майы һәм 30 г баҙам (миндаль) майы ҡойорға. 10 минут ҡайнар һыуҙың боҫонда тотоп, һөҙөп алырға. Пневмония менән ауырығанда көнөнә 8 тапҡыр берәр балғалаҡлап балға ҡушып йотоорға. Ашау режимына ҡарамай.

### Эсәктәрҙе таҙартыу

❖ Эсәктәрҙе кал таштарынан таҙартыу өсөн киптерелгән үләндәрҙе таблетка кеүек итеп эсеү яҡшы. Бының өсөн тигеҙ миҡдарҙа һары мәтрүшкә, ромашка, меңъяпраҡ, андыҙ тамыры, ҡылыс үлән (аир) тамырын яҡшы итеп бутап, ҡәһүә тартҡыста онтарға. Ашарҙан 1 сәғәт алда 1 балғалаҡ үлән ҡатышмаһын аҙ ғына һыуға ҡушып эсергә. Дауаланыу осоро 14 көн, ҡабат ошо рәүешле организмды таҙартыу 6 ай үткәс кенә рөхсәт ителә.

### Иммунитет нығытыу

❖ Ярты килограмм мүк еләген (клюква) ыуалап ваҡлап, 1 стакан ваҡланған әстерхан сәтләүеге (грецкий орех), шаҡмаҡлап туралған ҡышҡы сортлы 3 алма, ярты стакан һыу һәм шәкәр ҡушырға. Шунан ҡайнар хәлгә еткәнсе утта тотоп, һыуытырға. Витаминлы ҡатышманы банкаларға ҡойоп, һыуытҡыста һаҡларға. Ололарға көнөнә 2 тапҡыр берәр ҡалаҡ, ә балаларға көнөнә 2 тапҡыр берәр балғалаҡ ашарға.

❖ Иммунитетты нығытыуҙың тағы бер ысулы бар. Бының өсөн 1 стакан бал, 1 стакан етен майы, 2 ҡалаҡ һитә, һәм бөтә дауаланыу курсына 40 бүҙәнә йомортҡаһы кәрәк була. Һитәне ҡәһүә тартҡыста онтаҡлап, май һәм балды ҡушып болғарға. Көн һайын иртәнге аштан ике сәғәт алда 5 бүҙәнә йомортҡаһын туҡып кубекләндереп эсергә, артынса бер десерт ҡалағы әҙер ҡатышманы ашарға. Ошо рәүешле 8 көн дауаланырға. Шунан 9-сы көндән дауаланыуҙы йомортҡаһыҙ ғына дауам итергә, ҡатышма бөткәнсе берәр ҡалаҡлап (аш ҡалағы) ашарға. Иммунитетты яҡшыртыу өсөн тағы ла 10 көндән һуң дауаланыу курсын ҡабатларға була.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ Өлкән кешенең холҡон үҙгәртеп булмай, уға фәҡәт күнергә, яйын табырға, күп мыжыуҙарына иғтибар итмәҫкә, "ярай" тип, күндәмлек күрһәтергә кәрәк. Нисек кенә булмаһын, беҙ ата-әсә алдындағы бурысыбыҙҙы үтәргә тейешбеҙ.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

**"Ҡусҡар" - күп төрлө мәғәнәгә эйә төшөнсә. Ул башҡорттар һәм башҡа туғандаш халыҡтарҙың тәрән дини ҡараштарына һәм боронғо мифологик образдарына ҡағыла, орнаменталь культураһының сағыу ҡатламын билдәләй.**

"Ҡусҡар мөгөҙ" (тәкә мөгөҙө) тип аталған мөгөҙгә оҡшаш мотивтар бөтә тиерлек Урта Азия халыҡтары биҙәү сәнғәтендә урын алған. Бер нөктәнән сыҡҡан кәкерсәктәр табынған хайуандар символына әйләнгән: тәкә йәки арҡар тәкәһе (тау һарығы). Боронғо ышаныуҙар буйынса, биҙәк һаҡлау һәм бәрәкәт көсөнә эйә булған, йортто һәм йәшәү өсөн мөһим йолаларҙы йыһазлауҙа ҡулланылған. Был ышаныстар эҙе көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының һынлы сәнғәтендә һаҡланып ҡалған. Әммә көньяҡ-көнсығыш һәм көньяҡ башҡорт һөйләштәрендә "ҡусҡар - нәҫел тәкәһе" төшөнсәһе менән бер рәттә "ҡусҡар/ҡушҡар - ҡусҡар (улитка)" төшөнсәһе лә һаҡланған, ә "ҡусҡарлау/ҡусҡарҙау" йыш осраҡта "ҡусҡар (улитка) биҙәк һалып ҡайыу" тигәнде аңлатҡан. Был орнамент төҙөлөшөндә кәкерсәк башланғыс элемент булып тороуы хаҡындағы фаразды дәлилләй; ҡусҡар мөгөҙҙәр һәм башҡа мотивтар унан яһалған.







*Традицион сергетыш (БР, Белорет районы). Автор фотоһы. 1976*

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ЗАМАНА ШАУҠЫМЫ*



**Йыйылып китеп әсегән һәм сөсө ҡатыҡтарымды ла бер ыңғайҙан ҡушып туҡып, ҡаҙанда эркет ҡайнатам. Йәйге аласыҡ иҙәне төрлө һауыттар менән тулы тиһәң дә була. Өс бүлә ҡайнаттым инде, быныһы һуңғыһы. Ҡапыл "Фашист өйҙәме?" тигәнгә тертләп киттем. Әйләнеп ҡараһам, ҡулына ете йөҙ грамлыҡ банка тотҡан Ғәйнетдин ағай баҫып тора. Минең хужаны һорауы.**

# КЕМ ФАШИСТ ҺУҢ?

Унның шундай ғәҙәте бар, бар кешегә лә исеме менән түгел, фашист тип кенә өндәшә. Йыш ҡына ҡатыҡ һорарға килә. Эсеп йөрөгәнен белгәнгә, был юлы ла шул йомош менән килгәнен аңлап, юғалып ҡалдым. Ярты литр ойотмостан башҡа ҡатыҡты эркеткә һалғайным. Үҙемде ғәйепле тойоп: "Эй Аллам, ҡатыҡ юҡ бит әле, бына эркет ҡайнатам, ойоғас, иртән эшкә барғанда алып барырмын", - тип һөйләнәм. Мин социаль хеҙмәткәрмен бит, уны ла ҡарайым. Туберкулез менән ауырый ул, ныҡ эсә лә. Эсмәһә, түҙерлек тә, ә эсһә инде өйөнә инерлек булмай. Мейес урынына бер ваҡытта ла эзбиз күрмәгән, һыланмаған, йылытыр өсөн генә әтмәләнгән кирбес өйөмө. Түләмәгәс, электр уты өҙҙөрөлгәненә лә биш былтыр. Пенсияһын арыу ала алыуға, ун ике мең сыға. Пенсияны һиңә бирәм, түләп, электр линияһына тоташтыртырһың, электр сәйнүге алып бирерһең, ашарға үҙеңдән нимә булһа ла алып килеп торорһоң, тигәйне лә, пенсияһы миңә лә, үҙенә лә бер тин дә эләкмәй. Ауыл магазинының һатыусыһы унан доверенность яҙҙырып алған да, пенсияһын үҙе алып тора. Быға көн һайын ике шешә одеколон йә фанфурик, өҫтәп, үтмәгән, ашарға яраҡһыҙ берәр ризығын тоттора. Ризалашып ала инде ағай, юғиһә, аҙаҡ шул шешәләрҙе көтәсәккә яҙҙырып бирмәйәсәген белә. Үткән барғанымда боҙола башлаған редиска ята ине өҫтәлендә. "Алып ҡайт балаларыңа, минең тешем юҡ. Берәүһен һурып ҡарағайным да, һуты сыҡмай", - ти был. Эсемдә нимәлер өҙөлгәндәй булды. Ауыҙында бер бөртөк тә теше юҡлығын белә-күрә шундай ҡаты ризыҡ бирәләр бит. Ауырығанын да, асҡа интеккәнен дә беләләр. Үҙенең пенсияһына үҙе хужа түгел ағай.

Ҡысҡырып, өҙә-өҙә ҡаты һөйләшһә лә, тыштан ғына үҙен уҫал итеп күрһәтеүе - күңеле йомшаҡ унның, ихтыярһыҙ кеше. Элек эшлекле, таҙа, барлы-маллы йәшәй ине. Хәҙер ошо көнгә ҡалды. Әүәлерәк кешеләргә эшен эшләшеп тамағын туйҙыра ине, хәҙер хәле юҡ. Дарыу алырлыҡ та аҡсаһы ҡалмай, кем ниндәй дарыу бирә, шуны ашап ҡына йөрөй. Бына ошо ағай инде мине тертләтеп, ишек төбөнә килеп баҫҡан кеше.

"Ҡой!" - тине үҙенсә уҫал ғына итеп. Мин аптырап: "Эркетме?" - тим. Өндәшмәй генә тупһаға сығып ултырҙы. Ҡаҡашып бөткән банкаһын алып, йыуынғыста һабынлап йыуып, эркет һалып бирҙем. Элекке кеүек алып ҡайтып эсер тиеп уйлағайным. Ә ул ҡомһоҙланып сат йәбеште ҡайнар эркеткә, хатта ҡулын бешерһә лә, тупһаға ултыртмай, тамсылап йотоуын белә. Бер мәл әллә эҫе эркеттән әлһерәп, әллә рәхәтлектән иҙерәп, әллә хәлһеҙлектән күҙҙәрен йомоп тынып ҡалды. Мин ҡаҙанымдағы эркетте бушатып, ҡашығаяҡты йыуып йыйыштыра башланым. Үҙем тегегә күҙ һалам. Биттәренән ҡара юлаҡ булып бысраҡ тир аға, әллә өнһөҙ илай, әллә йоҡлай, ә ҡулында ике илеләй эркет ҡалған банка. Үлеп ҡуйҙымы әллә был, тип яҡын килдем. Юҡ, тын ала, йоҡламаған да. Нимә уйлай икән? Элек аҙбары тулы булған мал-тыуарынмы, ҡатыны менән ғүмер иткәненме? Ата-әсәһе ҡулында үткән бәхетле бала сағынмы? Хәҙер мин дә уға ҡарап ҡатып ҡалдым. Ниндәй көнгә төшөрә бит кешене был эскелек, әллә яҙмышы шулмы? Бер нәмәне лә алдан күҙаллап булмай икән шул. Кемдең тупһаһына барып йығылырыңды ла белеп булмай. Берәү ҙә үлемен эшен бөтөп, таҙа кейем кейеп, таҙа урынға ятып көтөп алмай. Бына бит, элек хәлле генә йәшәгән ағай был көнгә ҡалырмын тип уйламағандыр ҙа.

Юҡ, ярҙам итергә кәрәк! Тубдиспансерға шылтыратып, больницаға урынлаштырырмын, пенсияһын алып, өйөн электр линияһына тоташтыртырмын, аҡсаһына сәйнүк, плитә, ашарға алып торормон. Бөгөн үк барып документтарын, доверенносын аласаҡмын, тип ҡәтғи ҡарарға килдем. Уғаса ағайым ҡыбырлап, тотона-тотона аяғүрә торҙо. Биттәре ҡыҙарып, аҙыраҡ хәл ингән ине. Ике илеләй ҡалған эркетте торған көйө эсеп бөттө лә, банкаһын миңә һуҙҙы: "Тағы ҡой, алып ҡайтып эсәм", - тине. Унның шулай ҡырҡараҡ һөйләшеүен белгәс, тағы ла банкаһына эркет һалып бирҙем. Үҙемдең ниндәй ҡарарға килгәнемде һөйләһәм дә аңларлыҡ хәлдә түгеллеген белә инем, өндәшмәнем. Ике ҡуллап банканы алды ла, рәхмәт әйтеп, ҡайтырға ҡуҙғалды ағай.

Эште оҙаҡҡа һуҙмай, Сибай тубдиспансерына шылтыратып, урын белештем. Аҙаҡ ғәйбәт ишетеремде белһәм дә, ҡаты ғына һөйләшеп, милиция менән янап, һатыусынан документтарын алдым. Берәү үлгән иренең кейем-һалымын бирҙе. Шулай итеп ағайыбыҙҙы Сибайға барған бер кешенең машинаһына ултыртып, больницаға оҙаттыҡ. Тик һатыусынан доверенносын ғына алып булманы. Аяҡ терәп ҡаршы торҙо.

Бер айҙан күҙҙәренә бер ни тиклем нур ҡунған, төҫ ингән ағайыбыҙ ҡайтып төштө. Ялға ҡайтҡайны. Дауаханаға тағы барасағын да әйтте. Йәшәүгә ышанысы артып, нисектер дәртләнеп киткәйне. Шул көндө үк магазинға аҙыҡ-түлек алырға ингән булған. Иртәгәһенә иртәнсәк үле килеш таптылар. Өҫтәл эргәһендә ун ике одеколон шешәһе теҙелеп ултыра, яртыһы эселгән, түгелгәндәре бар...

Ошо ваҡиғаға нисә йылдар үтһә лә башымда был уй: кем фашист, йомшаҡ характерлы ағаймы, эшемде аҙағына еткермәгән минме, әллә ағайҙың пенсияһын ҡулынан ысҡындырмаҫҡа сат йәбешкән һатыусымы? Кем ғәйепле?..

**Азалия ИСРАФИЛОВА.**

*УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ...*

# ҠАРТЛЫҠТЫ ӘРЛӘМӘ,

## уға ҡулайлаш



**"Беҙ ғаиләбеҙҙә күмәк йәшәйбеҙ. Үҙ-ара татыубыҙ. Әммә өләсәйем һәр саҡ ниҙәндер ҡәнәғәт түгел, шул тиклем тыныс әсәйемдең ғәйебен табып, ризаһыҙлыҡ белдереп, мыжый ҙа йөрөй. Әсәйемде йәлләйем. Өләсәйем ни өсөн шулай икән? Олоғая килә һаман холҡо боҙола бара. Унның менән ниндәй мөғәмәләлә булырға?**

**Көнһылыу ЯХИНА".**

Көнһылыу ҡыҙым! Тәрбиәле бала икәнлегең хатыңдан, һорауыңдан уҡ күренеп тора. Һин өләсәйеңде ғәйепләмәйһең, унның холҡона төшөнөргә һәм "нисек мөғәмәлә итергә кәрәклеге" тураһында һорайһың. Был бик яҡшы.

Өләсәйең мәсьәләһенә килгәндә иһә, эш былай. Беренсенән, ҡартлыҡ - шатлыҡ түгел, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Икенсенән, халыҡта тағы: "Етмеш, һиңә ни ҡылдым? Уртымдағы теште алдың, башымдағы һушты алдың",- тип тә әйтелә. Сәс ҡойолоу, теш төшөү, хәрәкәт һүлпәнәйеүе һәм башҡалар күҙгә күренгән үҙгәреш. Ундай үҙгәреште аңлатып тороуҙың кәрәге юҡ. Ә бына зиһен ҡаҡшауы, һуш алыныуы, холоҡ боҙолоуы күҙгә күренмәй. Беҙ олоғая барған һайын ундай үҙгәрештәрҙең дә булыуы ихтимал икәнлеген күҙҙән ысҡындырабыҙ. Әлбиттә, төрлө кешегә ҡартлыҡ төрлөсә килә. Ул кешенең ҡанындағы булмышынан, яҡты донъяла йәшәү рәүешенән тора.

Ниндәй ғүмер кисергәнһең, ниндәй холоҡло кешеләр менән аралашҡанһың, хыялдарың тормошҡа ашҡанмы, ҡәнәғәтһеҙлек ҡалмағанмы, ятраҡан кешең менән ғүмер иттеңме, әллә һөйгән йәрең ғүмерлек һағыш булып йөрәк башҡайыңа ҡан һауҙырҙымы, балаларың үҙеңә ҡарата итәғәтлеме, ирең рәнйетмәнеме... Ҡыҫҡаһы, ҡартлыҡ - ул йәш сағыңдағы йылдарыңдың сағылышы.

Ҡартлыҡтың тағы бер яғы бар: йәш саҡта маҡталған сифаттарыңдың ҡартайғас, киреһенсә, насар холоҡ һымаҡ ҡабул ителеүе ихтимал. Талапсанлыҡ, үҙ һүҙеңде бирмәү, һаҡсыллыҡ (боронғо әйберҙәрен ташлатмау) һәм башҡалар.

Ҡарт кешене бағыу бала бағыуға ҡарағанда күпкә ҡатмарлы һәм ауыр.

Мейеләге һушты алыу, тигән һүҙ ҙә юҡтан әйтелмәгән. Мейенән һуш ҡына алынмай, мейе күҙәнәктәрендә бихисап үҙгәрештәр була. Унның ла беҙҙең өсөн ҡараңғы.

Әйтәһе һүҙҙең әрәсәһе шул: өлкән кешенең холҡон үҙгәртеп булмай, уға фәҡәт күнергә, яйын табырға, күп мыжыуҙарына иғтибар итмәҫкә, "ярай" тип, күндәмлек күрһәтергә кәрәк. Нисек кенә булмаһын, беҙ ата-әсә алдындағы бурысыбыҙҙы үтәргә тейешбеҙ. Тик өлкәндәрҙе ҡағырға, рәнйетергә ярамай.

Ҡайһы бер ҡарыуы ҡайтҡан кешеләрҙең ҡарғауы ла ихтимал. Уларҙың ҡарғышынан ҡурҡмағыҙ, был зиһен үҙгәреше арҡаһында булыуы ихтимал. Кешегә телдән әйтелгән ҡарғыш төшмәй, кешенең "аһы" төшә.

Ҡарғыштың да, рәхмәттең дә төрлөһө була. Ысынлап та, рәхмәтле булып әйтелгән "рәхмәт" тә, әҙәп өсөн генә әйтелгәне лә була. Ҡарғыш та шуның һымаҡ. Ысын рәнйеү арҡаһында әйтеп ебәрелгәненең ҡоро тел "сарлап" әйтелгәне менән айырмаһы бар.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

✓ *Ғәйнә башҡорттары Кама буйындағы руда сығарыу эшендә әүҙем ҡатнаша, бында башҡорттар араһынан да билдәле рудопромышленниктар барлыҡҡа килә. Уларҙың иң арҙаҡлыһы - Исмәғил Тасимов.*

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# БЕҘ ҮҘЕБЕҘ ҒӘЙНӘЛӘР!




Ғәйнә башҡорттары 1735-1740 йылдарҙағы ихтилалда ла йән аямай көрәшкә ынтыла, үҙ ерҙәренә үҙҙәре хужа булыуҙан һис ваз кисмәй. Бына шул заман документтарында теркәлеп ҡалған ғәйнә башҡорттарының ҡайһы берҙәренең исемшәрифтәре: Аҡлыш ауылынан Йосоп һәм Имәнғол Аҫабиндар, Шараши (Сараши?) ауылынан Туйсыбай Пушкаров һәм Ромашка Сабаниев, Ҡыҙыл Ярҙан Батыш Сабаниев, Ҡаҙмағы (Ҡаҙмаҡты?) ауылынан Туйғилде Байҡашев, Дүсәй Иҫәнәев, Асый Чыпчыков, Ирыс (Ырыҫ?) ауылынан Тетү (Тетәй?) Биктулин, Бай ауылынан Абдулла Мырҙалин. Ғәйнә ере лә батша карателдәре тарафынан ҡанға батырыла. Бындағы башҡорттарҙың өстән ике өлөшө үлтерелә, һөргөнгә ебәрелә, әсир алынып, Рәсәй төбәктәренә һатып ебәрелә. 1726 йылда Кунгур бургомистры Юхнев Ғәйнә олоҫонда 600 хужалыҡ булып, хәрби хеҙмәткә яраҡлы 1800 ир-аты теркәһә, 1739 йылда генерал Урусов бындағы 214 хужалыҡта барлығы (ике енестән дә) 1744 кеше ҡалыуын күрһәтә.

Күп юғалтыуҙарға ҡарамаҫтан, ғәйнәләр, башҡа ырыу башҡорттары менән бер рәттән, 1772-1775 йылдарҙа Емельян Пугачев етәкселегендә Яйыҡ казактары башлаған оло ихтилалға ҡушыла. Ғәйнә башҡорттарынан Абдей Абдулов (Ғәйниямаҡ ауылы), Худхуд мулла Әҙиғут Тимәсев (Елпачиха ауылы), Батырҡай Иткинин (Тундортамаҡ ауылы), мулла Сәйфулла Сәйәшев (Усман ауылы), Әҙел Азменев (Елпачиха ауылы), Ябан Ҡуштанов (Ҡыҙыл Яр ауылы), Туҡтамыш Ишбулатов (Барҙы ауылы) Пугачев полковниктары булып танылa. Ихтилал командирҙарынан Әбдесәләм Рамзин (Ишмән ауылы), старшина Рахманҡол Иртуғанов (Елпачиха ауылы), старшина Көсөкбай Абдуллин (Ҡыҙыл Яр ауылы) үҙ отрядтары менән яуға ҡушыла.

Ғәйнә башҡорттары Рәсәй империяһының Кама буйындағы руда сығарыу эшендә бик әүҙем ҡатнаша, бында башҡорттар араһынан да билдәле рудопромышленниктар барлыҡҡа килә. Уларҙың иң арҙаҡлыһы - Ҡуян ауылы башҡорто Исмәғил Тасимов. Ул үҙенең эшселәре менән металлургия заводтарына йылына 340-960 мең бот руда ташый. Исмәғил Тасимов 1771 йылда Берг-коллегияға үҙ иҫәбенә Югов баҡыр иретеү заводтары эргәһендә тау училищеһын асыу хаҡында мөрәжәғәт итә. Был уҡыу йортонда башҡорт рудопромышленниктарының балаларын уҡытыу ҙа ҡүҙаллана. Әммә училище 1774 йылда Пермь крайында түгел, Санкт-Петербургта асыла. Байтаҡ ваҡыт уҙғас, 1830 йылда рус академигы Д.И. Соколов ошо хаҡта бына нисек яҙған: "Кто бы поверил, что полудикий башкирец из дымного аула своего положил первый камень в основание Горного Корпуса... По своенравию судьбы, башкирцы были виновниками нашего просвещения в деле Горном".

Ғәйнә башҡорттары башлыса Пермь крайының Барҙы районында йәшәй, уларҙы, Тулва йылғаһы исеменән сығып, Тулва башҡорттары, тип тә атайҙар. Бында уларҙың 40-тан ашыу ауылдары бар. Пермь ҡалаһында 10 меңгә яҡын башҡорт йәшәһә, Пермь районының Ҡуян һәм Башҡорт Ҡултайы (Башҡултай) ауылдарында 1500 башҡорт теркәлгән. Крайҙың Суксун районында, Уинский районының Толбаш ауылында ла бер ни тиклем башҡорт кешеһе бар. Чернушка ауылында һәм районында (3 меңләп), Куедала (2 меңгә яҡын) ла ғәйнә башҡорттары татарҙар һәм башҡа бер башҡорт ырыуҙары вәкилдәре менән ҡатнаш ауылдарҙа көн итә. Свердлов өлкәһендә, Ҡариҙел үҙәнендә бисер-ғәйнә башҡорттарының вариҫтары йәшәй. Мәсетле районының Ҡорғат ауылын да ғәйнә башҡорттары нигеҙләгәне билдәле. Ғәйнәләрҙең Дим буйында Ғәйниямаҡ һәм Туҡмаҡ (Әлшәй районы), Кесе Ғәйнә һәм Тауҡай Ғәйнә (Миәкә районы), Мәнәүез-Мәскәү (Бишбүләк районы) исемле ауылдары бар. Тәтешле районының Бүлйегәрт-Ҡайпан ауылы башҡорттарының бер өлөшө сығышы менән ғәйнә ырыуына ҡарай.

Этногенетик тикшеренеүҙәр ғәйнә башҡорттарының барыһы ла тиерлек бер генә - R1b-M173 гаплотөркөмөнә ҡарауын асыҡланы. Ошо гаплотөркөмдөң ғәйнәләргә хас булған R1b-U152 субклады төрки халыҡтарында һирәк осрай, бындай генетик маркерлы төркөмдәр Үҙәк, Көнбайыш һәм Көньяҡ Европа халыҡтары араһында таралған. Ошондай гаплотиптар башҡорттарҙың байлар һәм ҡошсо ырыуҙары вәкилдәрендә лә осрай. Был факт урындағы финпермь субстратына ошо тарафтарға килеп ерләшкән башҡорт ҡәүеме вәкилдәре ҡушылыуҙан формалашҡан айырым бер ырыу үҙенә ғәйнә атамаһын алғандыр, тигән һығымта яһау мөмкинлеген бирә.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 1-3-сө һандарҙа).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Дивизияның тыуыуы

Полк комиссары вазифаһына тәғәйенләнгән Сәғит Әлибаев Көйөргәҙе районының Яманһары ауылында тыуып үҫә. Ауыл мәктәбе уҡытыусыһынан мәғариф халыҡ комиссары вазифаһына тиклем күтәрелә, һуғыштан алдараҡ СССР Юғары Советы депутаты итеп һайлана. Һуғыштың аяуһыҙ ҡатмарлы шарттарында ла көндәлегенә дивизиялағы хәл-ваҡиғалар, уның командирҙары һәм яугирҙары хаҡында байтаҡ ҡына ҡиммәтле мәғлүмәт теркәй алған. 112-се Башҡорт атлы дивизияһының тәүге көндәре хаҡында Сәғит Әлибаев бына низәр яҙа:

Дивизияның штабы клубта урынлашҡан. Яңы килгән, әле частарға бүленеп өлгөрмәгән һалдат, кесе командир һәм офицерҙар менән беренсе ҡат шығырым тулы...

Полктың формирование командиры лейтенант М.Ш. Әминев ине. Уның менән бергәләп бөтмәҫ-төкәнмәҫтәй тойолған эштәргә сумдыҡ. Уларҙың бөтәһе лә бик ҡатмарлы, мөһим, ашығыс: ауыл-ҡалаларҙан, туранан-тура фронттан - алғы ут һыҙығынан килгән иптәштәрҙе урынлаштырырға, кейем-һалым, аҙыҡ-түлек, фураж һәм бүтән мәсьәләләрҙе хәл итергә, шул уҡ ваҡытта боевой һәм политик әҙерлек эштәрен ойоштороп ебәрергә, алып барырға кәрәк. Шулар менән булып, тәүлектең үткәне һиҙелмәй ҙә ҡала.

Полкты ойоштороп бөтөүгә, ваҡытлыса командир булып капитан Хәмзә Манапов килде. Ғафури районынан. Һуғышҡа тиклем хәрби мәктәп тамамлаған. Бер көндө, тактик уйындарҙан һуң, беҙ уның менән "казармаларҙы" ҡарап сыҡтыҡ. Пулеметсылар эскадроны ятағында күпселек һалдаттар ике ярусла карауаттарҙа, ҡалғандары - ҡайһыны ҡайҙа теҙелешеп ултырған. Бина таҙа, йыйнаҡ. Ял сәғәтенә тап булдыҡ. Берсә ҡурайсылар, берсә гармунсылар үҙ һөнәрҙәрен күрһәтә. Берәм-берәм дә, парлашып, күмәкләшеп тә бейергә төшөп китәләр. Был эскадрон егеттәренең күпселеге - Маҡарҙан. Уларҙың байтағы, айырыуса Ғариф Абдуллин, Ғәйнан Солтанов, бер туған Сафый һәм Миннәхмәт Ғибәҙуллиндар менән мин яҡшылап таныштым да инде. Баймаҡ, Ҡырмыҫҡалы, Ғафури районларынан егеттәр бар. Һалдаттарҙың сослогона, таҫыллығына һоҡланып туймаҫлыҡ - өҙә баҫып, ут сәсрәтеп бейейҙәр. Ҡаршы ғына йортта урынлашҡан өсөнсө эскадрон егеттәре лә ҡунаҡҡа килгән. Батырғәли Вахитов ҡурайын да алып килгән - хужаларға ҡушылып һыҙҙыра ғына. Бына Баймаҡ егеттәре Сәлихҡолов, Көсәпҡолов, Ғәлиәхмәт Сәйфуллиндар йыр башлап ебәрҙе. Унан - тағы бейеү.

Ҡыҙыу, етеҙ темптағы башҡорт бейеү көйҙәренән һуң ҡурайсылар һалмаҡ "Перовский"-ға күсте. Дәртен ҡайҙа ҡуйырға белмәгән йәш һалдат Сафый ҡыҫҡырып ебәрҙе:

- Йә, ололар, ни көтөп ултыраһығыҙ? Самай һеҙ баҫа торған көй! "девятьсотыйҙар" көйө бит, - тине күтәренке тауыш менән.

- Эйе, был беҙҙең көй инде, - тине Бишбүләк яғынан килгән Фәтих Фәхретдинов, - "девятьсотыйҙар"ҙыҡы. Янында ултырған дуҫы Йыһангир Иҫәнғужин менән улар, һауалы ғына хәрәкәттәр яһап, бейеп алып киттеләр, үҙҙәренүҙҙәре дәртләндерҙәләр: "Һе! Һе! Һе!"

Республикабыҙҙың төрлө мөйөштәренән бына ошондай аҫыл ир-егеттәр дивизияға торған һайын күберәк ағыла. Ерен-һыуын, тыуған Уралын, бөтә Ватанын, азатлығын ҡурсаларға, тип ат эйәрләй ил улдары.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔**1791-1859 йылдар** - билдәле рус яҙыусыһы С.Т. Аксаковтың ғүмер йылдары.

➔**1792-1794 йылдар** - Өфө һәм Сембер губернаторы Александр Неутлинг идара иткән.

➔**1793 йылдың сентябре** - Рәсәй хөкүмәтендәге башҡорт депутаттары Әмирхан Абызаев менән Әбделйәлил Солтанов башҡорттарҙың линия хеҙмәте үтеү тәртибен үҙгәртеү һәм уларҙың ергә хоҡуҡтарын раҫлау тураһында Екатерина II батшаға хат яҙа.

➔**1795-1796 йылдар** - Өфө һәм Сембер губернаторы Сергей Вязмитинов идара иткән.

➔**1796 йыл** - Өфө наместничествоһы бөтөрөлә һәм уның биләмәләре Ырымбур губернаһына бирелә. Өфө өйәҙ ҡалаһы булып ҡала.

➔**1797 йылдың 23 марты** - Ырымбур губерна ҡалаһы итеп раҫлана.

➔**1798-1803 йылдар** - Ырымбур хәрби һәм граждандар губернаторы Николай Бахметев идара итә. Халыҡ һөйләүенсә, ул үҙенең айырым кешеләре тарафынан насар йорттар булған кварталдарҙы яндыртҡан һәм шундай юл менән ундағы халыҡты ҡала ситенә күсергә мәжбүр иткән.

➔**1798 йыл** - Пермь губернаһы ойошторола.

➔**1798 йыл** - башҡорттар хәрби ҡатлам тип иҫәпләнә башлай, биләмәләр Ырымбур хәрби губернаторы идаралығындағы 12 кантонға бүленә. Һаҡ маҡсатында Верхнеуралдан алып Гурьевҡа тиклем Яйыҡ буйы сиге кантондар араһында бүленеп сыға. 17-нән 45 йәшкә тиклемге бөтөн башҡорттар ҙа хеҙмәт итергә бурыслы тип иҫәпләнә һәм һәр берәһе ике аты, ҡоралы, хәрби кейеме менән сик буйында хеҙмәт итергә тейеш була.

➔**1798 йылдың декабре - 1824 йылдың июне** - мосолмандарҙың дини йыйылышы мөфтөйө Мөхәмәтйән Хөсәйеновтың эшмәкәрлек йылдары.

➔**1799 йыл** - Өфөлә христиандарҙың дини идаралығы - епархия ойошторола.

**XVIII быуат ахыры** - Ырымбурҙа, Өфөлә, Силәбелә һәм Минҙәләлә бәләкәй халыҡ училищелары асыла.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**

**(Дауамы бар).**

✓ ***Донъяла һәр 40 секунд һайын кемдер үҙ теләге менән яҡты донъянан китә. Уларҙың 75 процентының психикаһы ҡаҡшаған. Психика ҡаҡшау тигәндә, ул стресс сәбәпле күңел торошо үҙгәреүе булыуы ла мөмкин.***



**Әллә заман үҙгәрә, әллә кеше үҙе, һәр хәлдә, бынан бер нисә тиҫтә йыл элек кенә хатта "Дин - ул халыҡ аңын томалаусы әфиун" тип халыҡты дин тотоуҙан тыйған ваҡыттарҙа ла үҙ иркендә яҡты донъя менән хушлашыусылар бик күҙәтелмәне һәм һирәк була торғайны. Хәҙер дингә лә тыйыу юҡ, дин менән бергә башҡа барлыҡ нәмәләргә лә иркенлек, ә кире күренештәр күбәйә, хатта уның сәбәптәре нимәлә, сығанағы ҡайҙа икәнен дә асыҡлауы ауыр. Йәмғиәт, ололар ғына түгел, хатта үҫмерҙәр, балалар ҙа агрессивҡа әйләнә бара. Ата-әсәләр балаларын нисек тәрбиәләргә белмәй баш вата - яңылыш берәй һүҙ әйтеп, бер-бер хәл булып ҡуймаһын… Ошо мәсьәләгә асыҡлыҡ индереү маҡсатынан һораүҙарыбыҙҙы Республика психотерапевтика үҙәгенең баш табибы, БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш психотерапевты Илгиз ТИМЕРБУЛАТОВҡа юллайбыҙ.**

# УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ,

## киленем, һин тыңла!

**Бөгөн социаль селтәрҙәрҙә лә, киң мәғлүмәт сараларында ла балаларҙың һәм үҫмерҙәрҙең агрессив холҡо, уларҙың агрессив тәртибе тураһында бик күп мәғлүмәт донъя күрә. Бының сәбәптәре нимәлә тип уйлайһығыҙ?**

- Суицид, йәғни үҙ-үҙеңә ҡул һалыу сәбәптәре ошо темаһы өйрәнгән ғалимдар тарафынан һаманғаса ахырынаса асылмаған, ул ҡайҙан, нисек барлыҡҡа килә - әлегә тиклем билдәһеҙ. Һәм сәбәптәр ҙә һәр саҡ үҙгәреп тора. Бөгөн йәмғиәттә аяныслы һөҙөмтәгә килтергән барлыҡ сәбәптәр тип һаналған яуапһыҙ мөхәббәт, ғаиләләге низағтар, башҡа социаль проблемалар, хатта психик тайпылыштар - улар берәһе лә төп сәбәп түгел, ғәҙәттә, һуңғы тамсы.

Донъяла һәр 40 секунд һайын кемдер үҙ теләге менән яҡты донъянан китә. Уларҙың 75 процентының психикаһы ҡаҡшаған. Психика ҡаҡшау тигәндә, ул мотлаҡ шизофрения булмаҫҡа, ә стресс сәбәпле күңел торошо үҙгәреүе булыуы ла мөмкин. Ә беҙҙең бөгөнгө тормошта стресс көсәргәнеше көн үҙәгендә торған төп мәсьәлә.

**Әммә был хәл итеп булмай торған мәсьәлә түгел бит инде, был күренеште иҫкәртергә, уға юл ҡуймаҫҡа мөмкин. Быға нисек өлгәшергә?**

- Кешеләрҙең үҙ-үҙенә ҡул һалыуы ихтималлығы тураһында халыҡтың мәғлүмәтлелеген арттырырға кәрәк. Был бөгөн бөтә донъялағы һаулыҡ һаҡлау системаһы алдында торған етди проблема. Һәр кеше ҡыл өҫтөндә торған ғүмерҙе, яңылыш аҙым яһарға ынтылған кешене ҡотҡарып ҡалыу өсөн ниндәй ғәмәл ҡылыу кәрәклеген белергә, был аҙымға этәргән хәлдәрҙе кәметергә, стресс кисереүселәрҙе уларҙың яңғыҙ түгеллегенә инандырырға кәрәк.

**Һуңғы ваҡытта йәштәрҙең, балаларҙың һәм үҫмерҙәрҙең ғүмер ҡыйылыуға еңел ҡарауы замандың башҡа проблемаларын икенсе планға сығара. Ни өсөн улар шундай аҙымға бара?**

- Мөхит шул тиклем тиҙ үҙгәрә, ә йәштәр мәғлүмәт ағымын эшкәртеп өлгөрә, йәғни файҙалыһын ғына айыра алмай. Йәш саҡта бит беҙ барыбыҙ ҙа перфекционистар, максималистар, беҙҙең өсөн аҡ һәм ҡара төҫ кенә бар, башҡа төҫтәрҙе күрмәйбеҙ. Шуға ла ошондай импульсив, ҡайһы бер осраҡта фажиғәле аҙым яһала ла инде.

Йәштәрҙең шулай уҡ социаль аралашыу тәжрибәһе юҡ. Был да бик мөһим фактор. Беҙ даими рәүештә мәктәптә беренсе синыфтан психологияны уҡытыуҙы, тәүҙә уйын формаһында, һуңынан, өлкәнәйә бара, етди итеп психологияны индереү мәсьәләһен күтәрәбеҙ. Сөнки ул бик кәрәкле, балаларҙы социумда аралашырға өйрәтеүсе фән. Ә беҙҙең мәктәптәрҙә әлегә психолог - үҙ предметы булмаған берҙән-бер белгес. Башҡа уҡытыусыларҙың барыһының да үҙ фәне бар, улар шуны уҡыта - ә психологтыҡы юҡ! Әлбиттә, башҡа предметтар ҙа бик мөһим, әммә һин математиканы, физиканы, химияны яҡшы белеп тә, кешеләр менән аралаша, диалог ҡора, уртаҡ фекергә килә белмәһәң - был бик хәүефле. Сөнки атом бомбалары эшләгән физик булһаң да, уны эшләргә ярамағанлығын аңламаһаң - бына шул насар.



***Ә беҙҙең мәктәптәрҙә әлегә психолог - үҙ предметы булмаған берҙән-бер белгес. Башҡа уҡытыусыларҙың барыһының да үҙ фәне бар, улар шуны уҡыта - ә психологтыҡы юҡ! Әлбиттә, башҡа предметтар ҙа бик мөһим, әммә һин математиканы, физиканы, химияны яҡшы белеп тә, кешеләр менән аралаша, диалог ҡора, уртаҡ фекергә килә белмәһәң - был бик хәүефле. Сөнки атом бомбалары эшләгән физик булһаң да, уны эшләргә ярамағанлығын аңламаһаң - бына шул насар.***

Эйе, мәктәптәрҙә психологтар һаны артты. Һәр хәлдә, отчеттар буйынса шулай. Әммә уларҙың белеме тейешле кимәлдә түгел. Ә ҡайһы бер мәктәптәрҙә хатта психолог урынына социаль педагог ҡына бар. Социаль педагог - ул махсус психологик белеме булмаған кеше. Ә беҙгә мәктәптәрҙә хәүеф төркөмөн асыҡлау өсөн үҙ эшен яҡшы белгән белгестәр кәрәк. Бик йыш, нимәгә мәктәптәргә психологтар, былай ҙа барыһы ла күҙ алдында, һәр бала класс етәксеһенең күҙ уңында, тигән кире ҡараш ишетергә тура килә. Эйе, бәлки, барыһы ла мәктәп психологына асылып, эс серен һөйләп тә бармаҫ, әммә ул скрининг ысулы менән теге йәки был үҫмерҙең ниндәй тайпылышы барлығын асыҡлаясаҡ, һәр хәлдә, бер аҙ аңлап, уны белгестәргә йүнәлтәсәк.

Белгестәр балаларҙың һәм үҫмерҙәрҙең аутоагрессияһына иғтибарлы булырға тейеш. Мәҫәлән, бөгөн ул үҙенә ниндәйҙер зыян килтерһә, киләсәктә башҡа ысулдарҙы ҡулланыуы мөмкин. Ғәмәлдә, бер фажиғәгә 10-20 тапҡыр нимәләр эшләп ҡарау осрағы теркәлә. Шуға, һәр кире ҡылыҡҡа иғтибар итеү зарур, хатта ошо хаҡта уй ғына булыуы асыҡланғанда ла.

**Ата-әсәләр өлөшөнә нимә тура килә? Улар ниндәй үҙгәрештәргә иғтибар итергә тейеш?**

- Баланың кәйефенә, ашау-эсеүенә. Йәғни бала ҡапыл ашауҙан туҡтай икән, был ябай көйһөҙләнеү, ашҡаҙан-эсәк тракты эшмәкәрлегенең боҙолоуы ғына түгел, ә депрессия, башҡа ауыр сирҙәр билдәһе булыуы мөмкин. Шулай уҡ аҙ йоҡлауын, төнөн уяу ятыуын, таңдан уяныуын да иғтибарҙан ситкә ҡуйырға ярамай. Әгәр быға тиклем үҙенең тышҡы ҡиәфәтенә иғтибар итеп кенә йөрөп, ҡапыл иғтибар итмәй башлаһа йәки ҡапыл сәсен икенсе төҫкә буяһа, үҙ-үҙенә бикләнһә, үлем темаһы менән ҡыҙыҡһына башлаһа, шундай әҙәбиәт уҡыһа, интернетта, социаль селтәрҙәрҙә шундай темаларҙы эҙләһә - был бик хәүефле билдә. Үҫмерҙең белем биреү учреждениеһына барырға теләмәүе лә мөмкин, сөнки унда уны кәмһетәләр, унан көләләр йәиһә был депрессия, кешенең психологик йәки психик яҡтан ныҡлы булмауын күрһәтеүе ихтимал.

Хатта һис бер сирләмәгән баланың ҡапыл бик йыш ауырый башлауы ла депрессия билдәһе, иғтибар талап итеүе, ярҙам һорауы булыуы мөмкин. Әммә ололар быны белмәй, сирле баланы дарыу менән дауалай, тик уның күңеле яралы килеш ҡала.

**Хәүеф төркөмөнә ниндәй ғаиләләр инә? Сөнки, электән килгән "бай балалары һәйбәт", "ярлы балаһы - насар" тигән ҡалып һаман да йәшәй һәм күп осраҡта ғаиләнең именлеген ошо бай һәм ярлы тигән сифат билдәләй ҙә ҡуя…**

- Төрлө ситуацияларҙы тикшереү һәм анализлау шуны күрһәтә: күпселек осраҡта тыштан имен күренгән ғаиләләрҙә үҫкән балалар шундай аяныслы аҙымға бара. Улар бер ваҡытта ла тәртип боҙоп, полиция участкаһында һәм балиғ булмағандар эштәре буйынса комиссияла иҫәптә тормаған, ата-әсәләре яҡшы, эштәре бар, аҡсаға мохтаж түгелдәр. Тыштан ҡарағанда - барыһы ла яҡшы. Ә тышҡы ялтырауыҡ артында - һалҡынлыҡ. Балаға һалҡын мөнәсәбәт, уға иғтибар бүлмәйҙәр, шөғөлләнмәйҙәр, нимәләр алып бирәләр ҙә ҡотолалар һәм һәр ваҡыт аҡса эшләү менән мәшғүлдәр. Шундай ата-әсәләр менән һөйләшә башлаһаң улар: "Ғәфү итегеҙ, беҙ аҡса эшләйбеҙ, һалым түләйбеҙ, баланы мәктәпкә бирҙек - дәүләт тәрбиәләһен, дәүләт шөғөлләнһен", - ти. Бында ата-әсәләр шуны аңлаһын ине: бер генә, хатта иң яҡшы дәүләт тә ата-әсәне, иң маҡтаулы балалар йорто ла ғаиләне, хатта уллыҡҡа, ҡыҙ итеп алған ғаилә булһын - алыштырмай. Шуға күрә баланың ата-әсә менән мөнәсәбәте - иң мөһиме, тиер инем. Улар балаларына дуҫ булырға, уларҙың ышанысын яуларға тейеш. Бала сит кешегә түгел, барлыҡ кисерештәрен ата-әсәһенә һөйләһен, уларҙан һораһын. Ә бөгөн балалар хатта "бишле" билдәһе урынына "дүртле" алып ҡайтыуынан ҡурҡа, сөнки уға өйгә индермәйем, ашатмайым, яратмайым кеүек төрлө янауҙар яуа. Ололар балаларҙың идеаль булыуын талап итә. Был тәрбиә өлкәһендәге бик ҙур хата.

***✓ Төрлө хәлдәрҙе тикшереү һәм анализлау шуны күрһәтә: күпселек осраҡта тыштан имен күренгән ғаиләләрҙә үҫкән балалар шундай аяныслы аҙымға бара.***



Һуңғы ваҡыттағы ғаилә институтының бөсе китеүе лә сәбәптәрҙең береһе булып тора. Бөгөн күпме ғаилә ҡорола, айырылышыуҙар һаны ла шунса. Хатта ҡайһы бер төбәктәрҙә улар бер ярымға күберәк булып китә. Тулы булмаған ғаиләлә ҡатын-ҡыҙға яңғыҙ бала тәрбиәләүе еңел түгел.

Мәктәптә үсмерҙәр, балалар араһында бик йыш күңел төшөүе, үҙ-үҙенә бикләнгәнлек, йомоҡлоҡ күҙәтелә. Был - стандарт картина. Хәҙер иһә үсмерҙәрҙә депрессия икенсе төрлө сағылыш ала: хулиганлыҡ, девиант тәртип, наркотиктар, алкоголь, башҡа психоактив матдәләр ҡулланыу. Былар барыһы ла бик йыш, хатта һәр ваҡыт депрессия тураһында һөйләй. Ундай үсмер хулиган түгел, ә бары тик уның депрессияһы шундай сағылыш ала.

Суицидаль тәртиптең тышҡы һәм эске төрө була. Тышҡыһында ул үҙенә ниндәйҙер зыян килтерә. Был осраҡты бер нисек тә күҙ уңынан ысҡындырырға, уға күҙ йоморға йәки, барыһы ла имен үтеп китте, тип тынысланырға ярамай. Эске форма иһә, кешенең үҙ ғүмерен ҡыйыу тураһындағы уйҙары. Был эске формалар тураһында бик аҙҙар ғына белә. Һәм эш олоға киткәнсе береү ҙә артыҡ иғтибар бирмәй. Быны бары тик әңгәмәләшеү, анкета тултырыу, һорауҙар биреү һәм уларға яуаптар алыу аша ғына асыҡларға мөмкин.

Бөгөн мәктәптәрҙә тестар һөҙөмтәле түгел, файҙаһыҙ, тиҙәр. Хатта ҡайһы бер психологтар ҙа шуны раҫлай. Күп осраҡта улар хаҡлы. Ни өсөн? Сөнки тест йәки әңгәмә үткәргәндән һуң яуаптарҙы уҡый белергә лә кәрәк. Әлбиттә, тест үткәреп, яуаптарҙы кәштәгә саңланырға һалып ҡуйһаң, файҙаһы булмаясаҡ. Тестарҙан тыш, баланы күҙәтеп торорға кәрәк. Шуға күрә бында иң ҙур яуаплылыҡ ғаиләгә һәм класс етәксеһенә төшә.

**Республикала тәртибендә, үҙ-үҙен тотошонда шундай үҙгәрештәр күҙәтелгән балаларға һәм үсмерҙәргә ниндәй ярҙам күрһәтелә?**

- Беҙҙә берҙәм ярҙам итеү алгоритмы булдырылған. Теләһә ниндәй медицина ойошмаһына хәүеф төркөмөндәге бала килеп эләгә икән, шунда уҡ мәғлүмәт барлыҡ полиция бүлексәләренә һәм балиғ булмағандар эше буйынса комиссияға ебәрелә. Сигнал беҙҙең үҙәккә лә килә һәм белгес хәл-торошто баһалап, медицина ойошмаһына бара, унда эш алып бара, шулай уҡ бала уҡыған мәктәптә лә белгестәр эшләй, уҡыусылар, дуҫтары менән аралаша. Үҙәктең үҙенең амбулатор һәм стационар, шулай уҡ көндөҙгө бүлексәһе бар. Унда балаларға, үсмерҙәргә генә түгел, уларҙың яҡындарына ла ярҙам күрһәтелә, шуға күрә дауалау-реабилитация тулы күләмдә башҡарыла тиергә мөмкин. Республика ҡала-райондарында психотерапевтик хеҙмәттең муниципаль-ара үҙәктәре, тәүлек әйләнәһенә эшләгән - 475, көндөҙгө - 281, амбулатор 21 поликлиникаһы бар. Үҙәк асылғандан алып республикала суицидтар һаны ике тапҡырға кәмене. Был Рәсәй субъекттары араһында иң яҡшы күрһәткес. Беҙ эшләй башлағанда 100 мең кешегә 50 кеше тура килһә, былтырғы йылдың тәүге яртыһында - 19,1. Ведомство-ара эшмәкәрлекте айға һалыу йәки проблемаға комплекслы ҡараш һөҙөмтәһендә балалар-үсмерҙәр суицидын кәмене.

**Психологтар фекеренсә, Башҡортостанда иң хәүефле тип һаналған төбәк бармы? Һәм быны сәбәбен ниҙә күрәһегеҙ?**

- Урал арьяғын һәм төньяҡ-көнсығыш райондарын хәүефле төбәк тиер инем. Улар иҡтисади йәһәттән депрессив тип иҫәпләнә. Бында шулай уҡ эшһеҙлек һәм халыҡтың эскегә бирелеүе лә сәбәп булып тора. Республиканың көнбайышында иһә, киреһенсә, райондар имен тип һанала, әммә ҡайһы бер тикшеренеүҙәр ул яҡ халҡының кредитҡа батҡанын һәм уны үҙенең ғүмере менән түләүен асыҡлай.

Балалар һәм үсмерҙәр суициды араһында ундай динамика: ҡайҙалыр күберәк, ҡайҙалыр әҙерәк тигән күренеш юҡ. Уларҙа нигеҙҙә хис-тойғо һәм ярһыулыҡ сәбәп булып тора, был ғаиләнең һәм балалар-үсмерҙәрҙең эргәһендә булған кешеләрҙең эшләп еткермәүе, иғтибарһыҙлығы һөҙөмтәһе.

Шулай уҡ киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәре лә мәҡәләләр эшләгәндә иғтибарлы булһын ине. Бик йыш улар мәғлүмәтте күберәк кеше ҡараһын тип, алдын-артын уйламай, башҡаларҙан алданыраҡ ҡуйып ҡалырға тырыша. Әлбиттә, уларҙы ла аңларға мөмкин, уларҙың бурысы - күберәк аудитория йәлеп итеү. Әммә былдай алым менән уҡыусыларҙы йәлеп итеү хәүефле генә түгел, енәйәт тә булып тора. Һөҙөмтәлә мәғлүмәтте күп кеше, шул иҫәптән балалар, үсмерҙәр ҙә ҡарай һәм улар журналист яҙған объект кеүек булып ҡарарға теләй. Шуға күрә бындай кире күренештәрҙе яҡтыртҡанда бик грамоталы һәм абай булырға кәрәк. Яҙған осраҡта ла ҡоро мәғлүмәт кенә бирергә йәки ҙур мәҡәлә булһа, белгес менән кәңәшләшергә кәрәк. Бик булмаһа, фажиғә тураһында ентекләп яҙмай, уның тормошҡа ашырылыу ысулы тураһында хәбәр итмәй, ҡоро факт ҡына бирергә һәм шунда уҡ икенсе бер кешенең үлемесле сир менән ауырып, уны нисек еңеп сығыуы, ниндәй уңыштарға өлгәшеүе тураһында миҫал килтерергә мөмкин.

Муниципалитеттар профилактик реклама эшләгәндә лә социаль рекламаны грамоталы эшләргә тейеш. Юҡһа, Өфө урамдарының береһендә "Неважно какой вопрос перед тобой стоит жизнь, важно какой ты дашь ответ" тигән ҙур плакат эленеп торҙо. Ул психикаһы ныҡһын етмәгән үсмергә ниндәй һабаҡ бирә ала инде?..

**Башҡортостанда яҡты донъя менән ваҡытынан алда хушлашырға ашығыусыларҙың дөйөм портретын нисек итеп һүрәтләргә булыр ине?**

- Был медицина хеҙмәткәрҙәренең түгел, ә социологтарҙың бурысы булһа ла, беҙ шундай тикшереү үткәрҙек. Ул 30-40 йәштәрҙәге, эшһеҙ, алкоголь ҡулланыусы, ауыл ерендә йәшәгән, бик йыш - ғаиләһенән айырылған ир-ат.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Суицидты профилактикалау башта йәмғиәт кимәлендә, һуңынан ғына айырым кешеләр араһында алып барылырға тейеш, сөнки, яңғын һүндереүселәр кеүек, ут сығыу ихтималлығы булған нөктәләрҙе һүндермәһәк, артыҡ уңышҡа өлгәшә алмаясаҡбыҙ. Шуға күрә, уҡыу йорттарында әүҙем аңлатыу эштәре алып барыу һәм шулай уҡ алкоголгә ҡаршы сәйәсәтте көсәйтеү кәрәк. Әлбиттә, үсмерҙәр араһында үҙ теләге менән яҡты донъянан китеүселәрҙең алкоголь ҡулланыу проценты бик түбән, ә дөйөм алғанда - был проблема 50 процент осраҡта ғәиепле", - ти Илгиз Фәрит улы. Һәр хәлдә, тормошобоҙға килеп инген был афәтте тамырынан юҡ итеү юлында "Был миңә ҡағылмай", тип урап үтергә тырышыу һөҙөмтә бирмәйәсәк. Бары тик бергәләшеп, башҡорт халҡының "Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла" тигән мәҡәле нигеҙендә бер категорияға әйткәндә икенсеһе аңлап үтәгәндә генә кенә кире күренештәрҙе еңергә мөмкин.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

*БАЛАҢА УҠЫ!*



# БАТЫРҘАРЫБЫҘҘЫ...

## телдән төшөрмәйек!

**Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев тигән бик аҡыллы бер башҡорт уҙаманы йәшәгән. Ул ошолай ҡыҫҡа ғына итеп башҡорттоң төп ҡанунын, төп йолаһын яҙып ҡалдырған: "Башҡорт өс нәмәне яҡшы белә - йондоҙҙарҙы, шәжәрәһен, батырҙар тураһында йырҙарҙы..."**

...Беҙҙең башҡорт тәрбиәне ғаиләһендә алһа, тормош һабағын уҡытыусынан, әңгәмәсенән дә ҡабул итә - ата-инәһе уны донъяға күңелен шар асып йәшәргә, кеше күҙенә тура ҡарап, кеше һүҙенә ҡолаҡ һалып йәшәргә өйрәткән була. Был беҙҙең милли ҡәлеб, милли асылдың бер яғы - эскерһеҙ ябайлыҡ, тәбиғилек - ҡояштан да бөйөк булып булмай, күпме генә "уйуй"лаһаң да. Кеше ғүмерен үлсәгәндә төрлөсә әйтем бар бит: "Бер ишектән инеп икенсеһенән сыҡҡандай ғына булдым", "Бер һыуһын бесән сапҡандай ҙа булманым"... Һәр кем үҙ манараһынан тороп үлсәй ғүмерҙе. Шулай ҙа донъяға тыуып, башҡорт сәнгелдәгендә бәүелгәс, ошо халыҡҡа һәм уның йәшәгән ер-һыуына кендегең бәйләнгәс, уның телен һәм йыр-моңон, әкиәтен һәм тарихын, белемен һәм аҡылын да үҙ итәһең. Шуның һине маңҡортлоҡ көтөп тора.

...Беренсе "Салауат йыйыны" өсөн сценарий яҙырға тотоноp алдынан мин күңелем менән бала сағыма ҡайтып, аңымды һәм йөрәгемде батыр исеме менән бәйләгән иң беренсе иҫтәлектәргә барып тотондом, дөрөҫөрәге, сат йәбештем. Нисегерәк ине әле ул "Салауат" исеме менән тәүге тапҡыр ингән уйҙар, тойғолар?

Беҙҙең түбән яҡ урам - бер яҡлап теҙелгән өйҙәр - тау аҫтында. Атайым колхозда хисапсы булып эшләй, көндәр буйы тракторсылар артынан йөрөй: уларҙың һәр кемеһе күпме ер һөргәнен өс метрлыҡ менән үлсәй, наряд яба, ыңғайында үҙе тағы заправкалаусы: ауыр насос тотҡаһын салт-солт ишеп арбалағы мискәнән яғыулыҡ-солярка тултырып бирә. Атай беҙгә кискә генә эләгә: арманһыҙ булып ҡайтып килгәнен беҙ, өс ҡыҙы, тау башына сығып көтөп алабыҙ. Беҙҙе күргәс, бала йөнле атайымдың асығыу-арыуҙары онотола, ул аяғын салып тау итәгенә ултыра, беҙҙе тубыҡтарына теҙә һәм тантаналы иғлан итә: "Хәҙер бер ғәләмәт була! Анау һырттар арьяғынан, Урал тауҙары яғынан килеп сыға ул, көтәбеҙ!"

Беҙ алыҫ көнсығыш офоҡҡа мыҙырайышып ҡарап ултырабыҙ. Атайым да шул яҡтан күҙен алмай ғына һүҙен теҙә: "Шул тауҙар яғында йөрөй Салауат батыр! Аты менән осоп үтеп китә ул, ер һелкенеп ҡала, йылға һыуҙары шаулап китә, ағастар ергә хәтле бөгөлә... Һаман дошмандарҙы ҡырам, тип ҡурҡытып-баҫтырып йөрөй батыр егет. Үҙе йырлай! "Салауат нисә йәшендә? Йәшел ҡамсат бүрке башында! Баһадир булған ай Салауат егерме лә ике йәшендә!" Атайым бер әкиәтен-карһүҙен дә йырламайынса башҡармай. Уның һөйләгән батырҙары ла, дейеүҙәре лә, мәскәйҙәре лә, етем ҡыҙҙары ла, хандары ла - барыһы ла йырлай, һамаҡлай, хатта бейеп китә. Уны тын да алмай тыңлаған һайын күңелдә һорауҙар тумала башлай. Атайға һорау бирергә ярай, ул тағы ла дәртләнеп, янып-ярһып китә:

- Атай, ә Салауат батыр ныҡ көслө булғанмы?
- У-у, яман, уны бер кем дә еңә алмаған!
- Ә дошман зерә күп булһа, нишләгән?
- Зерә яман ҡыҙып китеп тереп туҙҙырып ташлаған!
- Атай, ә Салауат батыр бер юлы нисә кешене еңә?
- Унды!
- Ә егермене еңәме?
- Ныҡ йәне көйһә, еңә!
- Нисек?
- Сәтәкәй бармағы менән осора һуға!
- Ә ҡырҡ кешене еңәме?
- Себен һымаҡ итеп өрөп кенә осора!
- Салауат батыр үлмәгәнме?
- Ундайҙарҙы Хоҙай үлтермәй, ә һин, батыр, иленде бик яратаһың икән, йәнеңде йәлләмәйһең икән, улайһа, бар әйҙә, рәхәтләнеп иленде һаҡла, тиеп, ҡалдыра. Шуға Салауат кеүек батырҙар күп беҙҙә...

Уғаса булмай, кинәт көнсығыш офоҡ нурлана - ут ҡапҡандай ҡарағыҙыл булып ҙуур тулған ай ҡалҡа! Атайым беҙҙән былай ҡыуана: "Ана, күрҙегеҙме, ниндәй ғәжәп бит был, ҡайһылай матур ай ҡалҡа. О-о, ай тураһында ла йырлайбыҙ, ибет. Йырлап торһаң, көлөп ебәрә ул ай, ысын!" Атай беҙҙе тубығынан тиреп төшөрә лә, бәләкәй һылыуымды күтәреп, йырлай-бейей алдан китә - өй яғына атлай. Беҙ йыһан үренә күтәрелә барған тулған айға, уның нурына ҡойонған алыҫ тауҙарға ҡарай-ҡарай уға эйәрәбеҙ. Һырттар өҫтөнән бер батыр шәүләһе үткәндәй... Батыр беҙгә ҡарап йылмая, ә кемгәлер бармаҡ янай...

Туғанҡайҙар, ағай-эне! Әйҙәгеҙ, тип әйтмәйем, үҙегеҙ белегеҙ телегемде: батырҙарыбыҙ тураһында һөйләгеҙ балаларығыҙға, ейәндәргә, күршеләргә, ҡунаҡтарға, дуҫтарға, танышҡа! Батырҙарыбыҙ рухы беҙгә һәр заманда да кеше булып ҡалырға көс-дәрт бирер. Һөйләйек балаларыбыҙға йондоҙҙарҙы, шәжәрәбеҙҙе, батырҙарыбыҙҙы - донъяла беҙҙе аҙаштырмаҫ маяҡтарҙы!

**Сәрүәр СУРИНА.**

***✓ Һалдаттар ауыр тыранса ишекте мылтыҡ төйҙәһе менән туҡманы-туҡманы ла, аса алмағас, һалам өйөп, ут төртөп тә ебәрҙе. Кипкән ҡарағас өй "гөлт" итеп тоҡанды. Шәмсиҡәмәр йәшенгән еренән атылып сығып утҡа ташланды.***



* * *

Төш ауыуға йорт алдына Готовтар дворянлығының гербы төшөрөлгән карета килеп туҡтаны. Кусер янында ултырған лакей һикереп төшөп ишеген асты. Унан бер-бер артлы ике йәш егет сығып баҫты. Егеттәрҙең икеһе лә буйға бер сама, ярайһы бейек, киң яурынлылар. Хәрби кейемдәре, еҙ төймәләре, итектәре ялтырап тора. Унан бигерәк йөҙҙәрендәге бәхет, күҙҙәрендәге шатлыҡ саткылары, ап-аҡ тештәрен йымылдатып туҡтауһыҙ йылмайыуҙары уларҙы иҫ киткес һөйкөмлө һәм сағыу яһай ине. Урамдан үтеүсе барынялар, йәш ҡыҙҙар ирекһеҙҙән уларға иғтибар итә, шулай уҡ йылмайып баш ҡағып сәләмләп үтә ине.

Егеттәрҙе көтөп тәҙрәнән күҙҙәрен алмаған өйҙәгеләр ҡаршыларға ашыҡты. Ейәндәренән саҡ ҡына алдараҡ килеп еткән барин Дмитрий Ярославович ҡоластарын йәйеп ебәрҙе:

- Алтындарым минең! Рәхим итегеҙ өйөгөҙгә!

- Здравия желаем! Санкт-Петербургтың Беренсе кадет корпусы курсанттары һеҙҙең саҡырыу буйынса килеп етте, барин! - тип уйынлы-ысынлы сәләмләп честь бирҙе егеттәр.

Ул арала әсәләре Анна Дмитриевна килеп, икеһен бер юлы ҡосаҡлап та алды:

- Етәрегеҙ инде, ҡәҙерлеләрем, шул хәрби уйындарҙан арыманығыҙмы? Әйҙәгеҙ, өйҙә һөйөклө уландар, ейәндәр генә булып йөрөгөҙ.

- Сашенька! Андрюшенька! - ҡосаҡлауҙар, үбешеүҙәр бер килке дауам итте.

Егеттәр байрам табынына әҙерләнергә тип өсөнсө ҡаттағы бүлмәләренә күтәрелгәс, улар артынан Екатерина менде. Башта һары сәсле, йәшкелт күҙле Александрҙы, унан ҡарасман шаян Андрейҙы инеп күрҙе. Егеттәр ҙә, иҫ белгәндән яндарында булған был хеҙмәтсе ҡатынды, әсәләренең яҡын әхирәтен, серҙәшен яҡын күрәләр һәм уның ялға ҡайтҡанда барыһынан да һуң килеп сәләмләрен беләләр. Екатерина уларҙы ниндәйҙер артыҡ яҡын, эске бер һөйөү менән һөйә. Оҙаҡ күрешмәй тороп осрашҡанда күҙ йәштәренә быуылып һыға ҡосаҡлай ҙа, ебәрмәй оҙаҡ тота. Хатта әсәләре лә улай уҡ итмәй. Ә был ҡатын малайҙар өсөн үлә лә ҡуя.

Был юлы ла егеттәрҙе ҡыҫып-ҡыҫып һөйөп, маңлайҙарынан үбеп, сәс-биттәрен һыпырып, йөҙҙәренә, күҙҙәренә төбәлеп ҡарап туя алманы.

- Ыласындарым минең... бөркөттәрем... Ғәзиз аманаттарым бит һеҙ минең... аманаттарым, - тип йәш аралаш һамаҡланы.

* * *

Байрам шаулап-гөрләп башланып китте. Башта бөтә йорт менән барып сиркәүҙә патриархтың өгөт-нәсихәттәрен тыңлап, изге һыуында сафланып, суҡынып ҡайттылар. Унан оло залдың буйынан буйына һуҙылған өҫтәл артында йөҙәрләгән ҡунаҡтар менән дыу килтереп мәжлес ҡорҙолар. Хеҙмәтселәр йүгереште, ашты аш, тәрилкәләрҙе тәрилкәләр алмаштырҙы, һанһыҙ шарап мискәләре бушаны, музыканттар тирләп-бешеп көй артынан көй һыҙҙырҙы, Екатерина Икенсе хаттағы холдан залдағы хәрәкәттәрҙе күҙәтеп, күреп-аңғарып, бөтөн был сара менән идара итте.

Икенсе көн ҡала майҙанында ярлыларҙы ашаттылар, уны ла экономка ойоштороп, ылау-ылау аҙыҡ-түлекте таратып бөтөртөп, алдан алынған адрестар буйынса айырыуса мохтаждарға йөрөп сыҡтылар. Өсөнсө көн барин ҡулынан сиркәүгә аҡса алып барып тапшырҙылар. Байрамдың бар тәртиптәре шулай тейешенсә үтәлде. Дүртенсе көн барыня Екатеринаны саҡыртып алып, усына кескәй моҡса йомдорҙо.

- Катенька, ҡәҙерлем, шундай рәхмәтлемен! Һин булмаһаң, мин ни эшләр инем икән? Хатта күҙ алдына килтерергә лә ҡурҡам... Был бүләк минең һиңә тейеш булғанымдың бик бәләкәй генә өлөшө...

- Һеҙ миңә бер нәмә лә тейеш түгел. Бүләктәрегеҙҙән һандығым тулған инде.

- Тейеш... Мин һиңә ғүмерем менән бурыслымын... беләһең. Бер нәмәне лә онотмайым мин һәм онотмаясаҡмын.

Екатерина хужабикәһенең йөҙөнә тура ҡараны. Ҡара һәм зәңгәр күҙҙәр бер-береһенә һеңеп, төбөнәсә, ә бәлки, унан да төпкәрәк, үҙҙәре генә күрә һәм аңлай белгән тәрәнлеккәсә сумып төбәлеп ҡалды. Был ҡараашта улар ғына белгән оло сер, ә бәлки, тотош яҙмыштар, хатта ки донъя ята ине.

- Рәхмәт, сударыня, - экономка баҡшышты ҡуш усына ҡыҫып тотто ла сығып китте.

* * *

Был йортта тормош шулай дауам итте. Һәр хәлдә, Екатерина белгән һуңғы ун биш йылда. Петербургтың билдәле, абруйлы дворяндарының береһе, әллә нисә имениеһы, заводтары, крепостнойҙары булған Дмитрий Готовтың иркен йәшәгән тормошонда уның өсөн хеҙмәт етәрлек. Байрам-туйҙары ла, ҡунаҡтары, балдары, киске аштары өҙләкһеҙ, уларҙан тыш, дүрт ҡатлы замокты тотошлайы менән ҡарап, йыуып-йылытып, йәшәүселәрен ашатып тороу ҙа уның яуаплылығында. Әлбиттә, хеҙмәтселәр ҙә етәрлек. Әммә һәр береһенә күҙ-ҡолаҡ булырға, һәр береһенә кәрәк булғанды алып килеп тоттороорға, табырға, булдырырға ла кәрәк. Унан бөтөн был сығымдарҙы управляющийға яҙып бирергә, унан алынған аҡсаларҙы дөрөҫ итеп бүлеп урынлаштырыға һәм башҡалар. Ҡара таңдан төн уртаһынаса йөрөтә торған мәшәҡәттәренә әүрәп... нисә йылдар үтеп киткән.

* * *

Ҡалала Христостың тыуған көнөн билдәләү һаман дауам итте. Урамдарҙа каруселдәр, боҙ шыуыуҙар, күңелле йәрминкәләр, төрлө кәмиттәр барҙы. Йорттағы мәшәҡәттәр тамамланғас, Анна Дмитриевна Екатеринаны йылдағыса ошо тамашаларҙы ҡарап йөрөп килеүгә саҡырҙы. Барыняның күңел һалған кешеһе килә тиҙҙән, шуға берәй иҫтәлекле генә әйбер ҙә ҡарамаҡсы һәм, әлбиттә, былдай эште бер үҙе генә башҡара алмай.

Ҡатындар йылы кейенеп, шау-шыулы ҡала урамдары буйлап китте. Юл ыңғайы әле был, әле теге лавкаға һуғылдылар, ҡайҙа теләй шунда тәртипһеҙ булып теҙелгән баҙар рәттәре буйлап үттеләр. Ир кеше өсөн бүләк эҙләгәнлектән, күберәк ир-егет, хәрбиҙәр тупланған урындарға барырға тура килде. Һәм, әлбиттә, ҡатындарға көслө зат битараф ҡалманы. Ундабында комплимент әйттеләр, хөрмәт менән баш эйҙеләр, ҡул һоноп алдан үткәрҙеләр, байрам менән тәбрикләнеләр. Хужабикәһе янында таш сырай менән йөрөгән Екатерина, ҡулдарын түшендәге урауына йәшергән дә, бөтөн был иғтибарға битараф булып килә.

- Ул ҡәҙәрем етди булырға ярамай ҙа инде, Катенька. Тышта байрам, беҙҙең Христос тыуған, - тип йәһәт кенә суҡынып ала Анна Дмитриевна, Екатерина уны ҡабатлай. - Был ирҙәр беҙҙе ашамаясаҡ. Беҙ һинең менән күңел асырға сыҡтыҡ. Шулай булғас, саҡ ҡына йылмайырға, шатланырға кәрәк. Беҙ бит һинең менән йәшәүҙе һайланыҡ. Йәшәгәс, донъяны ла яратып, һоҡланып йәшәй беләйек.

Барыняһының уны ҡултыҡлап алып, шулай шыбырлап өгөтләгәнен тыңлап, көлөмһөрәп килә торғас, ҡаршы яҡ баҙар рәтендә ярайһы ҡысҡырып, татарсамымишәрсәме һөйләшкән ир-ат тауышына башын борҙо ла, уларға ҡарап, үҙ-ара мәрәкәләшкән төркөм араһынан берәүҙең күҙҙәре менән осрашты Екатерина. Йәшен атҡандай, аяҡ аҫтында ер һелкенгәндәй булдымы... әллә бары яңылыш баҫып тайып китте? Ярай әле, хужабикәһе тотоп ҡалды. Теге иргә тағы ҡараны. Унығы ла ҡатып ҡалған көйө тексәйеп тик торҙо. Бәхеткә ҡаршы, Анна Дмитриевна, пырхылдап көлә-көлә, тартҡылап алып китте. Тик Екатеринала көлкө ҡайғыһы булманы, уның хәле бөттө, аяҡ быуындары ҡалтыраны. Ҡоламаҫ өсөн ике ҡуллап барыняһының беләгенә йәбеште. Уның хәлен ниһайәт аңғарып ҡалған Анна Дмитриевна хафаланды:




- Нимә булды, Катенька? Ҡәҙерлем, Катя? - унан үтеп барған экипажға ҡул болғаны. - Бында! Бында килегеҙ!

Ҡатындар каретаға инеп урынлашты ла, нәҙек тояҡлы йылғыр ат уларҙы елдертеп алып та китте.

- Нимә? Нимә булып китте, ҡәҙерлем? - тип һаман ныҡышты Анна Дмитриевна.

- Белмәйем... - Екатерина күҙҙәрен йомған килеш башын ултырғыс артына терәп тик ултыра.

- Анау ирҙең күҙе яман булдымы әллә? Шуға ҡараның да ҡаттың.

- Ул ир... Ул ир... Ҡа... Ҡа-зы-хан, - тип көскә телен әйләндерҙе.

- Ка... Казыхан? - тип башта аптыраны ла барыня, унан ҡапыл ҡысҡырып ебәрҙе. -Һинең ирең?

"Ирең" тигәндән ҡото осҡандай эйелеп устары менән йөҙөн ҡапланы Екатерина. Әллә иланы, әллә иңрәне.

- Улмы? Яңылышманыңмы, Катенька? Ысынлап ул булдымы икән? Бәлки, оҡшаған ғыналыр, нисә йылдар үткән бит, ә, Катя? - Анна уның ҡулдарын битенән айырып алып йөҙөнә ҡарарға маташты. Ахырҙа, Екатерина ла яҙылды, башын күтәрҙе, иламаған икән - күҙҙәре ҡоро. Ҡатын әхирәтенә туп-тура ҡарап өҙә әйтте:

- Ул. Ундай ҡараш башҡа бер кемдә лә юҡ. Бары... ҡартайған ғына.

* * *

-Ҡазы-ха-ан... Ҡа-зы...хан... - тип ыңғырашты Екатерина, унан тағы ла Анна белмәгән ят исемдәрҙе саҡырҙы: - Буран-сы-ы... Ай-йы-ым... Бу-ра-анн...

Унан тағы иҫен юйғандай ятты, унан тағы ыңғырашып-һаташып буталды, берсә инәлде, берсә иланы. Шулай ике тәүлек түшәктә тулап-аунаны ла, өсөнсө төндө ауҙарып, иртәнсәккә генә тынысланып йоҡлап китте. Саҡырылған табипты түләп оҙатҡас, әхирәте янына ҡабаттан инеп, ауырыуҙан йонсоған йөҙөнә текәлеп ултырҙы Анна. Яулығы сисеп ташланғандан асыҡ битенең бер яғындағы, муйынындағы, төнгө күлдәге аҫтынан күренә биреп торған һыңар яурынындағы янған эҙҙәрҙән күҙ ҡарашы менән генә үтте. Был суғырмаҡтарҙың аҫтараҡ та барлығын, кәүҙәнең тотош бер яғы буйлап үткәнен дә, ут юлының ҡасандан һәм ҡайҙан икәнлеген дә белә Анна. Һәм әлеге тәгәрәп йөрөп һаташҡандарында әхирәтенең шул ғазаптарҙы яңынан кисерә икәнлеген дә белә...

* * *

Йүрүҙән ярында кер сайҡаған ҡатындар ауыл яғынан "сар-сор" тауыштар ишетеп һағайып тороп баҫты.

- Ауылдамы ул?

- Хоҙайым! Нимәләр тотәй?

- Ауыл... яна... - Шәмсиҡәмәр ҡулындағы керен ағым алып киткәнен дә аңғармай, ауыҙын асып төтөн сыҡҡан яҡҡа ҡарап ҡатты.

- Бисәләр! Кәрәте-ел! - аранан берәүҙең иҫенә килеп шулай ҡысҡырып ебәреүе булды, ҡаҙ тубы кеүек булып өйкөлөшөп кер йыуған ҡатын-ҡыҙ бар нәмәләрен ташлап, ауылға ҡарай йүгерҙе.

Шәмсиҡәмәр арт яҡтан, карателдәр алғы яҡтан бер мәлдә генә килеп инделәр ихатаға. Һалдаттарҙың мылтыҡтарын алға һуҙып атлауын нисек тә туҡтатырға тип ҡулдарын ике яҡҡа яҙып ҡаршы атлағанан ҡайныһын килә-килеп бер нисә һалдат бер юлы штыкка алды. Шәмсиҡәмәр һарай мөйөшөнә йәшенде. Ҡартының артынан ейәнсәрен күтәреп сығып килгән ҡәйнәһе был хәлде күреп ҡысҡырып ебәрҙе лә, шундуҡ кире боролоп, итәгенә тағылған ейәнен беләгенән эләктереп елтерәтеп өйгә индереп алып китеп, ишеккә бик һалып өлгөрҙө. Уның артынан атылған һалдаттар ауыр тыранса ишекте мылтыҡ төйҙәһе менән туҡманы-туҡманы ла, аса алмағас, һалам өйөп, ут төртөп тә ебәрҙе. Кипкән ҡарағас өй "гөлт" итеп тоҡанды. Шәмсиҡәмәр йәшенгән еренән атылып сығып утҡа ташланды, янып торған ишекте бәреп асырға булып яурыны менән һуғылды, бында көсө етмәгәс, тәҙрәгә йүгерҙе, тик унда яҡын барырлыҡ түгел, ялҡын бөркә. Ҡабат ишеккә йәбеште, ҡулдарының, сәсенең, кейеменең өтөлөп, тоҡанып китеүен дә аңғарманы. Үҙәге өҙөлөп ҡысҡырҙы ла ҡысҡырҙы:

- Бурансы-ы-ы! Айы-ым! Балаҡайҙарыым...

Уның был сарбайлауын көлөп ҡарап торған һалдаттар тамам ялҡыпмы, икенсе ергә юлланырға кәрәк булыпмы, һаман янып бөтмәгән ишекте ҡутарып маташҡан ҡатындың елкәһенә берәүһе мылтыҡ төйҙәһе менән һуғып ҡолатты ла, китеп барҙылар. Иҫен юйып ауған Шәмсиҡәмәр ауыл өҫтөндәге кискәсә торған "аһ"ты ишетмәне лә, ҡатын-ҡыҙ һәм бала-сағаға ҡарата ҡылынған вәхшилекте күрмәне лә.

Уны ямғыр тамсылары иҫенә килтерҙе. Шул ямғыр үлемдән алып ҡалғандыр ҙа, бәлки. Эре тамсылар менән ҡойоп яуған ямғыр кәбән һымаҡ булып ятҡан өй ҡалдыҡтарының торонбаштарын пышылдатып һүндерҙе. Шәмсиҡәмәргә аңы ҡайтҡандан ҡайтты, ҡайһы ерелер йөрәгенә үтеп һыҙланы, ҡулымы-аяғымы тыңламай, торорға бирмәй ҡыртлашты. Ҡайһы ерен ҡыбырлата ала, шул яғы менән тырмашты ҡатын - бер яғында шыуышып китте. Һыу эсендәге торомбаштар араһында йөрөп, иҫән ҡулы менән тырнап-ҡайырып балаларын эҙләне:

- Бур-р-рансы-ы! Улы-ым! Ба-ал...

- Еңгәм! Ҡәмәр еңгәм!

Кемдер уның өҫтөнә килеп ябырылды, яурынынан тотоп әйләндереп һалды. Был илап шешенеп бөткән Еҙбикә ине. Ул еңгәһенең өҫ-башын күреп, ауыҙын баҫып тағы ла буҙлабыраҡ үкһергә кереште.

- Еҙ-ҙбикә, бар, ҡар-ра-ле... Бала-ларҙы ҡара-ле... - Шәмсиҡәмәр өшөүҙәнме, яныуҙанмы ҡалтырана, тештәре тешкә теймәй шаҡылдай.

- Улар юҡ, еңгәм... Әсәй ҙә, Бурансы ла... бәләкәс тә... - Еҙбикәнең илауҙан үҙәге сиҡылдаған. - Атай ҙа, ана, урамда ята...

**(Дауамы. Башы 52, 1-3-сө һандарҙа).**

*✓ - Йырҙағы әбей менән бабайҙай, ҡыҙҙарыбыҙҙы үзбәккә, грузингә, хахулдарға таратып бөтөп, "ҡарсығым да үҙ янымда, пенсиям да етерлек", тип бер-береБеҙгә ҡарашып, иркен өйҙә һемәйеп ултырып ҡалмайыҡ кәбе!..*

ӘЙҘӘГЕҘ, ФЕКЕРЛӘШӘЙЕК!

# ЙӘШТӘРЕБЕҘ СИТКӘ КИТМӘҺЕН,

## ситтәрҙе йәр итмәһен

**Әллә нисә тиҫтә йылдар элек сыҡҡан йыр китабындағы шиғырҙарҙы ҡыҙыҡһынып уҡый торған ғәҙәтем бар. Мәғәнәләренә ҡарап, уларҙың ҡайһы дәүерҙә яҙылған икәнен дә асыҡлауы ауыр түгел. Ниндәйҙер композитор тарафынан был шиғырҙарҙың һәр береһенә, әлбиттә, көй ҙә яҙылған, һәм ҡасандыр улар популяр йыр булып та яңғырағандыр. Әле уҡыусылар иғтибарына шуларҙың бер-икеһе хаҡында үҙемдең фекерләүҙәремде тәҡдим итмәксемен.**

Һәр кемгә лә аңлайышлы булһын өсөн башта совет осороноң бер үҙенсәлекле ягын сағылдырған ана шул шиғырҙарҙың береһен тулыһынса ғына килтерергә булдым. "Бәхетле ғүмер, намыҫлы хеҙмәт тураһында"ғы бүлектән ошо йыр һүҙҙәрен уҡып сыҡҡас, бер кем дә уға битараф ҡалмаҫ, тигән инанысҙамын. "Йәшәһен кейәүҙәрем" тип атала ул.

*Биш бөртөк ҡыҙ үҫтерҙек беҙ:*
*Береһенән-береһе сибәр!*
*Һәр береһе ҡашыҡҡа ғына*
*Һалып йоторлоҡ, тиҙәр!*
*Күренмәнеләр ҙә кеүек*
*Ҡыҙҙарым күҙҙәремә.*
*Бишеһен биш егет димләп,*
*Йәр итте үҙҙәренә.*
*Бер кейәүем - Фирғәнәлә,*
*- Кил, күреп китерһең, - ти, -*
*Йөҙөмлө былауыбыҙҙан*
*Бер ауыҙ итерһең ти.*
*Бер кейәүем - Кустанайҙа,*
*- Кил, ҡымыҙ ҡуйырбыҙ, - ти, -*
*Ҡаҙан аҫып, бишбармаҡҡа*
*Бер һарыҡ һуйырбыҙ, - ти.*
*Бер кейәүем Тбилисиҙә,*
*- Кил, сәй бешертербеҙ, - ти, -*
*Сәй ҡыҙыулығы етмәһә,*
*Мәйҙәр эсертербеҙ, - ти.*
*Бер кейәүем - Полтавала,*
*- Кил, күңел асырһың, - ти, -*
*Танһыҡҡа һин ап-аҡ ондан*
*Галушка ашарһың, - ти.*
*Бер кейәүем - Миңзәләлә,*
*- Кил, һөтлә һыйырбыҙ, - ти, -*
*Бәлеш тә, билмән, бәрәмәс*
*Булыр гел һыйыбыҙ, - ти.*
*Ҡыҙҙарым булһа - бер тигән,*
*Кейәүҙәр - иҫ китерлек!*
*Ҡарсығым да үҙ янымда,*
*Пенсиям да етерлек!*
*Йәшәһен былау, билмәндәр!*
*Сәйҙәр, мәйҙәр, ҡымыҙҙар!*
*Йәшәһен минең кейәүҙәр!*
*Йәшәһен минең ҡыҙҙар!*

Кейәүҙәр хаҡындағы бына шундай йырҙарҙы ул ваҡыттарҙа (бала саҡта) мәҙәк кенә итеп ҡабул иткән булһам, хәҙер, ҡәҙерле милләттәштәрем, улар мине ифрат тәрән уйҙарға һалмаҡсы. Түбәндә яҙыласаҡ һүҙҙәр менән шиғыр авторын тәңкиткә тота был, тип уйлай күрмәгеҙ, берүк. Хатта, киреһенсә, шағир шул замандың ысынбарлығын ифрат та асыҡ итеп сағылдырған бит. Эйе, халыҡтар дуҫлығына дан йырланған осор шиғыры был. "Совет кешеһе" тип аталған дөйөм бер милләт тәҙәүгә табан барған был дәүерҙең шаһиты бер мин генә түгелмен.



Донъя халыҡтары, әлбиттә, бер-береһе менән татыулыҡта йәшәргә тейеш, милләт-ара дуҫлыҡ, һис һүҙһеҙ, гәйәт яҡшы нәмә. Әммә...

Һәр нәмәлә сама белеү кәрәклеген бер кем дә инҡар итмәҫ, моғайын. Ошо шиғырҙы уҡып-уҡып ҡарайым да (тураһын ғына әйтәйем), үҙебеҙҙең гүзәлдәрҙән-гүзәл, нәфистәрҙән-нәфис башҡорт ҡыҙҙарын ҡыҙғана башлайым. Беҙҙең яҡта шундайыраҡ берәй нәмә әйтеп һалһаң, әңгәмәсең гәҙәттә: "Аһ-аһ, шулай булмай ни!.." - тип һинең һүҙҙәреңде күтәреп кенә алып китә. "Ҡашыҡҡа ғына һалып йоторлоҡ гүзәлдәребеҙ әле лә булһа сит ерҙәрҙәге "иҫ китерлек" кейәүҙәргә ҡыҙығып сығып китмәлгән түгелмә, - тип өстәп тә ебәреүселәр табылыуына шигем юҡ. - Йырҙағы әбей менән бабайҙай, ҡыҙҙарыбыҙҙы үзбәккә, грузингә, хахулдарға таратып бөтөп, "ҡарсығым да үҙ янымда, пенсиям да етерлек", тип бер-беребеҙгә ҡарашып, иркен өйҙә һемәйеп ултырып ҡалмайыҡ кәбе!.." Эйе, йыр - тик СССР дәүеренең сағылышы ғына. Аныҡ бер ғаилә хаҡында ла һүҙ бармай. Шуға ла ҡарамаҫтан, ошо йырҙы иҫләһәм, ундағы биш һылыуҙың береһен генә булһа ла Башҡортостаныбыҙға, берәй милләттәшебеҙгә килен итеп алып ҡалдырғы килә башлай... Ҡыҙҙарыбыҙ йәлке, йәмәғәт!

Ҡасандыр сәхнәнән төшмәгән, тамашасыларҙың күңелен асыусы "Яраттым мин рус егетен" тигән шаян йырҙы ла алып ҡарайыҡ. Ундағы "...Үҙем - башҡорт, рус егетен яраттым ғүмерлеккә..." йә иһә "Ах, моя, курносая", тип иркәләп ҡалыуҙары!.." тигән һымағыраҡ юлдарҙан торған куплеттар үҙебеҙҙең күп кенә егеттәребеҙҙең сәменә теймәйме икән?..

Тәрәнерәк уйлап ҡараһаҡ, ысынлап та шулай бит! Үткән быуат дәүерендә күпме гүзәлдәребеҙ "былау, билмәндәр, сәйҙәр, мәйҙәр, галушкалар"ға ҡыҙығып, сит яҡтарға китеп, бөтөнләйгә башҡаларҙы бәхетле иткән... Ошо хаҡта фекерләй башлаһам, көнсөлләктән, кемдер әйтмешләй, "эсем һыҙларға" тотона. Мин үҙем көнсөл кеше түгелмен. Халыҡтар дуҫлығы ла яҡлымын, әлбиттә! Әммә, әлеге сәйҙәр, былау менән һыйларға яратыусы "генацвали" һәм башҡа иптәштәрҙе кейәү сифатында түгел, ә "тәүәрищ" йә "бизнакум" итеп кенә күреү яғындамын. "Бындай бәхетте", ысынлап та, боронғо атай-олатайҙарыбыҙ төштәрендә лә күрмәгән! Алтындай ҡыҙҙарын тәләфләп, сит яҡтарға, "тудасюда" тараҡлап, исраф итмәгән бит улар. Хатта күрше йәшәгән ҡаҙаҡтар менән һирәк-һаяҡ ҡоҙа булышҡан хәлдә лә, ифрат һаҡ ҡыланған ҡартатайҙарыбыҙ. Гүзәлдәребеҙҙе ҡайсаҡ урлап алып киткеләгән ана шул "ут күршеләрҙең" үҙҙәренең ҡыҙҙарын килен итеп алып ҡайтыу яғын ҡайырғандар. Килен булып килгән ҡаҙаҡ ҡыҙҙары, әлбиттә, башҡорт бәпәйҙәре тапҡан.... "Барымта", "ҡарымта" тигән йолалар ҙа булған бит. Ғилмиязаларыбыҙ сығарған йырҙар ҙа "шатлыҡлы хистәр" менән тулмаған. Ә инде әлеге Полтава, Тбилиси һымаҡ алыҫ ерҙәр, башҡа диндә булған халыҡ һәм уларҙың сәймәйе хаҡында хатта һүҙ ҙә булмаған.

Сәй, ҡымыҙ, билмән тигәндәй, үҙебеҙҙә лә ундай байлыҡ аҙ түгел, тип һанайым. Ә кейәүҙәргә килгәндә... Аҡыллы, типһә - тимер өҙәрлек, "ер һелкетеп" донъя көтәрлөк, бала-сағаһының яратҡан атаһы булырлыҡ, кәрәк сағында иленең именлеген һаҡларлыҡ баһадир егеттәребеҙ ҙә етерлек! Бына шундай ир-аттарыбыҙҙы башлы-күҙле итеп, йәғни, бынамын тигән ҡыҙҙарыбыҙҙы уларға кәләш итеп алып биреп, үҙ илебеҙҙә тоторға ине лә бит. Ауылдарға эшкә килеүсе табип, уҡытыусыларҙы ғына түгел, ә ауылдың төп кешеләре булған йәштәрҙе лә стимуллаусы берәй ысул уйлап сығарғанда, кемдер әйтмешләй, "калай һәйбәт булыр ине". Хәҙер йорт төҙөү менән булышыусылар күп. Ана шуларҙы төҙәлөш материалдары менән тәьмин итеүсе (әйтәйек, ағас бысыусы) предприятиелар асып, шулай уҡ мал үрсетеү өсөн фермалар төҙөп, шул эштәрҙе башлап ебәреүгә бушлай "начальный капитал" биреүҙе хөкүмәтебеҙ үҙ өҫтөнә алһа, күп кенә йәштәребеҙ әллә ҡайҙа Себер сығып та китмәҫ ине, моғайын. Хәмер менән булышмаған эшһөйәр егеттәребеҙ һәр бер ауылда ла бар. Уларға башҡалар ҙа эйәрер ине, шәйт. Ҡыҙҙарыбыҙға кейәү, буласаҡ быуынға атай булырлыҡ егеттәребеҙҙең дәрәжәһен төшөрмәй, кәрәк саҡта уларҙы лайыҡлы "хуплап", ярҙам итеп торғанда, үҙебеҙҙең хәләл былауҙарыбыҙ, билмәндәребеҙ, икмәгебеҙ, ҡымыҙыбыҙҙы ла күпләп етештерер инек. Бына шундай егеттәребеҙгә терәк булырҙай унған ҡыҙҙарыбыҙ ҙа күп, Аллаға шөкөр. Элегерәк "ах, мой милый, мой хороший", тип йырларға яратҡан бәгзе бер гүзәлдәрҙең "башҡорт ирҙәре ҡырыҫыраҡ, наҙға һаран", тиеүҙәренә лә артыҡ иғтибар итмәҫкә саҡырам. Ул ғына ла түгел, иртән үбеп уятмауҙарына, эшкә киткәндә "әп" итмәй сығып китеүҙәренә (дөрөҫөрәге, ялған тамаша күрһәтмәүҙәренә) лә ҡарамаҫтан, беҙҙекеләр һымаҡ эшкә "беше", сыҙамлы һәм, тыштан күренмәһә лә, урыҫтар әйтмешләй, "добрый внутри" булған егеттәрҙе башҡа ерҙә ҡапыл да таба һалып булмайҙыр, тигән инаныуҙамын. Өҫтәүенә, беҙҙекеләр әллә ни артыҡ тәм-том, "кәтлит-мәтлит" тә талап итеп ултырмауҙары менән айырыла. Бындай ир-аттарыбыҙға гүзәл заттарыбыҙ хатта йәбешеп кенә ятырға тейештәр. Егеттәребеҙҙе бәгзе ваҡыт хазинаға тиңләйем мин (хазина - күренеп ятмаған, йәғни йәшерелгән ҡиммәтле әйбер, урыҫ теленә "клад" тип тә яңғырай ул). Ҡулығыҙҙағы ана шул хазинаны елгә осороп ебәрмәгеҙ, ҡәҙерле ҡыҙҙар!

Берәй затлы әйберҙең үҙендә булғанын да ҡайсаҡ һиҙмәйһең, ә ситтәр уны күрә һалып бара. Тап шуның кеүек, беҙҙең аҫыл, батыр егеттәребеҙҙе абруйлы урыҫ полководецтарының береһе бынан ике быуаттан ашыу элек "Молодцы, любезные!" тип маҡтағаны хаҡында ла беләбеҙ. 1814 йылда Париж урамы буйлап үткән еңеүселәр парадын башлап барыусы итеп башҡорт полктарын иң алғы сафҡа ҡуйғандары ла, бәлки, күптәргә мәғлүм түгелдер... Оҙайлы хеҙмәт итеүем осоронда шәхсән үҙем күҙәткән тағы бер нәмәне миҫал итеп килтереп китмәк булам: егеттәребеҙҙе әрмеләге командирҙар ҙа белә һәм уларға юғары баһа бирәләр ине. Часҡа йәш пополнение килеү менән башҡорт егеттәрен "кемуҙарҙан" тиерлек таратып ала торғайнылар. "С вашими ребятами проблем не бывает", тип әйткәндәрен хәтерләйем. Әммә йәл, хеҙмәтен бөтөрөп, илгә ҡайтҡан егеттәребеҙ, айырыуса эшһөйәрҙәре, күп тә тормай, ситкә китә шул. Атайым мәрхүмдең бер йыры ҡолағымда әле лә булһа сыңлай:

*Ырымбурҙа кибеттәр,*
*һатыу итә егеттәр.*
*Илен ташлап ситкә китә*
*арыҫландай егеттәр…*

"Нәдкә", "Мәрүскә"ләр табып (алып ҡайтһалар - бер хәл), улары янында оҙайлы ваҡытҡа ҡырҙа ҡалғандары күп шул. Бөтөнләйгә киткәндәрҙе лә беләм... Сит илдәрҙә, яу ҡырында ятып ҡалған ир-егеттәр хаҡында ла һүҙ бармай бөгөн, ә күрәләтә, тыныс шарттарҙа үҙ теләге менән китәләр бит!..

Барыһы ла китә, тип әйтеү ғәҙел булмаҫ, әлбиттә. Илебеҙҙә төпләнеп, тормош ҡороп, ғаилә төҙөп, бынамын тигән балалар үҫтереп, һәр төрлө эш менән көсеп итеп донъя көткән, күптәргә үрнәк булырлыҡ йәштәребеҙ ҙә бар, әлхәмдулиллаһ. Айырыуса ауыл ерендә йәшәгән ана шундай уңған ир-егеттәр һәм ҡатынҡыҙҙарыбыҙҙы тейешенсә баһалай белһәк, беҙҙән дә аҡыллыраҡ кеше булмаҫ...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

✓ *Бала саҡта һыуыҡ тейҙереп ауырып ятҡанда, әсәй һары май менән майлап-һылап, төрөндөрөп, мейес йылыһына һалғанын, шул май, мейес ташы йылыһына иҙрәп кенә йоҡлап китеп, һауығып уянғанымды һағынып иҫләп алдым.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠУЛ ЙЫУА БЕЛӘҺЕҢМЕ?

■ Нервы күҙәнәктәре кире тергеҙелмәй, тип әйткәндәрен ишеткәнегеҙ барҙыр, моғайын. Әммә был ысынлап та шулаймы һуң? Билдәле булыуынса, нервы күҙәнәге ике төркөм күҙәнәктәрҙән: нейрондар һәм нейроглия күҙәнәктәренән тора. Беренселәре нервылар туҡымаһын төп функциялар менән тәьмин итһә, икенселәре улар өсөн ыңғай шарттар тыуҙыра. Нейроглия нейрондарҙы һаҡлау һәм туҡландырыу эшен дә башҡара. Улар яҡшы бүленә лә, сөнки әллә ни ауыр функция башҡармай. Әммә нейронға әүерелгән күҙәнәк бүленеү һәләтен юғалта. Шуға ла халыҡ араһында ошондай фекер таралған да инде. Улай булғас, яңы нейрондар ҡайҙан барлыҡҡа килә? Мейелә нейрондар гиппокамп йыйырсығында урынлашҡан һаҡлағыстан тулылана. Күҙәнәктәр унан яйлап сыға, олоғая. Был процесс ғүмер буйына дауам итә. Әгәр ҙә йәрәхәт һөҙөмтәһендә нейрондарҙың күп өлөшө зарарлана икән, уларҙы нейроглия алыштыра.

■ АҠШ-тың Кеше геномы милли тикшеренеү институты ғалимдары кеше тәненең ҡайһы өлөшөндә бактериялар күберәк икәнлеген асыҡлаған. Тикшереүҙә үҙ ирке менән ҡатнашыусылар бер аҙна буйы бер төрлө генә һабын менән йыуынған. Һуңынан улар бер тәүлек буйы бөтөнләй йыуынмаған һәм ғалимдар уларҙың тәненең төрлө өлөшөнән яғынты алған. Асыҡланыуынса, кеше тәнендә, ашҡаҙан-эсәк трактындағы кеүек, 1 мең самаһы төрлө бактерия йәшәй. Бактериялар беләктә күберәк (44 төрлө) табылған, ғалимдар фекеренсә, ҡулдарҙы тейешле итеп йыумау беләктәрҙең дә бысраныуына килтерә һәм унда төрлө бактериялар йыйыла.

■ Британия ғалимдары электрон почта стресс факторы булып тора, тип хәбәр итә. Социологик тикшеренеүҙәр ваҡытында яуап биреүселәрҙең 57 проценты электрон почта йәшниген асҡан һайын стресс кисереүҙәрен белдергән. Бынан тыш, респонденттарҙың 40 проценты килгән хаттарға ваҡытында яуап бирмәһә, ҙур борсолоу кисерә, ә 30 процентына хаттар шул тиклем күп килә һәм улар бөтөнләй яуап биреп өлгөрмәй. Уртаса статистик британлының ике почта йәшниге бар һәм ул уны көнөнә ике-өс тапҡыр асып ҡарарға мәжбүр, ти ғалимдар.

■ Ҙур сауҙа үҙәктәрендәге балалар бүлмәләре сепсис, менингит, үпкәләр шешеүе кеүек хәүефле сирҙәр сығанағы булыуы ихтимал. Сөнки бындағы пластик шарҙарҙы һирәк йыуалар. Төньяҡ Джорджия университетында үткәрелгән анализ күрһәтеүенсә, мәҫәлән, шарлы бассейнда төрлө бысраҡ, бәүел, ҡоҫҡолоҡ эҙҙәре табылған. Бер нисә аҙнанан һуң был бактериялар нығынып, бер урынға тупланасаҡ. Тап ошо мәлдә балаға инфекция күсә ала ла инде. Бигерәк баланың тиреһендә яра булһа, иммунитеты түбәнәйгән мәлдә хәүеф арта. Ғалимдарҙың тикшеренеү һөҙөмтәһендә шулар асыҡланған: пластик уйынсыҡтарҙа 31 төрлө, шул иҫәптән йоғошло 8 бактерия була ала. Шуға ла сауҙа үҙәктәрендә балағыҙҙы бындай хәүефле бүлмәләрҙә ҡалдырырға, йәки махсус рәүештә уларҙы унда уйнарға алып барырға тырышмағыҙ.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Дарыуханалар тулы дарыу, дауаханалар тулы юғары белемле белгес-табиптар, заманса йыһаз-ҡорамалдар һәм башҡа кәрәк-яраҡтар булһа ла, тормошобоҙ әллә күпмегә алға китһә лә, халыҡ аҡылы, педагогикаһы, дауалау саралары әлеге көндә лә үҙ әһәмиәтен юғалтмай, кеше барыбер ҙә боронғо дауалау ысулына әйләнеп ҡайта, әленән-әле халыҡ медицинаһына мөрәжәғәт итә. Хәтерегеҙҙә булһа, былтыр дарыу үләндәренән шифалы сәйҙәр әҙерләүсе Аҫылбикә Мәжитова тураһында яҙғайныҡ. Ул күптән башҡорт халҡының боронғо дауалау ысулдары, халыҡ медицинаһы менән ҡыҙыҡһына, ошо тәңгәлдә белемен камиллаштыра, тәжрибә туплай. Ошо теманы үҫтереп, Аҫылбикә Абдулла ҡыҙы менән беҙ башҡорт халҡының боронғоса дауалау, имләү саралары тураһында һөйләштек. Әйткәндәй, ул оҙаҡ йылдар һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә эшләгән шәфҡәт туташы.**

# ИМСЕЛӘРҘЕҢ ДӘ...

## име килешә

- Тәү сиратта мин халыҡ медицинаһының үҙәге, нигеҙе булып торған күренеш - **башҡорт ҡатындарының элек нисек, ни рәүешле бала табыуҙары** тураһында бәйән итер инем, - тип башлап китте **Аҫылбикә апай.** - Боронғо йорттарҙа, иғтибар иткәнегеҙ барҙыр, урындыҡ тапҡырында түбәгә беркетелгән урҙа була торғайны. Бына шул ҡоролма, баҡтиһәң, башҡорттарҙа бала табыу өсөн ҡулланылған икән. Был хаҡта миңә дауаханала ятҡанда бер урыҫ әбейе һөйләгәйне: "Башҡорттар баланы оҫта таптырҙы, - тигәйне ул.- Бик ыҙалағанда беҙ уларҙың кендек әбейҙәренән ярҙам һораныҡ. Уларҙың урындыҡ өҫтөндә түбәгә ҡағылған урҙаһы була торғайны, шул урҙаға оҙон таҫтамал бәйләп, икенсе осон бала тапҡан ҡатындың беләктәренә урайҙар. Ҡатындар шулай ярым ултырған һымаҡ эленеп тороп бала таба. Тулғаҡ асылғанда әбейҙәр ҡатындың сәс толомоноң осо менән тамаҡ төбөн ҡытыҡлай", - тип һөйләгәйне ул урыҫ әбейе. Ысынлап та, эленеп торғанда ерҙең тартыу көсө ҡануны буйынса бөтә көс баланың донъяға килеү урынына йүнәлтелә. Был рәүешле тапҡанда баланың ҡан тамырҙары, аортаһы ҡыҫылмай, башына һәм атлант һөйәгенә баҫым да әҙерәк була. Ә бына тамаҡты сәс менән ҡытыҡлап уҡшытыу - көсәнеүҙе бала тыуыу урынына йүнәлтә.

Әйткәндәй, күп халыҡтарҙа ҡатындар баланы баҫып йә ултырып тапҡан. Африкала, мәҫәлән, урманға сығып китеп, арҡыры ботаҡҡа тотоноп, һинд ҡатындары - лианаға эленеп тороп табыр булған балаһын. Һөңгөгә тотоноп йә ирҙәренең яурынына һалынып, вертикаль торошта ла тапҡандар ҡайһы бер халыҡтарҙа. Ошолай вертикаль рәүештә бала табыу хәҙер байтаҡ урындарҙа яңынан тергеҙелә башлаған, Өфөлә лә, Ырымбурҙа ла бар.

Һәм тағы ла бер ҡыҙыҡлы мәғлүмәт еткергем килә: Рәсәйҙә тәүге бала табыу йорто 1750 йылдарҙа барлыҡҡа килгән. Тик ул яман даны сыҡҡан аҙғын ҡатындар өсөн тәғәйенләнгән булған (теләһә ҡайҙа бала табып, ташлап китеү осраҡтарын кәметеү өсөн). Шуға ла егерменсе быуатҡа ҡәҙәр бала табыу йортонда бушаныу ғәрлек һаналған...

Беҙҙең быуын, йәғни өләсәй-ҡартәсәй тәрбиәһендә үҫкән урта йәштәрҙәгеләр, боронғо дауалау үҙенсәлектәре менән яҡшы таныш. Элек сирлене иң беренсе сиратта муллаға алып барып, өшкөртөп ҡарағандар. Доғалар ярҙамы менән шәбәйерлек булмаһа, имселәргә, халыҡ табиптарына ебәргәндәр. Ә хәҙер - үҙем белгән, ҡулланған дауалау-имләү саралары тураһында.

**Тоҙло май менән ыуыныу.** Күптән түгел бала саҡта һыуыҡ тейҙереп ауырып ятҡанда, әсәй мәрхүмә, баштан-аяҡ һары май менән майлап-һылап, төрөндөрөп, мейес йылыһына һалғанын, шул май, мейес ташы йылыһына иҙрәп кенә йоҡлап китеп, һауығып уянғанымды һағынып иҫләп алдым. Был юҡҡа түгелдер. Беҙ үҙебеҙ онотһаҡ та, тән күҙәнәктәре хәтерҙә ҡалдыра, нимәнән шифа алыу мөмкинлеген иҫкә төшөрә, иҫкәртәлер, тием. Майҙың да ниндәй майы бит әле - май майы! Гәрәбә шикелле һары янып торған майҙы тоҙлап, биҙрәгә тултырып, ҡәҙерен белеп, ҡышҡылыҡҡа ҡалдыра ине әсәйем. Тоҙлауҙың да хикмәте бар: ул ваҡытта май һыуытҡыс булмау сәбәпле тоҙланғандыр тип фаразлаһаҡ та, тоҙло май менән һыланыу, физика ҡанундары буйынса, тоҙ, шыйыҡса менән бәйләнешкә инеп, электролит-үткәргескә әйләнә. Тоҙ ярҙамында шифалы май тирегә еңеллек биреп тарала.

**Май майының шифаһы.** Баш ауыртыуын баҫыр өсөн май майын ҡурғашҡа һалып, йылымыс килеш баш түбәһенә һалалар ине. Һыуыҡ тейҙереп ауырығанда баҙарҡайға (ағас һауытты әсәйем шулай ти торғайны) ҡайнар һыу ҡойоп, бер ағас ҡалаҡ һары май, ике ҡалаҡ самаһы ҡорот, тоҙ, ҡара борос һалып, болғай-болғай (һауытты ауыҙ тирәләй тотоп) тирләгәнсе эсеп ебәрһәң, шифаның үҙе генә инде! Ингаляцияның бер төрө тиһәк тә була. Ә ҡоротто әсәй

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ВӘЗӘМ СӘКӘНЕ

**Хәйбулла районының Вәзәм ауылында быйыл да, инде дүртенсе тапҡыр, Артур Сурин исемендәге призға турнир үткәрергә уйлап, балаларҙың хоккей командаларын үҙҙәренә йыйҙылар. Буранлы көн булыуға ҡарамаҫтан, хужалар тәбиғәт көйһөҙлөктәрен алдан уҡ яйлап-көйләп ҡуйғайны, йәғни Аҡъяр менән Әбеш араһындағы юл ысынлап та ялтлап ята ине.**

Был яҡтарҙа ауыл йәштәре электән йылға туңыу менән боҙшыуғыс урындар яһап, сәкән һуғырға әүәҫ. Һыу буйында шаҡ-шоҡ шайба һуҡҡан тауыштар кис ҡараңғы төшкәнсе яңғырап тора. Балалар ғына түгел, йәше-ҡарты яр буйына килә, тамашасылар һәр уйынсыны белә, уйын ғәләмәт ҡыҙыу һәм күңелле бара. Вәзәмдә көйәрмәндәр етерлек: сәкәнселәрҙе һәр йортта маҡтап һөйләйҙәр, ирҙәр генә түгел, ҡатын-ҡыҙ ҙа тамаша ҡылырға ярата. Был дәртле ауылдың сымыры һәм сыҙам балалары әүәл-әүәлдән милли көрәш, тау спорты, саңғы, еңел атлетика буйынса район ярыштарында алдынғылыҡты бирмәй килә.

Вәзәм ауылының мәҙәниәт йорто янында махсус хоккей ҡумтаһы дүрт йыл элек төҙөлдө. Профнастил менән кәртәләнгән майҙансыҡты таҙартып, тигеҙләп тороусылар бар. Ҡыш етеү менән Айрат менән Мөхтәр Суриндар ҡат-ҡат һыу һибеп, бына тигән каток - боҙаҡлан яһай. Уларға Йыһангир Ҡыҙрасов атлы егет арымай-талмай һыу ташый. Хәҙер Вәзәмдәге боҙ майҙаны көнө буйы гөрләп тора. Приз эйәһенең улдары Салауат, Урал, Арыҫлан ауылдағы балалар хоккей командаһы өсөн махсус кейем - формалар, ҡапҡасы өсөн битлек һәм бейәләй, тубыҡ ҡапҡастары, хоккей уйыны таяҡтары - сәкән-клюшкалар һатып алып бүләк иткәйне. Уҙған йылдарҙа турнир февраль айында үтә торғайны, быйыл район спорт комитеты уны ғинуарҙағы ял дәүеренә тәғәйенләгән, шуға ла унда мәктәп балалары һәм юғары уҡыу йорто студенттары, шулай уҡ эшләп йөрөгән йәштәр ҙә командаларға тупланып, ярыштарҙа иркенләп ҡатнаша алды.

Артур Сурин исемендәге приз Хәйбулла районы йәш хоккейсыларына һәр йыл һайын күсмә кубок булараҡ бирелә. Был турнирҙы ойоштороуҙы биләмә башлығы Таһир Юнысов, тыуған яғында донъя көткән Айрат менән Ғаян Суриндар үҙ өҫтөнә алған, шулай уҡ Артур Суриндың өлкән йәштәге әсәһе Хәҙисә Сәйфулла ҡыҙы, Өфөлә йәшәгән улдары, килендәре һәм ағай-энеһе һәм яҡын туғандары ихлас ярҙам иткән. Турнир башланыр алдынан ярышҡа килгән балалар алдында Артур Суриндың ағаһы, Башҡортостан мәғарифы ветераны Фазылйән Сурин, шулай уҡ Таһир Юнысов сығыш яһаны. Улар Артур Сурин, уның Әбеш

✓ ***Бесән кәбәген ҙур һауытҡа һалып, ҡайнар һыу менән бешекләп, томалағас, тән бешмәслек булып йылымысланғанын самалағас, төшөп яталар йә ултыралар. Ул быуындар һыҙлағанда килешә.***



ҡыр сейәһенең йәм-йәшел генә япраҡлы ботағын һалып ҡайнатыр ине.

**Ҡаҙ майының шифаһы.** Ҡаҙ майын да баш ауыртҡанда ҡурғашҡа йылы килеш һалып, башҡа ҡаплай торғайнылар. Яңыраҡ интернетта ҡаҙҙың эс майының файҙаһы тураһындағы мәғлүмәтте уҡып, боронғоларҙың дауалау ысулдарының төплөлөгөнә хайран ҡалғайным.

**Тирегә төрөү.** Ябай киҙеү аҙып китеп, үпкәгә төшһә, оҙайлы сирҙән мандый алмағандарҙы яңы һуйылған малдың тиреһенә төрә торғайнылар. Сирлене яланғасландырып, арҡаһы менән һалып, тиренең эске йылы яғына төрәләр. Тире үпкә сирен һурып ала тиҙәр ине ололар. Тирегә яткандан һуң елдән һаҡланырға кәрәк икәнен дә иҫкәртәләр ине.

**Ер быуына ятыу.** Яҙ етеү менән атай менән әсәй ат егеп, Бүреле тауға талғыр йыуаһы йыйырға сығып китер ине. Киндер ашъяулыҡты өймәләм итеп йыуа алып ҡайталар, беҙгә генә түгел, күрше-тирәгә лә тараталар. Яҙғы йыуаны бер туйғансы ашау - тотош йылға етәрлек шифа була, тиерҙәр ине.

Атайым менән әсәйем бик йыш баҡсала (йылға буйында урынлашҡан алыҫ баҡсабыҙҙа) ер быуына ла ятып дауаланды. Атайым йәш саҡта туберкулез менән ауырыны, ер быуының файҙаһылыр - ологайғас, һауығып, иҫәптән төшөрҙөләр. Уны былай аҙерләйҙәр ине: елһеҙ йылы көндә кеше ятырлыҡ соҡор ҡаҙып, күп итеп ҡоро-һары ағалар. Ер ҡыҙғансы оҙаҡ ҡына ҡуҙландырып тотаһың. Янып бөтмәгән торонбаштарын алып ташлағас, яңы йыйылған йәшел үлән менән соҡорҙо тултыралар. Шифаһы күберәк булһын тип, үләндәрҙең төрлөһөн һалалар. Ҡарағай, ҡайын, имән, йүкә һәм башҡа ағастарҙың да ботаҡтарын һалып ебәрәләр. Шунда ятып, йылынып дауаланалар. Торғас, сайынып та тормай, йылы итеп кейенәләр. Унда ла ел тейеүҙән һаҡланырға кәрәк. Йөрәк тирәһен ныҡ ҡыҙҙырырға ярамай. Күпме ятырға икәнен хәленә ҡарап самалайһың, былай 25-45 минут ятыу етә. Эҫе мунса кеүегерәк була ул ер быуы.

**Ризыҡ шифаһы.** Элек кеше дарыу һатып алманы. Һәр хәлдә, өйөбөҙҙә дарыу һауыттарын күргәнемде хәтерләмәйем. Кеше ауырыуына артыҡ иғтибар итмәнеме, ауырыуы-сире тураһында һөйләмәне... "Мин әсәйемдең бағыулы ризығына ғына элэгеп йөрөйөм бит", - ти торғайны атай мәрхүм. Ысынлап та, әсәй ризыҡты бағыулы әҙерләне. Ҡул тирмәне менән ҡыҙыл эремсек, талҡан тартып, киптереп, өс литрлыҡ банкаларға һалып, теҙеп ултыртып ҡуйыр ине. Һике аҫтында - майланған ҡыр сейәләре, урҙала ҡатлы-ҡатлы еләк ҡағы элеүле торор ине. Үҙҙәре эшләгән ҡымыҙҙың шифаһын, йоҡлар алдынан йылы ҡатыҡ эсеү, эштә өйрә ҡатыҡлап эсеүҙең файҙаһын әйтеп тә тораһы түгел. Ятыр алдынан йылы ҡатыҡ эсеү һәйбәт йоҡлата икәнен дә шул саҡтан беләбеҙ.

**Мейе ҡағыу.** Әсәйем мейеһе һелкенгән кешенең мейеһен дә ҡаға торғайны. Башына уратып еп бәйләй ҙә, ҡором менән дүрт яҡтан билдәләп, епте сисеп ҡарай. Ауырыуҙың башын үҙенең күкрәгенә бер нисә тапҡыр ауыштырып, доғаһын уҡый. Мейе ҡаҡтырғас, мотлаҡ ятып йоҡларға кәрәк. Ҡот ҡойғанда ла, имләгәндә лә "минең ҡулым түгел, Ғәйшә-Фатима ҡулы" тип башлар ине.

**Кәбән төбөнә ятып дауаланыу.** Халыҡта кәбән төбөнә ятыу тигән дауалау ысулы ла бар, кұҙәткәнем булды. Бесән кәбәген (кәбән төбөндә йыйылған ыуаҡ үлән) ҙур һауытҡа һалып, ҡайнар һыу менән бешекләп, томалағас, тән бешмәслек булып йылымысланғанын самалағас, төшөп яталар йә ултыралар. Ул быуындар һыҙлағанда килешә. Дауаланыуҙы көн аша йә ике көн аша бер нисә рәт ҡабатлайҙар.

**Биртек йыйыу.** Ғәҙәттә, мин тегә йәки был дауалау ысулының нисек, нимә арҙамында шифаһы тейә икән тип, төбөнә төшөп үк тикшерергә тырышам. Тик ҡайһы саҡта электән килгән имләү ысулдарының асылын аңлап бөтөп булмай. Әйтәйек, биртек йыйыу. Әгәр өйҙә берәйһенең биле биртенһә, ғаиләләге баш бала үҙенә иптәш алып, ауылдағы ете өйҙән биртек ашы йыйып ҡайтырға тейеш булған. Иң бәләкәй булһам да, мине лә шулай ике туған апайыма эйәртеп, биртек йыйырға сығарғандары хәтерҙә.

"Билем, билем биртенгән, биртек ашы бирегеҙ", тип һамаҡлап, ете өйгә инеп, биртек йыйып алып ҡайттыҡ. Һауытыбыҙға кемеһе бер ус сәй, кемеһе ҡатыҡ, кемеһе икмәк һалды. Ауырыу ете төрлө ризыҡ ауыҙ итеп, ҡатығы менән ыуынып, шифа табырға тейеш. Был йоланың сере минең өсөн әле булһа асыҡ ҡала. Шуға күрә төплө белеүселәр булһа, фекер алышыуҙа көтәм.

**Бүсер имләү.** Өс ҡатындың йәш ярымлыҡ һеңлемдә ағас һаплы бысаҡ төйтәһе менән имләгәндәрен беләм. Ауырттырмай ғына, эстән нимәләр уҡып, эсенә тейер-теймәҫ кенә баҫҡылап имләгәйнеләр. Бүсер ҡалҡһа, көмөш аҡса ла һалып, бәйләп ҡуйып имләгәндәр.

**Бәүел тотмауҙан имләү.** Төнгә бәүелен тотмаған баланы, тирләп ҡайтҡан аттың ҡамытын систереп, шунын аша өс тапҡыр үткәргәндәрен күргәнем булды.

**Һөләк һалдырыу.** Боронғолар һөләк һалдырып та дауаланды. Әбейҙәрҙең өйөндә банка-банка булып ултырыр ине улар. Һөләк ҡан эсеп ҙурайып китеп, үҙе ысҡынып төшә, әбейҙәр уны шундуҡ тоҙло һыуға һалып, ҡанын ҡоҫтороп, таҙартып алырҙар ине.

**Кернә тартыу.** Халыҡта кемдеңдер башы ауыртып киткән осраҡта "һарҡыуым ҡалҡып китте" тип, түбә сәсенән бер шәлкем итеп тотоп, ныҡ ҡына итеп тартып-тартып дауаланыу ысулы бар. Ул, баҡһаң, "кернә тартыу" тип атала икән. Көслө баш ауыртыуын элек "тиренең һөйәккә йәбешеп китеүе менән бәйле" тип иҫәпләгәндәр.

**Хиджама.** Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт с.ғ.с сөннәтенән булған хиджама тигән дауаланыу ысулы ла киң таралды һуңғы йылдарҙа. Үҙем ауыртыныуҙың киҫкен ваҡытында хиджама эшләтеп, шифа алғаным булды. Уның тураһында мәғлүмәтте интернет селтәренән дә табырға мөмкин.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорттарҙың боронғо дауалау саралары бик күп. Улар заманса медицина күҙлегенән һанланмаһа ла, кәрәк тип табылмаһа ла, халыҡ араһында һаман да популяр булып ҡала килә, бөгөн дә ҡулланыла. Кешеләр табиптарҙың ғына түгел, имселәрҙең дә ярҙамына мохтаж. Ауырып киткәндә төшөнкөлөккә бирелмәй, сирҙе лә риза булып ҡабул итеп, сәбәләнмәй генә шифаланыу сараһын эҙләргә кәрәк. Шәхсән үҙем ауырып киткән осраҡта, "ошо сирҙе дарыуһыҙ ғына енеп сығып, көс-көрәмде арттырам" тип көйләйем. Ислам ҡанундарына буйһоноп йәшәү ҙә - үҙе бер сәләмәтлек. Намаҙ уҡыу, ураҙа тотоу, тәһәрәтләнеүҙең файҙаһы ла айырым һөйләшеү талап иткән тема. Киләсәктә, бәлки, ошо тәңгәлдә лә фекер алышырбыҙ.**

**Айгөл АЙЫТҠОЛОВА**
**яҙып алды.**



мәктәбендә, Йылайыр ауыл хужалығы техникумында, Башҡорт дәүләт университетында уҡығанда, Өфөләге 2-се һанлы педагогия музыка-художество колледжы етәксеһе булып эшләгәндә һәм Башҡортостан Республикаһы мәғариф министры урынбаҫары булған сағында ла спорттан айырылмай, йә үҙе спортсы, йә спорт мәктәптәрен асыусы һәм ҡурсалаусы булыуы тураһында һөйләне. Вәзәм ағинәйҙәре, ҡатын-ҡыҙҙары Вәзәм мәҙәниәт йортоноң яңы ғына ремонтланған йылы бинаһында оҙон өҫтәл тултырып тәмлекәстәр теҙеп ҡуйып, турнирҙа ҡатнашыусыларҙы ҡунаҡсыл һый менән ҡаршыланы. Вәзәм йәштәрен әйҙәп, төбәктә имам эшен алып барыусы Фәрит Сурин үҙе Суриндарҙан ғына бер команда туплаған һәм ҡапҡасы кейемен кейеп, һаҡҡа баҫҡан. Был командаға "Сурин кубогы" тапшырылды. Шулай уҡ Бүребай ауыл советы башлығы Эльвира Андреева һәм Бүребай мәктәбе директоры Альберт Боҫҡоновтар бер автобус итеп алып килгән йәш хоккейсылар быйылғы турнирҙың еңеүселәре исемен яулап, ҡыуанып ҡайтып киттеләр.

Был турнирға өр-яңы бәйгеләр ялғанып китте. Иртәгәһенә үк Әбеш, Вәзәм, Сик ир балалары һәм йәштәре тағы ла дәртләнеп заманса яңы ҡышҡы уйындарға тотондо. Мәҫәлән, яңыраҡ ҡына Вәзәмдә "Быймалы сәкән" уйыны гөрләп үткән. Боронғоса һәм бөгөнгөсә уйлап йәшәй вәзәмдәр: сәләмәтлек - ул бәхет, тиҙәр. Фәрит Сурин менән Фаил Ғәлиевтар ҡыштың селлә көндәрен халыҡтың һаулығы, ауылдың берҙәмлеге, көр күңеле өсөн файҙалы уйындарға бағышлай. Ил башлыҡтары ла төпкөл ауылдарҙа, саф тәбиғәт ҡосағында һау-сәләмәт, шат һәм булдыҡлы быуын үҫергә тейеш икәнен яҡшы белә, тимәк, уйындар, турнирҙар өсөн бөтә шарттар булдырыласаҡ.

Шулай итеп, Әбеш соҡоро тип йөрөтөлгән төбәктә, Шайтантау ҡурсаулығы эсендә яҡты һәм йылы өр-яңынан тәҙәкләнгән иҙән-сәхнәле Вәзәм ауыл мәҙәниәт йорто һәм уның янындағы хоккей ҡумтаһы янынан көскә айырылып ҡайтып киттек - бигерәк күңелле һәм матур йәшәргә әйҙәй сәләмәт тормош һаҡсылары.

**Кинйә МӘЗИТ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 5-се идея: Аҡ филдәр

Кемдеңдер дөрөҫ ҡарар ҡабул итмәүен, уйламай эшләүен, һөҙөмтәлә, ни эшләргә белмәй, юҡҡа-барға ҡыҙып барыуын йәки муйындан бурысҡа батыуын күрһәгеҙ, ни тиерһегеҙ? "Мин нимә эшләйем инде, үҙенә үҙең соҡор ҡаҙҙың бит", тип боролоп китеп барырһығыҙмы?

Ихтимал, беҙ барыбыҙ ҙа шулай тип әйтәбеҙҙер. Нисек кенә сәйер булмаһын, беҙ, ысынлап та, үҙ-үҙебеҙгә соҡор ҡаҙабыҙ. Тормоштағы бөтә күңелһеҙлектәргә беҙ үҙебеҙ күрәләтә барып тарыйбыҙ. Ҡайһы берҙә быны таныуы сәйер, әлбиттә, ләкин ысынында шулай бит.

Теләк, тәрән эске теләк, бик ҡеүәтле көс булып тора. Беҙ нимәнелер бик ныҡ теләйбеҙ икән, теләгебеҙҙен көсөргәнешлеге уның тормошҡа ашыуын яҡынайта. Ләкин, әгәр беҙ насарлыҡ теләйбеҙ икән, был көсөргәнеш күңел төшөнкөлөгө һәм яфа ғына килтерә. Насарлыҡ кешегә хас түгел; беҙ уға әләгергә маташабыҙ, ләкин ул беҙҙән шылып сығып китә.

Мин, бөтә иғтибарынды тормоштан билдәле бер нәмә алыуға ғына туплау хәүефлеләр, тип уйлайым. Эммет Фоке әйткән: "Үҙ теләктәрегеҙ менән һаҡ булығыҙ, сөнки һеҙ уларҙы тормошҡа ашыра алаһығыҙ!"

Ул хаҡлылыр, тип уйлайым. Йөрәгебеҙҙән сыҡҡан теләктәр беребеҙ ҙә аҙағынаса аңлап етмәгән серле юлдар буйлап хәрәкәт итә һәм, иртәме-һуңмы, тормошта килеп сағыла. Шуға күрә беҙ һаҡсыллыҡ күрһәтергә һәм нимәгә ынтылғаныбыҙҙы аңларға тейешбеҙ. Юҡһа, теләктәребеҙҙең предметы аҡ фил булыуы ихтимал!

Боронғо Һиндостандағы бер раджа үҙ халҡын бөлгөнлөккә төшөрөргә йыйынғас, халыҡ уға аҡ фил бүләк итә. Уны көн һайын ашатыу, йыуыу, биҙәү был кешене фәҡирлеккә төшөрә. Тормошобоҙҙа ла шул уҡ хәл. Теләктәребеҙ предметы ысынында "аҡ фил" булып сыға. Тормош беҙҙән аҡылһыҙ теләктәребеҙҙең күбеһен йәшерәләр, тип уйлайым, юҡһа, улар барыбер "аҡ фил" булып сығыр ине.

Моғайын, ниндәйҙер әйбер теләр урынға беҙгә күберәк аҡыл эҙләргә кәрәктер. Аҡыл эҙләү күпкә хәүефһеҙерәк, сөнки аҡылың булһа, башҡа кешеләр һәм уларҙың проблемалары менән маҡсатҡа ярашлы эш итеү өсөн ҡоралың бар, тигән һүҙ. Аҡыллы булһаң, һин күҙендә йомоп, ахмаҡ ҡарарҙы тормошҡа ашырам тип ташланмайһың, сөнки ул саҡта һинә әйләнеп тә ҡарамаясаҡтар һәм: "Шунан, теләгәнеңә ирештеңме? Шул кәрәк һинә", - тиәсәктәр.

Күптәр теләгәнен кисекмәҫтән ала алмаһа, уға ынтылыуҙан туҡтай. Улар ынтылған нәмәләрен теләй, ләкин нимәгә мохтаж, шуға ынтылмайҙар. Теләк менән ихтыяж араһында айырма ҙур. Күҙ алдына килтерегеҙ әле, бала саҡта ата-әсәйегеҙ, нимә теләһегеҙ, шуны рөхсәт итһә, нисек булыр ине: көҙгө кеүек эҫе самауырҙы йәки ялтлап янған ялҡынды тотоп ҡарарға, ағыулы химикаттар һалынған шешәнән эсергә һәм башҡалар. Һеҙ теләгегеҙ хаҡында ғына уйлағанһығыҙ, ә ата-әсәйегеҙ һеҙҙең быға мохтаж булмауығыҙҙы, быны һеҙгә тик зыян ғына килтерәсәген аңлап, һеҙҙе тыйған.

Быны теләктәребеҙ предметтары менән төп ихтыяжыбыҙ араһындағы айырма шунда. Әгәр беҙ әйбергә түгел, ә беҙҙең өсөн нимә мөһим булыуын аңлауға ынтылһаҡ, нимәгә мохтажбыҙ, шуларҙың бөтәһен дә булдырасаҡбыҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## БСТ

### 27 ЯНВАРЬ ДҮШӘМБЕ

7.00 "Сәләм".
9.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм.
10.00, 16.30 Т/с "Домочадцы". [12+]
11.00 Итоги недели (на рус. яз.).
11.45 "Специальный репортаж". [12+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә (на баш. яз.).
14.30 "Бай". [12+]
15.00, 17.45, 20.30 "Интервью". [12+]
15.15 Әлләсе... [6+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 "Ради добра". [6+]
18.15, 20.45 "Инцидент-репортаж". [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Дорожный патруль. [16+]
21.00 100 имен Башкортостана. [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 "Теге өсәү!" [12+]
23.30, 4.45 "Күстәнәс". [12+]
0.00 Т/с "Цыганки". Новости (на баш. яз.). [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Кодаса или полснохи меньшему брату". [12+]
5.15 "Орнамент". [6+]
5.30 Наука 102. [12+]
6.00 "Историческая среда". [12+]

### 28 ЯНВАРЬ ШИШӘМБЕ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00, 16.30 Т/с "Домочадцы". [12+]
11.15 "Республика Live. #Дома". [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 "Физра". [6+]
13.50 Хоккей. КХЛ. "Амур" (Хабаровск) - "Салават Юлаев" (Уфа).
17.45, 20.30 "Интервью". [12+]
18.00 "Гора новостей".
18.15 Д/с Дети-герои. [0+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Криминальный спектр. [16+]
20.45 Преград.net. [0+]
21.00 Уфимское "Времечко".
22.00 По сути дела... [12+]
23.00, 5.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Т/с "Цыганки". Новости (на баш. яз.). [16+]
2.00 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Зятек". [12+]
6.00 "Историческая среда". [12+]

### 29 ЯНВАРЬ ШАРШАМБЫ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00, 16.30 Т/с "Домочадцы". [12+]
11.15 По сути дела... [12+]
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 "Физра". [6+]
13.50 Хоккей. КХЛ. "Амур" (Хабаровск) - "Салават Юлаев" (Уфа).
17.45, 20.30 "Интервью". [12+]
18.00 "Гора новостей".
18.15 Д/с Дети-герои. [0+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Преград.net. [0+]
20.45 Честно говоря. [12+]
22.00, 6.00 "Историческая среда". [12+]
23.00, 4.15 Автограф. [12+]
23.30 "Земляки". [12+]
23.45 Т/с "Цыганки". Новости (на баш. яз.). [16+]
1.45 Бәхетнамә. [12+]
2.45 Спектакль "Девушка с монистами". [12+]
5.15 "Орнамент". [6+]
5.30 Наука 102. [12+]

### 30 ЯНВАРЬ КЕСАҘНА

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00, 16.30 Т/с "Домочадцы". [12+]
11.15 "Честно говоря". [12+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 Бәхетнамә (на баш.яз.).
14.30, 23.30, 5.15 "Земляки". [12+]
14.45 "Ради добра". [6+]
15.00, 17.45, 20.30 "Интервью". [12+]
15.15 Бирешмә. Профи. [6+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 Учим башкирский язык. [0+]
18.15 "Инцидент-репортаж". [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәңгелдәк". [0+]
20.15 Криминальный спектр. [16+]
20.45 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]
21.00 Уфимское "Времечко".
22.00 "Республика Live. #Дома". [12+]
23.00 Автограф. [12+]
23.45 Х/ф "Эрмезинда". [16+]
3.15 Спектакль "Лебедушка моя". [12+]
4.45 "Бай". [12+]
5.30 Наука 102. [12+]
6.00 "Историческая среда". [12+]

### 31 ЯНВАРЬ ЙОМА

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм. [12+]
10.00 Д/ф "Роберт Оссейн. Жестокий романтик". [12+]
11.15, 18.00 "Йома". [0+]
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00, 22.00 Точка Z. [12+]
12.30, 21.00, 4.00 Башҡорттар. [6+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 Үткән ғүмер. [12+]
14.00 Гора новостей. [12+]
14.20 Хоккей. КХЛ. "Адмирал" (Владивосток) - "Салават Юлаев" (Уфа).
17.00, 6.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
17.45, 20.30 "Интервью". [12+]
18.55 Баскетбол. Чемпионат России. Суперлига. "Уфимец" (Уфа) - ЦСКА-2 (Москва).
20.45 "Инцидент-репортаж". [12+]
23.00 Караоке по-башкирски. [12+]
23.30 "Уфа. Живое". [12+]
0.15, 4.30 Х/ф "Убийство в Ла-Рошель". [16+]
2.15 Спектакль "Люди на том берегу..." [12+]

### 1 ФЕВРАЛЬ ШӘМБЕ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 19.15 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Аль-Фатиха". [12+]
8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]
9.15 Посмотрим... [6+]
10.00 "Физра". [6+]
10.15 Преград.net. [6+]
10.30 Сыйырсык. [0+]
10.45 "Книга сказок". [0+]
11.00 "Апчхи". [0+]
11.15 Байтус. [6+]
11.30 "Гүзәлкәй". [6+]
12.00 "Күстәнәс". [12+]
12.30 Үткән ғүмер. [12+]
13.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]
13.15 "Земляки". [12+]
13.30 Хазина о Хазине. [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
15.30 Колесо времени. [12+]
16.30 Матч звезд Ассоциации студенческого баскетбола.
19.45 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
20.30 "Сәңгелдәк". [0+]
20.45 "Ради добра". [6+]
21.00 Автограф. [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Караоке по-башкирски. [12+]
22.30, 2.15 Итоги недели (на баш. яз.).
23.15 "Волшебные звуки курая". Гала-концерт конкурса кураистов. [12+]
0.45 Х/ф "Пленники солнца". [16+]
3.00 Спектакль "Любовница". [12+]
5.00 Д/ф "Млечный путь". [12+]
5.45 Д/ф "Роберт Оссейн. Жестокий романтик". [12+]

### 2 ФЕВРАЛЬ ЙӘКШӘМБЕ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 "Бай". [12+]
9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]
9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]
10.00 "Бейе". [0+]
10.15 АйТекә! [6+]
10.30 "Детей много не бывает". [0+]
11.00 "Сулпылар". [0+]
11.30 Гора новостей. [6+]
11.50 Хоккей. КХЛ. "Адмирал" (Владивосток) - "Салават Юлаев" (Уфа).
14.30 "Дарю песню". [12+]
16.30 "Дорога к храму". [0+]
17.00, 5.30 "Историческая среда". [12+]
17.30 Новогодний звон "Сулпылар". [0+]
19.15 Лидеры региона. [12+]
19.45 Әлләсе... [6+]
20.30 "Теге өсәү!" [12+]
21.00, 22.30 "Республика Live. #Дома". [12+]
21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).
22.15, 6.45 "Специальный репортаж". [12+]
22.45 "Красная кнопка". [16+]
23.30 Концерт заслуженной артистки РБ Резеды Аминевой. [12+]
1.00 Х/ф "Точка невозврата". [12+]
2.30 Спектакль "Морозное дыхание метели". [12+]
4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]

ЭТО ПОЛЕЗНО ЗНАТЬ

# Обогреватель с эффектом горячего кирпича

## Современный вариант русской печи от завода "ТеплЭко"




**В старину русская печь занимала половину избы, требовала внимания и заботы, а за отдаваемое тепло заставляла человека поработать. Зато в доме всегда было тепло и комфортно. Современная система центрального отопления избавила нас от необходимости растапливать печь и подкидывать дрова, но многие все же не отказались бы обзавестись хотя бы "буржуйкой".**

Что ж, мечты сбываются! Не "буржуйкой", а целой русской печью сегодня может обзавестись каждый, при этом займет новая печь всего *около одного квадратного метра на стене,* не потребует дров и вообще какого-либо внимания, ее всего лишь надо включить в розетку.

Речь идет об экономичном обогревателе **"ТеплЭко",** который сочетает в себе теплоносные характеристики кирпича русской печки и современные технологии, сделавшие его компактным и экономным.

### МЕЧТЫ О ТЕПЛЕ

Во многих квартирах батареи то греют, то не греют. Если в мае квартирную "печку" можно отключить, в сентябре ее не включишь, так как отопительный сезон еще не начался. А еще иногда батареи засоряются... А еще падает давление в системе... А еще... Да мало ли отговорок мы слышали о том, почему в квартире вдруг становится холодно. Послушав о причинах похолодания, мы достаём обогреватели, какие у кого есть: масляные, тепловентиляторы, калориферы. Одни сушат воздух, другие угрожают пожаром, к третьим нельзя подпускать детей. В общем, мороки с ними не меньше, чем с громадной русской печью. При этом они еще крайне "прожорливы": счет за электроэнергию лучше оплачивать с закрытыми глазами!



Обогреватель **"ТеплЭко"** разом решает все эти проблемы. Он представляет собой декоративную панель, внутри которой спрятан хромоникелевый нагреватель, залитый составом из кварцевого песка. **"ТеплЭко"** можно использовать, как отдельно, так и создавать отопительные системы - количество обогревателей зависит от площади. Один обогреватель устанавливается на 9 квадратных метров, при условии стандартной высоты потолков. До требуемой температуры такая панель нагревается за 10-15 минут, а остывает, как плотная кирпичная стена - несколько часов.

**"ТеплЭко"** не сушит воздух, не сжигает кислород, пожаробезопасен (так как поверхность не нагревается более чем до 98 градусов) и в четыре раза экономнее обычного чайника (даже за сутки работы одна панель потребляет всего 2,5 кВт при использовании терморегулятора). Номинальная мощность обогревателя: 400 Вт, размер: 600 мм*350мм*25мм, вес: 12 кг.

### ВЛИЯНИЕ НА ЗДОРОВЬЕ ЧЕЛОВЕКА

Тепло - это инфракрасные лучи, но не все из них безопасны для человека, только те, которые находятся в диапазоне излучения человеческого тела - от 6 до 20 мкм. Внешнее излучение с такими длинами волн наш организм воспринимает как своё собственное и интенсивно его поглощает. За счет этого в организме активизируется микроциркуляция крови, ускоряется метаболизм, улучшается самочувствие, исчезает усталость. Природный источник длинноволновых инфракрасных лучей - это солнце, а бытовой - русская печь, излучающая тепло, комфортное для организма. Обогреватели **"ТеплЭко"** используют естественные свойства кварцевого песка накапливать тепло, а затем долгое время отдавать его в длинноволновом инфракрасном диапазоне по принципу горячего кирпича. В отличие от всех других обогревателей, **"ТеплЭко"** не только безвреден, но и оказывает благотворное влияние на здоровье человека.

### САМОСТОЯТЕЛЬНЫЙ И НАДЁЖНЫЙ

Главное преимущество обогревателя **"ТеплЭко"** - его самостоятельность. Оптимальную температуру, которую он должен поддерживать в комнате, можно задать с помощью терморегулятора. *И все. Он будет работать, создавая атмосферу настоящего домашнего, "обжитого" уюта - когда можно играть с детьми на полу, спокойно спать, ворочаясь и раскрываясь, какие бы морозы ни трещали за окнами.* Еще обогреватель **"ТеплЭко"** идеально подходит для дачи, гаража и офиса. Несколько обогревателей способны полностью заменить центральное теплоснабжение.

Завод **"ТеплЭко"** является единственным в России производителем энергосберегающих обогревателей из кварцевого песка высокой степени очистки. Купить обогреватель вы можете в нашем фирменном магазине или заказать доставку по телефону. А для установки обогревателя потребуется минимум сил и сноровки, три самореза и отвертка.

И пусть простота обогревателя не вызывает никаких сомнений в его долговечности. Как известно, все гениальное устроено довольно просто. И обогреватель **"ТеплЭко"** может работать практически вечно, ведь его нагревательные элементы не контактируют с воздухом и не окисляются. Гарантия пожизненная.*

ЭКОНОМИЧНЫЙ 2-3,5 кВт в сутки при использовании терморегулятора
БОЛЬШОЙ СРОК СЛУЖБЫ пожизненная гарантия*
БЕЗОПАСНЫЙ 100% пожаробезопасность
КОМФОРТНЫЙ Не сушит воздух, не сжигает кислород
ПРОСТОЙ В УСТАНОВКЕ Справится любой хозяин дома
ЭКОЛОГИЧНЫЙ Наша продукция соответствует санитарным требованиям
ПОЛЕЗНЫЙ ДЛЯ ЗДОРОВЬЯ Улучшает самочувствие, исчезает усталость

СДЕЛАНО В РОССИИ
Подтверждено европейское качество
CE

ТЕПЛЭКО

Единственный фирменный магазин компании "ТеплЭко" в Уфе расположен по адресу:
**ул. Конституции, 2. Время работы: пн. - суб. с 10 до 20 часов без обеда, воскресенье - выходной. Тел.: (347)214-93-08, (964) 956-23-00, 8 800 333 05 35 (звонок бесплатный по России)**
ОСТЕРЕГАЙТЕСЬ ПОДДЕЛОК!
tepleko.ru
ОГРН 1177847333993, *срок эксплуатации 10 лет.

На правах рекламы.

✓ *Талантлылар һәм талантһыҙҙар бәйгеһендә уртаҡулдар уҙып киткән һәммәһен дә.*

*(Рәшит Шәкүр).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТ МУЗЫКА ҠОРАЛДАРЫ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**3-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Кинйә. Салауат. Маҡан. Ҡәйнә. Сирек. Бүгәсәү. Ҡаранай. Силәк. Әрҙәнә. Зенон. Ике. Өршәк. Юлай. Уҡ. Өрләк. Әпше. Амин. Любляна. Әбдей. Марафон. Нишатыр.

**Вертикаль буйынса:** Ҡәнзәфәр. Ҡырсынташ. Наян. Саян. Юламан. Әбйәлил. Келәм. Күңел. Йәйләмә. Ҡиәмәт. Юшан. Манго. Әйтем. Нар. Сүс. Өйөнә. Илар. Әрйә. Кҡк. Күкәй.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 ғинуар "Әҙләнем, бәгерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+
**29 ғинуар "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 12+
**30 ғинуар "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 12+
**31 ғинуар "Янғыҙ юлаусы"** Артур Кәбировтың акустик концерты. 6+
**1 февраль "Гөлбостан"** (Ҡ. Даян, Д. Йосопов) 18.00 12+
**2 февраль "Гөлбостан"** (Ҡ. Даян, Д. Йосопов) 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**29 ғинуар "Униженные"** (З. Биишева), драма. 12+
**31 ғинуар "Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәким), комедия. 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**1 февраль "Сказка о царе Салтане"** (А. Пушкин) 12.00, 14.00 0+
**"Маленький гном"** (И. Әлмөхәмәтов), әкиәт. 16.00 0+
**2 февраль "Алиса в стране чудес"** (С. Чураева), 12.00, 14.00 6+
**"Маленький гном"** (И. Әлмөхәмәтов), әкиәт. 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**28 ғинуар "Сказ про Федота-стрельца"** (Л. Филатов), Николай Рихтер һөйләй. 6+
**1 февраль "Музыку слушаем вместе"** 11.00, 13.00 0+
**2 февраль "Weekend с камерным оркестром"** популяр классика. 15.00 0+

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ХУЖАҺЫҘ МАШИНАЛАР...



**Былтыр йыл һуңында махсус комиссия ташландыҡ, хужаһыҙ һәм һүтелгән транспорт сараларын асыҡлау буйынса рейдтар үткәрҙе, уларҙы махсус һаҡлау урындарына күсереү тураһында иҫкәрмә таратты.**

Махсус комиссия "юғалған" хужаларҙы бер нисә тапҡыр иҫкәрткәндән һуң да талаптар үтәлмәһә, тейешле бойороҡ булғандан һуң мәғлүмәт ҡала хакимиәтенең рәсми сайтында һәм "Вечерняя Уфа" гәзитендә баҫылып сығасаҡ һәм был транспорт саралары мәжбүри рәүештә махсус туктаҡаларға күсереләсәк. Был осраҡта инде уларҙы һаҡлау өсөн унын хужаһынан, ул килеп алғанға тиклем, һәр тулы тәүлек өсөн билдәле хаҡ алынасаҡ. Һораужар тыуған осраҡта, транспорт хужаларына Өфө ҡалаһының Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығына Өфө ҡалаһы, Ибраһимов бульвары, 84 адресы буйынса 308-се бүлмәгә йәки (347)273-12-62 телефоны буйынса мөрәжәғәт итергә кәрәк. Бынан тыш, ташландыҡ транспорт саралары тураһында +7(986) 964-13-22 номеры буйынса WhatsApp ҡушымтаһына яҙырға мөмкин. Мәғлүмәткә ташландыҡ транспорттың фотоһы йәки маркаһы, моделе, төҫө, дәүләт теркәү билдәһе (әгәр булһа), ентекле итеп унын ултырған урыны һәм мәғлүмәтте ебәреүсенең фамилияһы, исеме, атаһының исеме яҙылырға тейеш. Шулай уҡ Өфө халҡы oksb308@yandex.ru электрон почтаһы адресы буйынса ла, ҡала хакимиәтенең рәсми сайтына яҙып та хәбәр итә ала.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Ғинуар - февраль (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 27 (2) дүшәмбе | 7:48 | 9:18 | 13:30 | 16:10 | 17:40 | 19:10 |
| 28 (3) шишәмбе | 7:46 | 9:16 | 13:30 | 16:12 | 17:42 | 19:12 |
| 29 (4) шаршамбы | 7:44 | 9:14 | 13:30 | 16:14 | 17:44 | 19:14 |
| 30 (5) кесе йома | 7:43 | 9:13 | 13:30 | 16:16 | 17:46 | 19:16 |
| 31 (6) йома | 7:41 | 9:11 | 13:30 | 16:18 | 17:48 | 18:18 |
| 1 (7) шәмбе | 7:39 | 9:09 | 13:30 | 16:20 | 17:50 | 18:20 |
| 2 (8) йәкшәмбе | 7:37 | 9:07 | 13:30 | 16:22 | 17:52 | 18:22 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ШЫЛТЫРАТ!

Иҫегеҙҙә булһа, баш ҡалала туктаһыш павильондарына, бағаналарға, башҡа конструкцияларға рекламаларҙы һәм иғландарҙы рөхсәтһеҙ йәбештереүгә ҡаршы "Автодозвон" системаһы эшләй башлағайны.

Йәғни иғланда күрһәтелгән номерҙы системаға индереү менән ул бер туктауһыҙ автоматик рәүештә шылтырата башлай һәм абонентты законһыҙ рәүештә иғлан урынлаштырыу өсөн яза ҡаралыуы тураһында иҫкәртеп, иғланды алыуҙы талап итә. Системаға ҡаланың битараф булмаған граждандары ла ярҙамлаша: улар хоҡуҡ боҙоусылар тураһында Йәмәғәт имменлеге үҙәгенә иғландарҙы фотоға төшөрөп, фотофакттар ебәрә.

Башҡортостан Республикаһының Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексында бындай хоҡуҡ боҙоуҙар өсөн граждандарға 500-1000, вазифа биләүселәргә - 2-5 мең, предприятие-ойошмаларға 10-15 мең һум штраф ҡаралған. Шул уҡ эшмәкәрлек менән икенсе тапҡыр әләгеүселәргә штраф күләме арта: граждандарға - 1500-2500, вазифа биләүселәргә - 5-10 мең, ойошма-предприятиеларға - 20-30 мең һум.

СӘНҒӘТ. ӘҘӘБИӘТ. МӘҘӘНИӘТ.

# "ЯҢҒЫҘ ЮЛАУСЫ"




**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының талантлы актеры, Ш. Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Артур Кәбиров ижадын һөйөүселәрҙе "Яңғыҙ юлаусы" тип исемләнгән акустик концертына йыя. Уҙғарыласаҡ сара тураһында ижадсының үҙенән һораштыҡ.**

- Был минең икенсе акустик концертым, тәүгеһе 2017 йылда "Ут биреп торған сағым" тип аталғайны, - ти Артур Зиннур улы. - Ошо арауыҡ эсендә мондаш дуҫтарым менән бүлешер ижад емештәрем, уй-фекерҙәрем дә байтаҡ тупланған. Шуға тере тауыш, яҡын аралашыу, гитара моңон ишетеүгә сарсаған тамашасыларымды саҡырам. "Яңғыҙ юлаусы" тип тә юҡҡа ғына аталмаған концертым: йырым юлдарынан алынған һүҙбәйләнештең асылы менән генә түгел, күңелемде арбаған моң, Рәми Ғариповтың шиғриәт донъяһы менән дә таныштырырға йыйынам. Репертурҙа күптән билдәле композициялар ҙа, спектаклдәрҙә башҡарған һәм яңы йырҙарым да яңғырар. Уларҙың һәр ҡайһыһының үҙ тарихы бар һәм мотлаҡ тыңлаусыларыма ла бәйән итәсәкмен. Минең менән бергә ижадташ дуҫтарым Айгөл Мөслимова (скрипка), Марина Яковлева (флейта), Рәмис Хәкимов (синтезатор), Рәсим Лугаманов (һуҡма инструменттар), Илшат Дәүләтбирҙин (соло-гитара) ғинуарҙы оҙата.

Буласаҡ тамашаның бөтә "серҙәрен" дә сисмәй артист, йыр һөйөүселәрҙе көтөп ҡала!

# ТЕАТР ДЕКАДАҺЫ ҮТӘ

**Өфөлә 30 ғинуарҙан 11 февралгә тиклем театр декадаһы уҙғарыла. Унда Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры, М. Кәрим исемендәге БР Милли йәштәр театры, Сибай, Салауат, Стәрлетамаҡ һәм Туймазы ҡалалары театрҙары ҡатнаша.**

Баш ҡала тамашасыһы 30 ғинуар сәғәт киске етелә М. Кәрим исемендәге БР Милли йәштәр театры сәхнәһендә Сибай концерт-театр берекмәһе "Сулпан" балалар театрының "Батырҙарҙы данлар илем бар" тип аталған постановкаһын ҡарай ала. Ошо уҡ театрҙа 1 февраль көнө Туймазы татар драма театры Мостай Кәримдең повесы буйынса ҡуйылған "Ауыл адвокаттары" спектаклен ҡарарға тәҡдим итә. А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры 3 февралдә "Нур" Өфө дәүләт татар театры сәхнәһендә Тажи Ғиззәттең "Башмағым" спектакле премьераһын күрһәтә; ә 4 февралдә Милли йәштәр театрында А. Әхмәтовтың "Үгәй ҡыҙ" пьесаһы буйынса балалар өсөн әкиәт ҡуйыла, тамаша 11.00 һәм 13.00 сәғәттәрҙә башлана.

Салауат башҡорт драма театры коллективы артистары башҡарыуында М. Буранғоловтың "Иҙеүкәй менән Мораҙым" башҡорт халыҡ эпосы буйынса яҙылған "Иҙеүкәй" пьесаһын өфөләр 6 февралдә "Нур" театрына барып ҡарай ала. 7 февралдә ошонда уҡ Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берекмәһе М. Кәримдең "Ай тотолған төндә" спектаклен ҡарарға тәҡдим итә. Был көндә М. Кәрим исемендәге БР Милли йәштәр театры тамашасыларын "Я - кулак. Я А-Н-Н-А" (М. Райцес) спектаклен ҡарарға саҡыра. Театр декадаһы 11 февралдә Стәрлетамаҡ урыҫ театрының "Севильский цирюльник" (П. Бомарше) комедияһын "Нур" театрында сәхнәләштереүе менән тамамлана.

# ӘҘЕРЛЕК БАРА

**Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында дүрт йылға бер тапҡыр уҙғарылған Бөтә донъя фольклориадаһына материалдар әҙерләү башланды.**

Билдәле башҡорт фольклорсыһы, филология фәндәре докторы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Фәнүзә Нәҙершина һәм ғилми хеҙмәткәр Элла Созинова башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә "Сал Урал хазиналары" - "Сокровища Седого Урала" - "The Treasures of the Ancient Urals" тигән китап-альбом әҙерләне. Баҫмаға тау, йылға-күлдәрҙең килеп сығышын аңлатҡан башҡорт халыҡ риүәйәттәре һәм легендалары, уларҙың матурлығын һәм бөйөклөгөн данлаған йырҙар, "Урал батыр", "Заятүләк менән Һыуһылыу" эпостарынан өҙөктәр индерелгән. Тәҡдим ителгән фольклор өлгөләре кешенең тәбиғәт менән айырылғыһыҙ бәйләнешен, тыуған ерҙең изге булыуын күрһәтә. Китап киң ҡатлам уҡыусыларҙа, 2020 йылдың 18 июленән 1 авгусына тиклем уҙғарылған Бөтә донъя фольклориадаһында ҡатнашыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыр тип иҫәпләй авторҙар. Был сарала 100 илдән 3 меңдән ашыу делегат ҡатнашыр тип көтөлә һәм әлеге көндә 85 дәүләт үҙенең килеүен раҫлаған. Улар үҙҙәренең традицион музыкаһы, бейеүҙәре, халыҡ кәсептәре, аш-һыуы, милли кейеме һәм сәхнә сәнғәте менән таныштырасаҡ. Фестиваль көндәрендә Башҡортостанға 2,5 миллион турист килер тип көтөлә. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров VI Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу буйынса федераль ойоштороу комитеты ултырышында белдерҙе.

# ТАМАШАСЫ ҺӨЙӨҮЕ

**Татарстан Республикаһы Театр эшмәкәрҙәре союзының Актерҙар йортонда кинематография өлкәһендәге I "Алтын тәлинкә" төбәк-ара премияһының беренсе этабын бүләкләү тантанаһы уҙҙы. Тауыш биреүҙә бөтәһе 40 меңгә яҡын кеше ҡатнашты, тип хәбәр итә "Татар-информ".**

Онлайн-тауыш биреү йомғаҡтары буйынса тамашасылар һөйөүе призын Булат Йософовтың "Беренсе Республика" тулы метражлы фильмы яуланы. Ул 12 меңдән ашыу тауыш йыйып, Президент гранттары фондының 300 мең һумлыҡ ярҙамын алды. Был аҡса Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповҡа арналған "Рәми көндәлеге" фильмын төшөрөү өсөн файҙаланыласаҡ. "Был минең өсөн беренсе кинопремия, уны Ҡаҙанда "Время кино" дирекцияһының ойоштороуы - ҡаһарманлыҡ, сөнки төбәк киноһы - ул бик үҙенсәлекле", - ти был турала "Беренсе Республика" продюсеры Леонид Филинов. Әйткәндәй, "Тамашасылар һөйөүе" номинацияһында икенсе бүләкте Ҡаҙандың "Кахексия" проекты алған (11 меңдән ашыу тауыш). Өсөнсө урында Александр Яцентюктың "Давай спать вместе" ҡыҫҡа метражлы фильмы (10 меңдән ашыу тауыш).

# РЕПЕРТУАРҘА ЯҢЫ БЕЙЕҮ

**Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле адыгей халыҡ бейеүен башҡарасаҡ. Уны ҡуйыу өсөн Өфөгә Адыгеяның "Нальмэс" дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең художество етәксеһе һәм баш балетмейстеры Аслан Хаджаев килде.**

Бейеү бик үҙенсәлекле һәм техник яҡтан ҡатмарлы. Сәхнәлә бер үк ваҡытта 36 артист бейей. "Башҡортостандағы коллегаларыбыҙ репетицияға бик теләп ҡушылды, костюмдар әҙерләү өҫтөндә лә эш алып барыла. Был бейеү беҙҙекенең күсермәһе була, костюмдар ҙа ҡабатлана", - тип хәбәр итә Адыгея коллективы социаль селтәрҙә. Аслан Хаджаев ҡатын-ҡыҙ һәм ир-егет костюмдарының өлгөләрен үҙе менән алып килгән һәм уларҙы беҙҙең бейеүселәр өсөн өс төҫтә итеп тегә башлағандар ҙа инде. Яңы бейеүҙең премьераһы 2020 йылдың февраленә билдәләнгән.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ғинуар айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Ауырғазы районы** Мораҙым ауылынан Филарис Ҡусҡаров, Әминә Ҡусҡарова, **Өфө районы** Шамонин ауылынан Рәйлә Ҡалҡаманова, Мәүлиҙә Тимербаева, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Әмир Булатовты һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Тән сәләмәтлеге, йән тыныслығы теләйбеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИШӘК - АУЫРЫҒАНЫН...

## ир ҡартайғанын белмәҫ

Һәр бәндә күрәһене күрмәй ҡалмаҫ, кәрәк солтан булһын, кәрәк император...

**(Аҡмулла).**

Талантлылар һәм талантһыҙҙар бәйгеһендә уртаҡулдар уҙып киткән һәммәһен дә.

**(Рәшит Шәкүр).**

Йәшлек бер ваҡытта ла тормошҡа ашмаҫтай нәмәләр тураһында хыяллана, ҡартлыҡ бер ваҡытта ла тормошҡа ашмаған нәмәне хәтергә ала.

**(Гектор Манро).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ҡыҙҙың ҡанаттары бар ине. Ә егет быны күрмәмешкә һалышты. Ҡыҙ оса белә ине. Ә егет был хаҡта ишетергә лә теләмәне. Таң менән уны алһыу болоттарҙан төшөрә лә: "Ҡуй, юҡты, иҫәрләнмә. Һин бит оса белмәйһең", - тип көлә генә ине. Ә ҡыҙ үпкәләмәне. Һаман да оса бирҙе. Яңғыҙы болоттар буйлап йөрөнө, әҙәм балаларының хыялдарын күҙәтте, шул хыялдарҙы нәзәкәтле бармаҡтары аша ҡом кеүек ҡойоп уйнаны.**

**Ҡыҙ ямғыр яратты. Ҡойондоң иң уртаһына барып, ул күк менән ерҙең шыбырлап аралашҡанын тыңланы. Ә ямғыр туҡтағас, ул офоҡтан бейек тауҙарға тиклем йәйғор төшөрә ине. "Ҡуй, юҡты. Табылған рәссам..." - тип мыҫҡыллай ине егете.**

**Ә тағы ҡыҙ ысын шағир кеүек, һәр нәмәнең йәнен тоя ине. Урманға барһалар, үләндәр менән ағастар көлөшкәнен, ҡырмыҫҡа менән бөжәк талашҡанын, сәскә менән бал ҡорто иркәләшкәнен сәғәттәр буйы һөйләр ине лә... "Ҡуй, бушты. Шағир, имеш..." - егетенең шулай тигәненән тағы күңеле ҡайта ине. Ә иң мөһиме - ҡыҙ ошо егетте ярата ине. Алһыу болоттар наҙын да, ямғыр йырҙарын да, йәйғорҙоң ете төҫөн дә тик уға ғына бағышлай ине. "Ҡуй, бушты, баш ҡатырма", - тип ҡул һелтәп кенә ҡуя ине егете.**

**Бер ваҡыт ҡыҙ түҙмәне, йондоҙҙарға табан осто ла осто, осто ла осто, осто ла осто... Һәм башҡаса егет янына ҡайтманы.**

**Ямғыр яуғанда егет тышҡа сыҡты, ер менән күктең һөйләшкәнен тыңлап, һөйгәне тураһында берәй хәбәр булмаҫмы, тип өмөтләнде, тик уларҙың бер һүҙен дә аңлай алманы. Ҡыҙҙың ете төҫ ҡәләмен алып, йәйғор төшөрҙө - тик бер нимә лә килеп сыҡманы. "Мин рәссам түгел шул", - тип ҡуйҙы шунан. Урманға сығып ҡараны, әммә ағастар менән үләндәр ҙә, ҡырмыҫҡа менән бөжәктәр ҙә, сәскә менән бал ҡорто ла бер нимә лә өндәшмәне уға. "Мин шағир түгел шул", - тип бошондо егет. Шунан ул ҡанаттар тағып, алһыу болоттарға үрмәләне. Иң бейек болотҡа баҫып, аҫҡа ҡарай һикерҙе. "Мин оса белмәйем шул", - тине һуңынан..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
24 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 4007
Заказ - 53/01